*Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Яҙғы, йәйге мәшәҡәттәр башланмаҫ борон 2010 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып ҡалығыҙ, тип саҡырабыҙ һеҙҙе. Яңы хаҡтарҙы иғлан итәбеҙ: 50665 индекслы "Киске Өфө" алты айға 318 һум 24 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 354 һум 24 тин тора. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №14 (380)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Боксерҙар ярыша



5

Нухтың кәмәһе ҡайҙа?

йәки Илле йыл элек төшөрөлгән бер фотоһүрәт эҙҙәренән



6-7

Халыҡ үҙ-үҙенән көлә ала икән...



8-9 тимәк, ул халыҡтың киләсәге бар

Ҡустылары ла шәп, ағаларына лайыҡлылар



15

14 ТВ-программа

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ВӘҒӘҘӘ - ИМАН, ТИП, ҡарттарҙы тағы ҡыуандырҙылар

**Тамсынан - күл,тиндәрҙән һум йыйыла, тигәндәй, һуңғы йылдарҙа пенсия күләме әкренләп булһа ла бер аҙ арҡандай тойолдо. Әлбиттә, илдә барған әлегеләй иҡтисади-финанс тотороҡһоҙлоҡ шарттарында ул күпме генә артһа ла - инфляция, икенсе яҡтан, ай үҫәһен көн үҫеүсе һәм бер нисек тә туйына белмәүсе торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тарифтары барыбер уны йотоп тора.**

Ошо йылдың 1 ғинуарынан үткәрелгән валоризация һөҙөмтәһендә пенсия 30 процентҡа артып, айлыҡ уртаса пенсия күләме 7119 һумға еткерелгәс, март башында Рәсәй Хөкүмәте ултырышында шау-шоулы бәхәс ҡупҡан икән. Бәлки, ошоһо ла етеп торор, 1 апрелдән тигәнен "тоҙлайыҡ", тип әйтә икән министрҙарҙың бәғзеләре. Икенселәре, вәғәҙә - иман, уны боҙабыҙмы ни, халыҡты алдау була бит был, тип ҡырталаша икән. Тәүгеләрҙең һүҙе өҫкә сыҡһа, алдауға өйрәнгән ябай халыҡ быны 1 апрелдең уҫал шаярыуы тип ҡабул итер ине лә, һәр ваҡыттағыса, тешен ҡыҫып, түҙер ине. Ләкин Еңеү датаһы алдынан халыҡты улай "шаяртырға" намыҫтары ҡушмағандарға рәхмәт инде: 1 апрелдән пенсия тағы ла (быныһы, бәлки, һуңғы тамсы, һуңғы тиндәр булыр) 6,3 процентҡа арта. Йәмғеһе, Рәсәй Хөкүмәте вәғәҙә иткән 46 процент тәьмин ителде, тигән һүҙ. Ошо көндәрҙә Рәсәй Пенсия фонды 2010 йылдың 1 апреленән артасаҡ пенсия күләмен индексациялау тураһында хәбәр итте. Алдан иғлан ителеүенсә, хеҙмәт пенсияһы 6,3 процентҡа артасаҡ. Шуға ярашлы, ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 8 180 һумға етәсәк. Социаль пенсия алыусыларҙы ла 8,8 процент күләмендә өҫтәмә көтә, һөҙөмтәлә был төр пенсияның уртаса күләме 4 611 һум тәшкил итәсәк.

1 апрелдән шулай уҡ ветеран һәм инвалидтарға льгота урынына бирелә торған аҡсалата айлыҡ түләүҙәр ҙә (ЕДВ) 10 процентҡа индексациялана. Ә инде Еңеүҙең 65 йыллығы хөрмәтенә бер тапҡыр түләнелә торған махсус түләүҙәр менән һөйөндөрмәкселәр, ул апрель айы пенсияһы менән бергә тапшырыласаҡ.

Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм ветерандары; ул саҡта бәлиғ булмаған йәштәге концлагерь тотҡондары; Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, Финляндия һәм Япония менән һуғыштарҙа һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең тол ҡатындары; вафат булған Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм тол ҡатындар 5-әр мең һум аҡса аласаҡ.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда тылда ярты йылдан да кәм эшләмәгән ветерандарҙы; Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фиҙакәр хеҙмәте өсөн СССР ордендары һәм миҙалдары менән наградланған ; ул саҡ бәлиғ йәштә булған концлагерь тотҡондарына 1-әр мең һум аҡса түләү ҡарала.

Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы хөрмәтенә бер тапҡыр түләнелә торған сумма бөтәһе 4,2 миллиондан ашыу кешегә тапшырыласаҡ. Был маҡсаттарҙа Пенсия фонды бюджетында 11 миллиард һумға яҡын аҡса ҡаралған.

АФАРИН!

**Яңыраҡ баш ҡалабыҙҙа III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арналған донъя әкиәттәрен башҡорт телендә башҡарыусыларҙың "Һаумы, һаумы, әкиәт!" исемле беренсе ҡала конкурсы үтте. Конкурстың маҡсаты һәм бурысы әкиәтселәр, сәсәндәр мәктәбен тергеҙеү һәм үҫтереү, башҡорт һәм донъя халыҡтары ижадындағы әкиәттәрҙең иң яҡшы өлгөләрен таратыу, йәш быуында башҡорт халҡының тарихына һәм мәҙәниәтенә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, уҡыусыларҙың шиғри һәм импровизаторлыҡ һәләтен үҫтереү, фекерләү, телмәр, хәтер, тауыш мәҙәниәтен камиллаштырыу ине.**

# ӘСӘ ТЕЛЕНӘ ҺӨЙӨҮ...

## әкиәттән башлана

(Дауамы 16-сы биттә).



13-сө башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбенең IV класс уҡыусыһы Гөлйәҙәм Тимербулатова.

## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ

**"Башҡорттар - абстракт фекерләүгә һәләтле, зирәк аҡыллы, һөйкөмлө халыҡ, улар сиктән тыш тәьҫирләнеүсән, хыялға бирелеүсән, ҡыҙыу, ләкин тиҙ һүрелеүсән, киң күңелле һәм ҡунаҡсыл халыҡ - уларҙы тик ялҡау ғына таламай һәм иҙмәй".**

**Д.Н. МАМИН-СИБИРЯК. "Өмә" хикәйәһе.**

**"Башҡорттар ауыл-ауыл булып кейеҙ тирмәләрҙә йәшәй. Улар иртә яҙҙан башлап ҡара көҙгә саҡлы йәйләүҙәрҙә була, ҡымыҙ эсә, бөркөт һәм ҡарсыға сөйөп һунарға йөрөй, егетлектә ярыша, мәргәнлектә һынаша, йәйәләрҙән уҡтар ата. Улар бөтәһе лә йылҡы малын бик ярата, иҫәпһеҙ-һанһыҙ һыйыр малы тота, дала яҡтарында йәшәгәндәре дөйә лә аҫырай. Бынан тыш, урман башҡорттары кейек-йәнлектәргә һунар итә һәм солоҡсолоҡ менән шөғөлләнә".**

**Ф.Д.НЕФЕДОВ.**

**"Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығын, бигерәк тә ситтән килгәндәргә ихтирамдарын беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Башҡорттоң ҡунағы - изге йән, уның өсөн ул иң һуңғы һарығын йәки тайын булһа ла һуйып ашата. Ҡунаҡ ҙур дәрәжәле булһа ла, башҡорт, ялағайланып, түбәнселеккә төшмәй, уға ярамһаҡланмай, үҙ абруйын һаҡлап ҡала белә".**

**Д.П. НИКОЛЬСКИЙ.**

***✓ Эш шунда: ул автобустарҙа йөрөү хаҡы 50 процентҡа күтәрелгәс, халыҡ уларға ултырмай, ә инде ултырғандары яртылаш буш салонда үҙҙәрен плацкарт вагондағы һымаҡ тоя икән.***



*ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН*




## Өфө

● Баш ҡалабыҙ урамдарында "плацкарт вагонлы" автобустар йөрөй башлаған, тигән хәбәр ысынға сыҡты. Баҡтиһәң, "Башавтотранс" автобустарын хәҙер шулай атайҙар икән. Эш шунда: ул автобустарҙа йөрөү хаҡы 50 процентҡа күтәрелгәс, халыҡ уларға ултырмай, ә инде ултырғандары яртылаш буш салонда үҙҙәрен плацкарт вагондағы һымаҡ тоя икән.

● Өфө ҡалаһы коммуналь хужалыҡ етәкселәре быйыл яҙ урам һепереүселәрҙең һанын ике тапҡыр ҡыҫҡартырға йыйына, тигән хәбәр ишетелеп ҡалды. Быға быйылғы ҡыш ҡарҙың күп яуыуы сәбәпсе икән. Уларҙың фекеренсә һәм синоптиктарҙың хәбәр итеүенсә, апрель башында урамдарҙағы ҡар ҡапыл ирейәсәк һәм барлыҡ сүп-сарҙы ҡапыл иреүҙән пәйҙә булған ташҡын ағыҙып алып китеп, урам һепереүселәргә сәпсим эш ҡалмаясаҡ икән.

● Быйыл баш ҡалабыҙҙың бер магазины ҡыйығында яңғыҙ сыйырсыҡтың ҡышлауы билдәле булды. Орнитологтар ҡошсоҡтоң ни өсөн ҡышларға ҡалыуы һәм нисек итеп һыуыҡ ҡышты сығыуы хаҡында баш вата-вата, бер ниндәй ҙә фекергә килә алмағас, был турала ишетеп ҡалған бер музыкант сенсацияға торошло хәбәр һалған: "Иптәштәр, магазиндың исеменә иғтибар итегеҙ әле, ул бит "Смак" тип атала. "Смак" билдәле рок йырсыһы һәм композиторы Андрей Макаревичтың "Советы Макаревича" тигән аш-һыу серҙәре хаҡындағы тапшырыуынан алынған. Андрейҙың ҡышларға тороп ҡалған сыйырсыҡ хаҡында "Ахмаҡ сыйырсыҡ" тигән йыры ла бар..." Шуға ла башы етмәгән орнитологтар елкәһен генә тырнаған, тиҙәр.

## Баймаҡ

● Йүкә телефоны агентлығы хәбәр итеүенсә, райондың буйынан-буйына һуҙылып ятҡан Ирәндек һыртының иң бейек нөктәһе һаналған Суҡы ташының диңгеҙ кимәленән бейеклеге 987 метр икән. "Беҙ кемдән кәм?" тип йәшәп өйрәнгән баймаҡтар был хәл менән риза булмайынса, Суҡы ташының бейеклеген 1000 метрға, йәғни 1 километрға күтәреү буйынса хәрәкәт башлаған. "Талҡаҫ" санаторийынан күренеп ятҡан был түбәне күтәреү өсөн инициатив төркөм таш янына банка менән буяу (баймаҡса - шал) һәм ҡылҡәләм ҡуймаҡсылар. Уларҙың фаразы буйынса был тирә халҡы һәм ял итергә килеүселәр Суҡыға таш тотоп менергә һәм уға үҙенең ырыу тамғаһын йә исем-шәрифен яҙып һалырға тейеш. Таш өйөү йолаһы халҡыбыҙҙа борон-борондан килә. Әйткәндәй, ошо уҡ Ирәндек һыртының аръяғындағы Ғәҙелша шарлауығы янында 6 метр бейеклектәге таш өйөмө бар.

● Баймаҡ ҡалаһынан Шахморат Абдрахманов теш һыҙлауынан ҡотолоу өсөн үҙ тәжрибәһенән сығып, шундай рецепт тәҡдим итә: бер стакан ҡайнатылып һыуытылған һыуға бер балғалаҡ тоҙ, бер балғалаҡ ҡара борос, бер балғалаҡ ҡыҙыл борос һалып эсеп ебәрһәң, тештәреңдең һыҙлауын ғына түгел, уларҙың һәм үҙеңдең донъяла барлығыңды иҫеңдән сығараһың икән. Әлеге көндә Шахморат олатай рецептының патентын юллар өсөн Өфөгә килергә йыйынып йөрөй, ти.

*БЫЛ АЙҘА*

# АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ,



## йәки Ҡурай көнө кәрәк…

**Һижри календары буйынса апрелдең 14-нә тиклем рабиғел ахыр, 15 апрелдән йомадиәл әүүәл айы дауам итә. Боронғо башҡорттар апрелде алағарай тип атаған. Атаманан уҡ күренеүенсә, бында ҡар ирей башлауы, ер өҫтөнөң ала булыуы күҙ уңында тотолған. "Алағарҙа - аласағың, һарысайҙа бирәсәгең булһын", тигән әйтем дә бар халыҡта. Бында ерҙә йәшәүсенең көнитмештәге зирәк аҡылы сағыла, йәғни ҡыш оҙон һәм һыуыҡ булып, яҙға аяҡ баҫҡанда кемдәндер нимәлер алырлығың булыуы аслыҡтан йәки башҡа мохтажлыҡтан ҡотолоу сараһы, ә инде һарысайҙа, йәғни урып-йыйыу тамамланып, муллыҡ менән аңҡыған сентябрҙә бирәсәген ҡайтарыу крәҫтиәнгә бер ни тормай.**

Апрелдең алағарлыҡ йәғни ала-солалыҡ характеры был айҙағы календарь байрамдар төрлөлөгендә лә сағыла. Әйтәйек, 1 апрель - Көлкө һәм Халыҡ-ара ҡоштар көнө, 2 апрель - Халыҡ-ара балалар китабы, 4 апрель - Геологтар, 7 апрель - Бөтә донъя сәләмәтлек һәм Һыу аҫты кәмәләрендә һәләк булғандарҙы иҫкә алыу, 11 апрель Халыҡ-ара фашистик концлагерҙар тотҡондарын азат итеү көнө.

12 апрелдә - Бөтә донъя авиация һәм космонавтика көнөн беҙ дыу килтереп байрам итә, ҡағыҙҙан самолеттар яһап осора торғайныҡ. Беҙҙең урам малайҙары, мәҫәлән, был йәһәттән барыһын да уҙып киттек һәм һәләк булған космонавтарҙың гәзиттә сыҡҡан фотоһүрәттәрен Ергә ҡәҙерләп "күмә" торғайныҡ. Ә бына элек беҙ 18 апрелде Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар көнө тип белмәй инек әле.

Бындай "көн"дәр апрелдә бик күп, осо-башына сығырлыҡ түгел, ҡайһылары ҡатланышып килә хатта. Шулай һәр бер нәмәгә айырым бирә башлаһаң, йылдың 365 көнө лә етмәҫ, моғайын. Шулай ҙа 28 апрелдең Халыҡ-ара бейеү, 30 апрелде Янғындан һаҡлау көндәре икәнен әйтеп үтмәй булмайҙыр. 1 апрель логикаһы буйынса ҡарағанда, 28 апрель бөтә донъя халыҡтары йыйылып, шундай итеп бейегән дә, янғын сығып, уны саҡ 30-ы көнө һүндергәндәр, тип тә әйтергә була. Ә инде юморҙы ситкәрәк ҡуйһаҡ, донъяла ниндәй генә Көндәр һәм Төндәр юҡ хәҙер. Ә бына Ҡурай көнө юҡ. Бөтә донъя кимәлендә үк булмаһа ла, Башҡортостан, Рәсәй кимәлендә берәй көндө Ҡурай көнө итеп була бит. Ул көндө радио һәм телевидение аша, мәҙәниәт йорттарында, сәнғәт һарайҙарында ҡурай моңонан ғына торған концерттар ҡуйылһын, бәйгеләр ойошторолһон ине. Календарь байрамдары исемлегенә индерелергә ҡурайыбыҙ хаҡлы. Был фекергә берәү ҙә ҡаршы килмәҫ ине, тип уйлайым.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Көндәр" менән һаташып, быйылғы апрель юбилярҙарын онотҡанбыҙ бит. Билдәле тарихсы Рауил Бикбаев менән күренекле ғалим, педагог Вәли Псәнчинды - 80, рәссам Хәтип Фазыловты 50 йәшлек юбилейҙары менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Билдәле ғалим, яҙыусы Әбүбәкер Усмановтың тыуыуына - 100, атаҡлы режиссер Лек Вәлиевтың тыуыуына 75 йыл, уларҙы ла иҫкә алайыҡ. Бәй, 19 апрелдә Өфөлә "Искра" кинотеатры асылыуға ла 40 йыл тулған даһа...**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# ӘБЕЙ МЕНӘН БАБАЙҘЫҢ ...

## улдары тыуған, имеш…

**"Әбей менән бабайҙың улдары тыуған, имеш…" тип аталған мәҡәләлә (һорауҙы Гөлкәй Сәмерханова бирә) бирелгән сетерекле һорауға яуап эҙләп ҡараным.**

"Ветхий завет" китабының "Бытие" бүлегендә, тәү атабыҙ Әҙәм 930 йәшендә донъя ҡуя, ә уға 800 йәш тулған саҡта Сиф исемле улы тыуа, тип яҙылған. "Всемирный потоп", "Ноев ковчег"ты ла күптәр ишетеп беләлер. Шул Нойҙың нәҫеле Авраамдың ҡатыны Сарра бала күрә алмай ҡартая. Авраам Алланан инәлеп бала һорай һәм Сарра 127 йәшендә Исаак исемле ир бала таба, уны күкрәк һөтө менән имеҙеп үҫтерә, тип яҙыла "Ветхий завет"та. Әлбиттә, был мәғлүмәттәрҙе беҙ гел генә әкиәт тип ҡабул иттек. Ғалимдар был күренештәрҙе, төрлө заманда ваҡыт иҫәбе төрлөсә, бөтөнләй икенсе ҡанундар буйынса алып барылған, тип тә аңлата.

Гәзитебеҙҙең быйылғы 9-сы һанында антрополог Ринат Йосоповтың бик матур сығышы баҫылды. Автор урыҫ ғалимы Сергей Руденконың хеҙмәттәрендәге мәғлүмәттәргә таянып, "Йөҙ йыл элек йәшәгән башҡорттар кәүҙәгә бик ҙур, физик яҡтан һау һәм ғәйрәтле булған", тип яҙа. Был күренеште, таҙа тәбиғәт шарттарында үҫеп, сифатлы милли ризыҡ менән туҡланыуҙан баһадирҙар тоҡомло булғандыр халҡыбыҙ, тип аңлата ғалим. Йөҙ йыл элек милләттәштәр араһында баһадирҙар тоҡомо һаҡланған икән, уларға тиклем йәшәгәндәр тағы ла ғәйрәтлерәк булып, әбей, бабай тип аталған саҡтарында улдары тыумай булмаҫ, тип уйланым әле мин дә.

Әкиәт шуның өсөн дә әкиәт инде, ул - сихри донъя. Әкиәттәр меңәр йылдар дауамында быуындан-быуынға һөйләнелә, мираҫ итеп үҙгәртелмәй тапшырыла. Улар һоҡланырлыҡ, уларҙа халыҡ аҡылы тупланған. Борондан, 90 йәшлек әбей менән бабайҙың улы тыуған, тип һөйләнә икән, уны үҙгәртеп һөйләү мохтажлығы юҡ. Хатта был юлдарҙы ниндәйҙер мәғлүмәт сығанағы, урыҫса әйткәндә, "код" тип тә ҡабул итергә кәрәктер...

Ә бына миңә 69 йәш. Урамда, магазинда "әбекәй" тип өндәшһәләр: "Мин әле әбекәй түгел, апай тип өндәшегеҙ", - тип төҙәтәм...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев X Ҡышҡы Паралимпия уйындарында миҙалдарға лайыҡ булған спортсыларҙы юғары дәүләт наградалары менән бүләкләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Яҡташтарыбыҙ, Стәрлетамаҡ егете Ирек Зарипов һәм Өфө егете Кирилл Михайлов IV дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены менән наградланды.

✓ Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов исеменә ДОСААФ рәйесенән ҡотлау хаты килде. Сергей Маев Башҡортостан спортсыларын боҙҙа мотоуҙыш буйынса донъя чемпионатында еңеүҙәре менән тәбрикләп, Башҡортостан Республикаһы етәкселегенең спорттың техник төрҙәрен үҫтереүгә күрһәткән ярҙамына юғары баһа бирҙе.

✓ БР Президенты Мортаза Рәхимов Рәсәй фәндәр академияһы Иҡтисад институты директорының беренсе урынбаҫары Дмитрий Сорокин менән осрашты. Осрашыуҙа республиканың социаль-иҡтисади үҫеше, дәүләт власы һәм граждандар йәмғиәте институттары эшмәкәрлеген камиллаштырыу маҡсатында иҡтисад өлкәһенә ҡараған ғилми тикшеренеүҙәрҙе әүҙемләштереү мәсьәләләре ҡаралды.

✓ Өфө ҡалаһында "Аҙ ҡатлы төҙөлөштө үҫтереү: төбәк тәжрибәһе, дәртләндереүсе механизмдар, энергоһөҙөмтәлелекте күтәреү" тип аталған Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе уҙғарылды. Унда РФ Дәүләт Думаһы, Федерация Советы, РФ Төбәктәр үҫеше министрлығы һәм Рәсәйҙең 65 төбәгенән килгән вәкилдәр ҡатнашты. БР Президенты М. Ғ. Рәхимов ошо кәңәшмәләге сығышында Башҡортостанда аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшөнөң социаль сәйәсәттәге өҫтөнлөклө йүнәлеш булыуын белдерҙе. Уның әйтеүенсә, республикала алдағы биш йылда эконом класындағы 10 мең айырым торлаҡ төҙөлөүе күҙаллана

✓ ЮНЕСКО тарафынан Халыҡ-ара диалог һәм донъя халыҡтары мәҙәниәттәрен берләштереү йылы иғлан ителеү менән бәйле, Францияла төрки халыҡтарҙың Наурыз байрамы үткәрелә. Унда Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы Сәйҙә Ильясова һәм ҡурайсы Илшат Ишморатов сығыш яһаясаҡ.

*АҪНА ШАҢДАУЫ*

# ОҪАЙЛЫ ҺУҒЫШ КӨТӘ РӘСӘЙҘЕ,

## йәки Ниңә һаман шартлауҙар тынмай?

**Тағы ла шартлау. Тағы ла Мәскәү. Тағы ла метро. Был хәбәрҙе ишеткәс, бер танышым ҡото осоп: "Бер ваҡытта ла Мәскәүгә йәшәргә күсеп бармайым", - тип белдерҙе. Мин дә бармаҫ инем. Ҡурҡыныс. Һәр бер кешенең йәшәгеһе килә. Һәр бер кеше үҙе, хәләл ефете, балалары, туғандары, яҡындары, дуҫтары өсөн ҡурҡа. Тормоштан ҡәҙерлерәк бер нәмә лә юҡ та баһа.**

Ике тәүлектән һуң тағы ла шартлау. Был юлы Дағстанда. Кизляр ҡалаһында. Таң менән. Мәктәп, ҡала хакимиәте һәм эске эштәр бүлеге эргәһендә генә. Ул төбәктә ваҡыты-ваҡыты менән яңғырап торған шартлауҙарға Рәсәй халҡы күнеккән. Унда аҙна һайын тиерлек йә бер нәмә шартлай, йә кемгәлер аталар, йә кемделер үлтерәләр. "Кемделер" тиһәм дә, аңлашылып торалыр - милиция хеҙмәткәрҙәренә аталар, уларҙы шартлаталар, уларҙы үлтерәләр. Сөнки Дағстанда бөгөн һуғыш бара. Бер Дағстанда ғына түгел. Ингушетияла. Чечняла. Һуғыш бөтә Төньяҡ Кавказда. Милиционерҙар иһә дәүләт власы вәкилдәре. Властың авангарды, тимәк. Алғы һыҙыҡта улар. Ә Мәскәү - шул һуғыштың тылы.

Урынһыҙыраҡ, әммә Бөйөк Ватан һуғышы менән бер сағыштырыу килтергем килә. 1941 йылда уҡ совет хәрби-һауа көстәренең алыҫҡа оса торған бомбардировщиктары Берлинды, фашистик Германияның баш ҡалаһын, бомбаға тотҡан. Бөгөн Кавказда барған һуғышта ҡатнашыусылар Рәсәйҙең баш ҡалаһы Мәскәүҙе бомбаға тота. Тик самолеттар ролен шәһиттәр - бөйөк идеалдар хаҡына йәки үс алыу, ҡон ҡайтарыу маҡсатында үҙҙәренән тере бомба яһаусылар үтәй.

Эйе, 2010 йылдың марты илебеҙ өсөн шулай фажиғәле тамамланды. Мәскәүҙәге шартлауҙарҙы күптән ишеткән юҡ ине. Самолеттарҙы ла күптән шартлатҡандары юҡ. Торлаҡ йорттарҙы ла шартлатмағандарына биш былтыр. Күптән, бик күптән, мәктәптәрҙе, бала табыу йорттарын, тотош ҡалаларҙы баҫып алғандары юҡ. Тынысландыҡ. Ул ваҡыттарҙан бирле әллә күпме сәйәсмәндәр алмашынды. Әллә күпме һайлауҙар булды. Әллә күпме матур һүҙҙәр әйтелде, белдереүҙәр яһалды. Ғәҙел хөкөм, ҡаты яза, сортирҙа "һыулау", үҙ ояларында дөмөктөрөү тураһында күп, матур һәм файҙаһыҙ һүҙҙәр әйтелде. Кемделер тоталар, кемделер хөкөм итәләр, ә күп осраҡта беҙгә "зәңгәр экрандар" аша Федераль именлек хеҙмәтенең йәки Эске эштәр министрлығының оператив видеокадрҙарын ғына күрһәтәләр - бына ул Беслandағы мәктәпте баҫып алыуға өлөш индергән бандит, ә быныһы йорттар шартлатыуҙы планлаштырған "әмир", ә бына быныһы иһә... Кадрҙарҙа, ғәҙәттә, мәйеттәр. Биттәрен һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, эргәләрендә ҡорал-маҙарҙары. Тирә-яҡта ниндәйҙер ҡоралды, камуфляждағы кешеләр баҫып тора. Кадр артындағы тауыш беҙгә мәғлүмәт бирә - был теге йәки был "әмир", ҡоралды бандформированиеларҙың етәксеһе йә идеологы һәм башҡалар, һәм башҡалар. Ысынлап та шулармы? Белмәйбеҙ. Телеэкрандан ағылған мәғлүмәт дөрөҫ тип уйлайбыҙ. Әллә дөрөҫөн һөйләйҙәр. Әллә һөйләп еткермәйҙәр.

Көрәшмәйбеҙ, тип әйтеп булмай - көрәшәбеҙ. Дәүләт ҡаҙнаһынан йыл һайын именлек хеҙмәтенә, эске эштәр министрлығына, ҡораллы көстәргә ҙур-ҙур суммалар бүленә. Ни өсөн тип уйлайһығыҙмы? Әлбиттә, көрәште көсәйтеү өсөн. Уларға яңы ҡорал һатып алына, кейем тегелә. Ә Мәскәүҙе барыбер шартлаталар. Бөгөн - Мәскәүҙе, ә иртәгә кемде? Рәсәй Президенты, Премьер-министры даими рәүештә террор менән көрәшеүҙе көсәйтеү тураһына белдерә. Әле бына терросыларға үлем язаһы индереү тураһында фекер алышыу бара. Былай ҙа үлемгә барған шәһиттәрҙе үлем язаһы менән ҡурҡытып буламы?

Теләйбеҙме-юҡмы, илебеҙ бөгөн һуғыш хәлендә. Аныҡ ҡына бер дәүләт йәки Төньяҡ Кавказ тигән географик төшөнсә менән түгел, ә терроризм менән һуғыш хәлендә. Бер беҙ генә түгел. Донъяның күп кенә илдәре. Әйтәйек, Израиль. Бер көн йәки бер йыл ғына һуғышмайҙар улар террорсылар менән. Үткән быуаттың етмешенсе йылдарынан - Палестина ғәрәптәре йәһүдтәргә ҡаршы интифада иғлан иткәндәре бирле. Уларҙа ла автобустар шартлатылды, шәһиттәр урам уртаһында йәки сауҙа үҙәктәрендә тере бомбаға әүерелеп, үҙҙәре менән теге донъяға тиҫтәләгән кешене алып китте. Улар быға күнеккән инде. Улар үҙҙәрен көн һайын һуғыштың алғы һыҙығында кеүек тоя. Ә унда кеше һәр ваҡыт уяу булырға тейеш. Юғиһә...

Беҙҙә улай түгел. Рәсәй халҡы әллә етәкселеккә самаһыҙ ышанамы, әллә "барыбер бөтәбеҙ ҙә иртәме-һуңмы теге донъяға китәсәкбеҙ" тигән принцип менән йәшәйме - ни булһа ла, терроризм менән һуғышта ҡатнашырға әҙер түгел.

Бөйөк Ватан һуғышы менән тағы ла бер аналогия. Унда, ғөмүмән, классик һуғыштарҙа дошмандың йөҙө асыҡ. Ул фронттың теге яғында, һин - был яҡта. Артта тыл. Терроризм менән һуғышта алғы һыҙыҡ та юҡ, тыл да. Фронт һәр беребеҙ аша үтә. Автобусҡа ултырғанда, магазиндарға ингәндә эргәгеҙҙәге кешеләргә ҡарағанығыҙ бармы? Кемдәр улар? Дошманмы әллә дуҫмы? Ҡуйынында нимә йәшерә - сәскә бәйләмеме әллә бомбамы?

Мәскәү халҡы ирәүән йәшәй. Улар метроға шул тиклем өйрәнгән, хатта ер өҫтөндә ориентир юғалта, ҡайҙа барырға белмәй аптырана. Күпселек халыҡ ер аҫтына төшә. Сөнки тиҙерәк, арзаныраҡ, уңайлыраҡ. Альтернатива юҡ. Өҫтә транспорт "тығындары", ГИБДД хеҙмәткәрҙәре. Метро террорсылар өсөн иң уңайлы сәп. Кеше һәр ваҡыт күп. Тимәк, уны күҙ ҡараһындай һаҡларға кәрәк. Видеокамералар менән генә ҡотолоп булмай. Метрола эшләү өсөн махсус рәүештә әҙерләнгән хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре булырға тейеш. Метро вагондары шартлау ваҡытында пассажирҙарға мөмкин тиклем әҙерәк зыян килтерерлек материалдарҙан эшләнеүе мотлаҡ. Һәм башҡалар, һәм башҡалар. Әле Рәсәй Президенты транспортта хәүефһеҙлек сараларын булдырыу тураһына указ ҡабул итте. Ә бит террорсылар өсөн нимәне шартлатырға икән, тигән мәсьәлә тормай. Бөгөн - метро. Иртәгә, әйтәйек, сауҙа үҙәге. Иртәнән һуңға - торлаҡ йорт. Һуғыш ваҡытында теләһә ниндәй объектҡа һөжүм итеүҙәре ихтимал. Классик һуғышта ҡаршы яҡ иң тәүҙә үҙ дошманының ҡораллы көстәрен юҡ итергә тырыша. Террористик һуғыш ваҡытында иһә был мөһим түгел. Террорсылар ябай халыҡ араһында ҡурҡыу, шомланыу, шикләнеү һәм власҡа, дәүләт вәкилдәренә ҡарата ышанмаусанлыҡ тойғоһон тыуҙырыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

Был шарттарҙа илдең етәкселеге Төньяҡ Кавказдағы ситуацияны халыҡтан йәшереп (ә бөгөн тап шундай ситуация килеп тыуҙы) һәм кешеләрҙе тынысландырырға маташып (асылда иһә, билдәһеҙлектә тотоп), дөрөҫ эшләйме һуң? Чечняла, Дағстанда, Ингушетияла булып торған ваҡиғалар тураһында һөйләмәһәң, улар булмаған, тигән һүҙ түгел бит әле.

Эйе, бөгөн сәйәсмәндәребеҙҙең лексиконы тағы ла бер тапҡыр әйтемгә байыны. "Беҙ уларҙы канализация төбөнән соҡоп сығарып, көн яҡтыһына сығарасаҡбыҙ!" - тине Владимир Владимирович Путин террорсылар тураһында. Теге юлы "сортир" ине. Әле "канализация" килеп сыҡты. Эш бит ниндәйерәк һүҙ ҡулланыуҙа түгел. Эш терроризм менән аныҡ көрәш алып барыуҙа. Ә, бәлки, халыҡты мобилизациялауҙалыр, уртаҡ идея тирәләй туплауҙа, ойоштороуҙалыр?

Дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, бөгөн власҡа ойошҡан йәмғиәт кәрәкмәй. Сөнки бөгөн йәмәғәтселек терроргә ҡаршы берҙәм күтәрелһә (хәленән килгәнсә, әлбиттә, мөмкинлектәренә ҡарап), ул иртәгә терроргә ҡаршы һөҙөмтәле көрәш ойоштора алмаған етәкселеккә ҡаршы күтәрелеүе ихтимал. Власҡа бөгөн халыҡтың көтөү булып ҡалыуы уңайлыраҡ. Хатта теракттар, шартлауҙар, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, власть өсөн бер ни тиклем файҙалы. Ҡурҡҡан халыҡ менән идара итеүе еңелерәк бит. Сталин да тәүҙә халыҡты тышҡы һәм эске (йәғни, халыҡ) дошмандары менән ҡурҡыта. Шунан һуң сәйәси золом ойоштороп ҡотон ала. Һәм көтөү хәленә ҡалған йәмғиәт менән идара итә.

Беҙ ҙә шул юл менән бармайбыҙмы?

**Таһир ИШКИНИН.**

*ТЕЛ ХИКМӘТЕ*

## ЙОНДОҘ "САФ" БУЛАМЫ?

Март башында баш ҡалала үтәсәк "Һылыуҡай" башҡорт гүзәлдәре бәйгеһе хаҡында "Юлдаш" телеканалында шундай шиғри юлдар менән реклама бара: "Һылыулығың таң ҡалдыра, башҡорт ҡыҙы. Һин бит ерҙә мәңгелектең саф йондоҙо!" Ошо шиғри һүҙҙәрҙең һуңғы ике һүҙенә тиклем әйтелгән һүҙҙәрҙе тыңлағанда күңелдә илаһилыҡ кисерәһең дә, "саф йондоҙо"на килеп еткәс, башҡа күсәк менән тондоралармы ни? Кем яҙғандыр уны? Йондоҙҙоң саф булғаны бармы инде? Исмаһам, логика буйынса "саф йондоҙ" һүҙендәге аныҡлаусы һүҙҙең антонимын килтереп уҡып ҡарарға ине. Әйтәйек, "бысраҡ йондоҙ" йә "таушалған йондоҙ", тип.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Башҡортостандың көньяҡ төбәгенә эш сәфәре барышында райондарҙың социаль-иҡтисади хәле, сәнәғәт һәм ауыл хужалығы объекттары төҙөлөшө, яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәре торошо менән танышты.

✓ Башҡортостан Республикаһында 2010 йылда эшҡыуарлыҡты үҫтереү программаһы ҡабул ителде. Эшҡыуарҙарҙың ҡорамалдар һатып алыуға киткән страховка түләүҙәренең бер өлөшө субсидияланасаҡ. Үҙ эшенде асыуға ҡуйылған талаптарға ярашлы бирелә торған старт-ап суммаһы 300 мең һум тәшкил итәсәк.

✓ Мәскәүҙә үткән "Һөт индустрияһы - 2010" VIII халыҡ-ара форумында Башҡортостан предприятиелары продукцияһы юғары баһа алды. Мәләүез һөт-консерва комбинаты "Һөт уңышы - 2010" конкурсында гран-при алһа, халҡыбыҙҙың милли аҙығы - ҡорот алтын миҙал менән билдәләнде.

✓ "Башҡортостан Республикаһының ун иң яҡшы инновацион идеяһы" тигән конкурс иғлан ителде. Ул БР Президенты Указы менән раҫланған 2008-2010 йылдарға республика маҡсатлы инновацион программаһына ярашлы ойоштора.

✓ Баймаҡ ҡалаһында тыуып үҫкән йәш бейеүсе Рәфис Иҙрисов Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһында уҙған "Алтын майҙан - Эльбрус" II халыҡ-ара этник сәнғәт конкурс-фестивалендә ҙур еңеүгә өлгәште. Уға "Урал этнохореографияһы" номинацияһында "Рекрут" һәм "Еҙ үксә" бейеүҙәре өсөн I урын бирелгән.

✓ Башҡортостанға "Ете нозология" программаһына ярашлы ярты йылға иҫәпләнгән 572,3 миллион һумлыҡ дарыуҙар ҡайтарылған. Граждандарға 127,4 миллион һумға дарыу препараттары бирелгән. 1102 кеше уртаса хаҡы 60 меңгә еткән рецепт буйынса дарыуҙар менән тәьмин ителгән.

✓ Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралыҡ 4 апрелдә билдәләнеүсе Геологтар көнөн яҡшы һөҙөмтәләр менән ҡаршылай. 2009 йылда барлығы 869 миллион һумлыҡ геолог-разведкалау эштәре башҡарылған, Учалы мәғдән районында алтын ятҡылыҡтары ресурстары аныҡланған, республика буйынса биш яңы нефть ятҡылығы, төҙөлөшкә яраҡлы тәбиғи таш ятҡылыҡтары асылған.

*✔ Иҫке Монасип мәктәбендә балалар йорт йыһаздары эшләргә өйрәнә. Хатта 10-11 синыфтан бер-нисә уҡыусы берләшеп, йыһаз эшләп һатыу менән дә шөғөлләнә. Ҡыҙҙар тегергә, балаҫ һуғырға өйрәнә.*



## ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Хәйбулла

● Һуңғы 20 йыл эсендә район республиканың социаль яҡтан иң артта ҡалған төбәгенән юллы-газлы-мәктәпле-мәҙәниәт йортло-телефонлы иң алдынғыға әүерелде. Хәйбулла ауылдарына хәҙер хатта Өфө районы ауылдары көнләшә икән. Шулай ҙа үҙенең үткәненең ҡәҙерен белгән хәйбуллалар музей өсөн генә булһа ла саман йорт таба алмай хитлана икән, тигән хәбәр килде.

● Аҡъярҙағы "Yoka press" агентлығы хәбәрселәре беҙгә яҙыусылар Мәрйәм Бураҡаева менән Әхмәр Үтәбайҙың Хәйбуллаға барып, яңы төр компас уйлап табыуы хаҡында хәбәр итте. Эш былай булған: улар районды сал далалы зонаһында бер ауылдан икенсе ауылға барған саҡта дүрт тарафтары ла сикһеҙлеккә һуҙылған ергә килеп етеп, аҙашҡас, бара торған ауылдағы таныштарына шылтыратырға мәжбүр булған.

-Дүрт яғыбыҙ ҙа сикһеҙлек, юл юҡ, беҙгә ҡайҙа барырға? - тигән Әхмәр Үтәбай телефон аша.

-Һеҙ әле ҡайһы урында һуң? - тип һораған Хәйбулла кешеһе.

-Беҙҙең ҡаршыла ғына крокодилға оҡшаған болот эленеп тора, - тигән Мәрйәм Бураҡаева ян-яғында атап әйтерлек бер ни ҙә булмауын аңлағас, аптырашынан.

- Аңлашылды, - тигән Хәйбулла кешеһе тыныс ҡына итеп, - хәҙер 180 градусҡа боролоғоҙ ҙа, килгән юлығыҙ буйлап кирегә китегеҙ. Шунан бер йылғаға барып сығырһығыҙ ҙа, йылға үренә табан барһағыҙ, беҙҙең ауылға килеп етерһегеҙ...

Былар шулай иткән дә һәм ярты сәғәттән һуң теге ауылды барып тапҡан. Әле яҙыусылар яңы төр компасҡа исем-атама эҙләй икән. Үтәбай "Крокодил" тип ҡушайыҡ, тигәнгә, Мәрйәм апай: "Юҡ, яңы компастың исеме башҡортса булырға тейеш", - тип, быға риза булмай икән.

### Бөрйән

● Республика халҡы Бөрйән районын төпкөл, ҡара урманлы, айыу-бүреләр ояһы, тип күҙ алдына килтерә. Шулай бик төпкөлдә генә урынлашһа ла, бөрйәндәр бер ҙә арта ҡалғандарҙан түгел, ә бик "цивилизованный" халыҡ. Бына, мәҫәлән, хәҙер ер йөҙөндәге бөтә халыҡ ҡулланған телефондарҙы бөрйәндәр хан заманында уҡ ҡулланған. Ул ваҡыттағы телефондар, әлбиттә, хәҙергеләренән ныҡ ҡына айырылған. Китаптарҙан күргәнегеҙ барҙыр әле, стенаға ҡуйылған телефондарҙа һандарҙы бороп йыйғандар. Ул ваҡытта хатта "шылтыратам" тигән һүҙ ҙә булмаған, һандарҙы бороп йыйғанға күрә, улар "борам" тип кенә һөйләшкән. Бөрйәндәр күптән инде кәрәҙле кеҫә телефонына күсеп бөттө, ә боронғо телефондары музейҙарҙа ғына һаҡланып ҡалған. Ә бына "борам" һүҙе уларҙың телмәрендә һаман һаҡланған. Башҡорт теленең сафлығын һаҡлай бөрйәндәр: башҡалар кеүек, "звонить итәм" тип, урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып маташмай, әле лә ябай ғына итеп "борам" ти ҙә ҡуя.

● Бөрйәндәр юҡ-барға туҙынып, ҡупҡалйып бара торған халыҡ түгел, ғөмүмән, улар донъяға фәйләсүфтәрсә тыныс ҡарай. Бына һуңғы ваҡытта Ағиҙел йылғаһының бысрана барыуына ла бик борсолоп бармай улар. Шулай булмай ни, йылға йылдан-йыл бысрана-бысрана барһа, һуңынан ул урында батҡаҡтан дауалай торған санаторий асып була лаһа.

## ӘЙТӘГҮР!

**Өфөлә Рәсәй буйынса иғлан ителгән Уҡытыусы йылының төп ваҡығаларының береһе - Башҡортостан уҡытыусыларының X съезы тамамланды. Мәғариф системаһы төрлө үҙгәртеп ҡороуҙар кисергән ваҡытта уҡытыусыларҙы нимә хәүефкә һала, ниндәй проблемалар тиҙ арала хәл ителешен көтә? Ошоларҙы асыҡлау маҡсатында республиканың төрлө район-ҡалаларынан X съезға йыйылыусы уҡытыусыларға ике һорау менән мөрәжәғәт иттек:**
**1. Мәғариф өлкәһендә бөгөн һеҙҙе нимә борсоуға һала?**
**2. Әгәр ҙә съезда сығыш яһарға мөмкинлегегеҙ булһа, сығышығыҙ ниндәй проблемаға бағышланған булыр ине?**

год УЧИТЕЛЯ 2010

# УҠЫТЫУСЫ БАҺАҺЫН...

## уҡытыусы ғына күтәрә ала

**Роза ҒҮМӘРОВА, Бөрйән район мәғариф идаралығының методик кабинеты мөдире:**

1. "Беҙҙең яңы мәктәп" милли мәғариф инициативаһының төп йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу өсөн мәктәптәрҙе инициативалы, һәләтле, ижади ҡарашлы уҡытыусылар менән тулыландырыу иң төп мәсьәлә булып тора. Бөгөнгө яңы шарттарҙа эшләрлек йәш белгестәр бар, уларҙы ваҡытында асыҡлап, үҫтереп, мәктәптәрҙе алдынғы ҡарашлы яңы быуын уҡытыусылары менән тулыландырыу иң мөһим бурыстарҙың береһе, сөнки баланың һәләтен асыҡлау өсөн уҡытыусы үҙе һәләтле булырға тейеш.

2. Бөрйән районы мәктәптәрендә балаларҙы тормошҡа әҙерләү буйынса ҙур эш алып барабыҙ. Мәҫәлән, Иҫке Монасип мәктәбендә балалар йорт йыһаздары эшләргә өйрәнә. Хатта 10-11 синыфтан бернисә уҡыусы берләшеп, йыһаз эшләп һатыу менән дә шөғөлләнә. Ҡыҙҙар тегергә, балаҫ һуғырға өйрәнә. Киләсәктә уларҙың береһе лә тормошта юғалып ҡалмаясаҡ. Ошо тәжрибәбеҙ менән уртаҡлашыр инем сығышымда.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ, Сибай ҡалаһының "Ирәндек" лицейы уҡытыусыһы:**

1. Мәғариф системаһында бөгөнгө көндә мине иң борсоғаны - кадрҙар мәсьәләһе. Уҡытыусыларҙың күптәре пенсия йәшендә, ә был һөнәрҙе һайлаусылар һирәгәйә барыу сәбәпле, мәктәпкә һәләтле йәштәр аҙ килә. Бөгөнгө мәктәпкә ир ҡулы ла етешмәй. Ниндәй генә мәктәпте алып ҡарамайыҡ, унда уҡытыусылар коллективының 80-90 процент самаһын ҡатын-ҡыҙ алып тора. Быны мин ҡатын-ҡыҙҙы түбәнһетеү өсөн әйтмәйем, ләкин, минеңсә, мәктәптә уҡыған малайҙарға ир тәрбиәһе кәрәк.

2. Бер съезд сиктәрендә, бер-ике көндә генә мәктәптең бөтә проблемаһын хәл итеп бөтөп булмай. Проблемалар бик күп, күп яҡлы һәм уларҙың барыһы ла киләсәк быуынды тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Теләйбеҙме, юҡмы, беҙ иң тәүҙә "Киләсәккә ниндәй балалар тәрбиәләйбеҙ һуң?" тигән һорауға яуап бирергә тейешбеҙ. Шуға ла мин ошо киләсәк быуын тураһында һүҙ алып барыр инем.

**Дамир АСҠАРОВ, Өфө урман хужалығы колледжы директоры:**

1. Урман хужалығында иң мөһим проблемаларҙың береһе булып урмансы һөнәренең абруйын күтәреү мәсьәләһе тора. Урман хужалығы министрлығы барлыҡҡа килгәндән алып, урындарҙа урман хужалығына әһәмиәт бирелә башланы, урман хужалығына иғтибар булғас, уҡырға теләүселәр ҙә күбәйҙе.

Урман хужалығында урмансының дәрәжәһен арттырыу мөһим булған кеүек, мәғариф өлкәһендә уҡытыусының дәрәжәһен күтәреү буйынса ниндәйҙер саралар ҡабул итергә кәрәк. Минең әле лә хәтеремдә: бәләкәй саҡта ауылда уҡытыусы иң абруйлы кеше ине. Әгәр ҙә бөгөн дә уҡытыусының дәрәжәһе ошондай кимәлгә күтәрелһә, белем биреү кимәле лә күтәрелер ине.

2. Үҙебеҙҙең етәкселәргә шуны еткерер инем: урта һөнәри белем биреү йорттарын үҙ урындарында ҡалдырһындар ине. Урта белем биреү учреждениеларының белгестәр әҙерләү системаһындағы роле баһалап бөткөһөҙ, шулай булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы вуздарға ҡушыу тураһында һүҙ алып барыла.

**Сания КҮЗБАЕВА, Ырымбур өлкәһе Төйлөгән районы Аллабирҙе мәктәбе директоры:**

1. Иң борсоғаны - уҡытыусының баһаһы түбән булыуы. Икенсенән, мәктәптә тәртиптең насарая барыуы хәүефкә һала. Балалар китаптан йыраҡлаша, телевизор, компьютер уларҙың ваҡытын ала. Йәш белгестәрҙең мәктәпкә ҡайтмауы ла һәйбәт күренеш түгел.

2. Шул тиклем Башҡортостанға, уның Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улына рәхмәтлебеҙ. Иғтибарлылар, нимә генә һораһаҡ та, гел ярҙам итергә әҙер торалар. Ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең ихлас рәхмәттәрен еткерер инем сығышымда.

**Миңлегәле ЙОМАҒОЛОВ, Бөрйән районы Иҫке Собханғол мәктәбе директоры:**

1. Ауыл мәктәптәренең ябылыу алдында тороуы борсой. Бөгөн Рәсәйҙең мәғариф өлкәһендә алып барылған сәйәсәтте ауыл мәктәптәрен юҡҡа сығарыуға ҡоролған. Балалар һанына ҡарап финанслау ауыл мәктәптәре өсөн яраҡлы түгел, сөнки балалар һаны, ҡала менән сағыштырғанда, күпкә әҙерәк. Ғөмүмән, ҡала мәктәбе менән ауыл мәктәбен тигеҙләргә ярамай.

2. Беренсенән, уҡытыусыларға эш хаҡын күтәреү, икенсенән, ауыл мәктәптәрен финанслау мәсьәләһен күтәрер инем сығышымда.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, бер сара ғына мәғариф өлкәһендә булған мәсьәләләрҙе хәл итә алмай. Шулай ҙа күп нәмә уҡытыусының үҙенән дә тора. "Уҡытыусы икмәк табыу тураһында ҡайғыртырға тейеш түгел. Ә бөгөнгө мәғарифта уҡытыусылар ошо хәлдә", - тигәйне гәзитебеҙҙең тоғро дуҫы Көнһылыу Зәки ҡыҙы Ҡотлобаева. Эш хаҡын арттырыу мәсьәләһен уҡытыусы үҙе хәл итә алмаған кеүек, уҡытыусы дәрәжәһен дә кемдер күтәрә алмай. Көнһылыу апай фекеренсә, мәғариф системаһында кәрәкле кадрҙарҙың, етәксе вазифаһындағы ир уҡытыусыларҙың етешмәүе, ҡайһы бер йәш белгестәрҙең тәжрибәһе генә түгел, тейешле белеме лә булмауы уҡытыусы дәрәжәһенең түбәнәйеүенә килтерә лә инде. Беҙ бының менән тулыһынса килешәбеҙ. Тимәк, данды, исемде һатып алып булһа ла, бала һөйөүен һатып алып булмай, тигәнгә ишара түгелме һуң был?**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Рәсәй Федерацияһының Пенсия фонды идараһы РПФ-ның иң яҡшы территориаль органы исеменә конкурс һөҙөмтәләрен иғлан итте. Пенсия, социаль пособиелар тәғәйенләү һәм түләүҙе ойоштороуҙың алдынғы формаларын һәм ысулдарын ғәмәлгә ашырғаны, клиент хеҙмәттәре эшмәкәрлегенең һәм мотлаҡ пенсия страховкалауы буйынса страховка иғәнәләре йыйыуҙың һөҙөмтәлелеген тәьмин иткәне өсөн РФ Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы бүлексәһе "2009 йылда РПФ-ның Волга буйы федераль округындағы иң яҡшы бүлексә" исеменә лайыҡ булды.

✔ Өфө ҡалаһының "Мираҫ" галереяһында "ДДТ" төркөмө лидеры, билдәле рок йырсыһы Юрий Шевчуктың әсәһе Фәниә Шевчуктың шәхси күргәҙмәһе асылды. Сәнғәт һөйөүселәр иғтибарына оло йәштәге рәссамдың живопись һәм графика буйынса 50-гә яҡын эше тәҡдим ителә. 48 йәшендә генә махсус белем алыуға өлгәшкән Фәниә Әкрәм ҡыҙының ижадында башҡорт милли мәҙәниәте йоғонтоһо бик асыҡ сағыла.

✔ Тау саңғыһы спорты буйынса Эльбурс алдының Терскол ҡасабаһында уҙғарылған Рәсәй чемпионатының слалом ярыштарында Өфө ҡыҙы Ләйсән Раянова еңеүгә өлгәште. Ике старт суммаһы буйынса ул дәғүәселәренән 0,62 секундҡа яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәтте.

✔ Баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Мәғариф. Фән. Карьера" күргәҙмәһе быйыл унынсы тапҡыр уҙғарылды. Күргәҙмәлә республикабыҙҙың 110 урта һөнәри һәм юғары белем биреү учреждениеларынан тыш Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан, Ырымбур һәм башҡа өлкәләрҙән мәғариф учреждениелары һәм улар менән хеҙмәттәшлек итеүсе предприятиелар ҡатнашты. Күргәҙмә барышында "Башҡортостан йәштәре фәне көндәре" форумы, вакансиялар йәрминкәһе һәм "Йәштәргә - эш!" исемле республика акцияһы уҙғарылды.

✔ Өфө ҡалаһында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының торлағын төҙөкләндереү маҡсатында 72 ветерандың фатирында ремонт эшләнгән. Май айына тиклем 251 фатирҙа төҙөкләндереү эштәре башҡарыласаҡ.

О, СПОРТ!

# БОКСЕРҘАР ЯРЫША

**Күптән түгел XII Спартакиада программаһы сиктәрендә бокс буйынса ярыштар башланды. Унда республика мәктәп-интернаттары, гимназия һәм лицейҙарынан 1994-1995 һәм 1992-1993 йылдарҙа тыуған үҫмерҙәр 13 ауырлыҡ категорияһында ике төркөм буйынса көс һынашты. Ярыштар "Республика балалары" Президент программаһын һәм "Башҡортостан Республикаһында балалар һәм үҫмерҙәр спортын үҫтереү" программаһын тормошҡа ашырыу маҡсатында уҙғарылды.**

Билдәле булыуынса, Башҡортостанда был спорт төрө үткән быуат башында үҫешә башлай, ә хәҙер инде был өлкәлә маҡтап телгә алырлыҡ уңыштарыбыҙ бар. Тәүге тапҡыр 2007 йылда Өфөлә махсуслаштырылған бокс үҙәге асыла, спортсылар әҙерләүсе үҙенсәлекле үҙәкте хатта донъя өлгөләре менән дә сағыштыралар. Гимназия-лицейҙарҙа, мәктәптәрҙә бокс секциялары күптән эшләп килә, унда малайҙар, хатта ҡыҙҙар ҙа ҙур теләк менән йөрөй. Боксер рингылары булған ундан артыҡ махсуслаштырылған спорт комплекстары Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Сибай, Нефтекама, Учалы һәм башҡа ҡалаларҙа урынлашҡан, һәм был база секцияларында ике меңдән ашыу бала бушлай шөғөлләнә. Бокс секцияларына балаларҙың, үҫмерҙәрҙең йөрөүе, ә турнирҙарҙа һәм ярыштарҙа уларҙың теләп ҡатнашыуы республикабыҙҙа бокстың билдәлелек яулай барыуы тураһында һөйләй.

Был спорт төрө тәү ҡарамаҡҡа бер аҙ хәүефле лә кеүек тойола, ике кешенең ни өсөн бер-береһенә йоҙроҡтары менән төртөшөүен ҡайһы берәүҙәрҙең аңлап та етмәүе ихтимал. Ысынлап та, боксерҙарҙың йоҙроҡ менән алышҡанын ҡараған саҡта уйындың рәтен белмәһәң, уның мәғәнәһенә лә төшөнөп булмаясаҡ. Ә беҙҙең мәктәп уҡыусыларының был спорт төрөн күптән үҙләштереп, профессиональ кимәлгә еткәне күренеп тора: улар уйындың рәтен дә, нескәлектәрен дә белә, оҫта һуғыша. Ярыш барышында үҫмер егеттәр үҙҙәренең көйәрмәндәрен башта уҡ оҫталыҡтары, ҡыйыулыҡтары, етеҙлектәре менән һоҡландырҙы. Бына ниндәй боксер егеттәр үҫеп килә, тип һоҡланыуын йәшермәне һәр тамашасы.

- Шуныһы ҡыуаныслы, бокс менән шөғөлләнеүселәрҙең, бигерәк тә уны үҙ итеүсе үҫмер егеттәрҙең һаны йылдан-йыл арта, - тине Башҡортостан бокс федерацияһы етәксеһе Ғүмәр Аҙнабаев. - Башҡортостан бокс федерацияһы был йәһәттән күп эштәр алып бара: республикабыҙҙың төрлө ҡала һәм райондарында бокс секциялары уңышлы эшләп килә, унда балалар ҙур теләк менән йөрөй, йәш боксерҙар менән билдәле тренер-уҡытыусылар шөғөлләнә. Республикала бокс буйынса йыл һайын уҙғарылған турнирҙар йәмғәт тормошонда билдәле геройҙарға, спорт мастерҙарына арнала, мәҫәлән, республикабыҙҙа Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев, Социалистик Хеҙмәт Геройы Михаил Ферин, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре Төхвәт Аслаев, генерал-майор Рауил Фәйрүзов, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре Николай Митькин иҫтәлегенә бағышланған турнирҙарҙы йыл һайын уҙғарыу матур традицияға әйләнде. Һуңғы йылдарҙа уларға тағы ла Бәләбәй ҡалаһында РСФСР-ҙың атҡаҙанған машина төҙөүсеһе Марс Әмиров иҫтәлегенә бағышланған турнир өҫтәлде.

Бокс спортының төп шарты: бер урында тормаҫҡа, юғиһә, һиңә мотлаҡ һөжүм итәсәктәр һәм һин еңеләсәкһең. Был шарт спортсыға һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға, әленән-әле яңы маҡсаттар ҡуйырға йүнәлеш бирә, быға Башҡортостандың бокс ойошмалары ла һәр ваҡыт ынтыла. Шундай маҡсаттар ҡуйып йәшәгән өсөн дә беҙ яңы үрҙәрҙе тиҙерәк яулайбыҙ.

Спартакиадала ҡатнашҡан егеттәрҙең барыһы ла өмөтлө күренә, һәр береһе ярышҡа етди әҙерләнгән. Бында мин иң тәүҙә уларҙың тренерҙарының хеҙмәтен баһалап үтер инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикабыҙҙа аҙна һайын тиерлек бокс буйынса төрлө ярыштар уҙып тора. Әле бына генерал-майор Рауил Фәйрүзов иҫтәлегенә бағышланған турнирҙар бара. Турнирҙарҙың йыш уҙғарылыуына һәм унда ҡатнашыусыларҙың күплегенә ҡарағанда, ысынлап та, республикабыҙҙа бокс спортының ныҡлы үҫеш алғаны күренә. Әле үк үҙҙәренең уңышы менән һөйөндөргән боксерҙарға, уларҙың тренер-уҡытыусыларына киләсәктә уңыштар теләйек.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**



ЙҮКӘ ТЕЛЕФОН




### Һупайлы

• Быйыл ҡыш ҡар-буранлы булып, яҙ үҙ көсөнә инеп барыуына ҡарамаҫтан, Һупайлы халҡы элекке йылдарҙағы һымаҡ ошо данлы биҫтәне кинәт кенә һыу баҫып китеренән ҡурҡып, һупайып йөрөмәй. Киреһенсә, улар үтә шат күренә хәҙер. Бигерәк тә береһенән-береһе бейегерәк йорттарҙың икенсе ҡатында йәшәүселәрҙең йөҙҙәренән нур бөркөлөп тора: 20 йыл буйына улар үҙ фатирҙарына ауылдағы кеүек, үҙ аяҡтары менән күтәрелергә мәжбүр ине, ә хәҙер - лифт төймәһенә төртәһең дә, рәхим итеп, үҙ ишегең алдына "тып" итеп килеп тә баҫаһың. Хатта эшкә йәйәүләп кенә йөрөүсе "физкультурник" Мөтиғулла ла икенсе ҡатҡа лифтҡа ултырып менә икән. "Лифтҡа түләү һалынғас, эшләп тапҡанды елгә осороп булмай", - тип, күмәк бала-сағаһын да лифтҡа ҡыуалап индерә башлаған, тиҙәр. Беренсе ҡатты кинәт һыу баҫһа ла, хәүефе юҡ - лифт менән шыжлатып, икенсе ҡаттан 9-сы ҡатҡа менәһең дә китәһең!

• "Физкультурник" Мөтиғулланың ут күршеһе, үҙ хоҡуғы өсөн даулашырға ятраҡан "законник" Сәмиғулла торлаҡ-коммуналь хужалығы етәксеһенә ғариза яҙып индергән, ти. "Йортобоҙ подъезын яҡтыртыу өсөн ҡуйылып, башлыса янмай торған 1 электр лампочкаһы өсөн минең ғаиләмдәге 7 кешенең һәр береһенә түләү һалынғанлыҡтан, минең ишегем алдына өҫтәмә рәүештә 6 лампочка ҡуйыуығыҙҙы талап итәм", - тип яҙылған икән ул ғаризала.

### Ҡыйғы

• Ҡыйғы районының Аҫылғужа ауылында йәшәүсе, быға са талдан мурҙа, ҡаҙ ояһы үреп көн иткән балыҡсы Хәтмулла ҡартҡа ауыл хакимиәтенән ҙур заказ бирелгән. Ул быйыл 13 ҡаҙ ояһы үреп, ауыл хакимиәтенә тапшырасаҡ икән. Урындағы етәкселәр ҡаҙ үрсетергә тотонған икән, тип уйлай күрмәгеҙ, йәмәғәт. Балалар өсөн махсус автомобиль креслоларына аҡса булмағас, күрше ауылдың балалар баҡсаһына автобус менән алып барылыусы бала-саға ошо ҡаҙ ояларында ултырып йөрөйәсәк, ти. Һай, башлы ла инде үҙебеҙҙең урындағы нәсәлниктәребеҙ!

• Ҡыйғы районы атамаһының килеп сығышына арналған үҙешмәкәр тарихсылыр конференцияһында аяуһыҙ ҡыҙыу бәхәс ҡубып, үҙ фаразын нисек тә булһа өҫкә сығарырға теләүселәр яғаға-яға килеп, бер-береһенең һәҙәп-төймәләрен дә һанап сығырға өлгөргән, ти. "Ҡый" тамырын яҡлаусылар ҡыйғыларҙың "ҡый ҙа ҡый", тип һөйләшеүенә баҫым яһауына ҡарамаҫтан, был сүп үләндәре менән бәйле фараздан күпселек баш тартҡан. Ҡыйғының "ҡайғы"нан килеп сығыуын яҡлаусыларға дәррәү ябырылыусылар, оппоненттарын тар-мар итеп, уларҙы оло ҡайғыға һалып, шатлыҡ-ҡыуаныс менән тулы ауаздар сығарғас, мәҙәниәт һарайының ишектәре шар асылып киткән, ти. Ҡаты һүҙ алышында "ҡыйғыр" фаразы яҡлылар еңеү яулаған. Борон ошо ҡыйғырлы йылға буйын төйәк итеүселәрҙән "р" өнөн әйтә алмаусылар күп тыуа башлағас, Ҡыйғыр йылғаһы Ҡыйғыға әйләнгән, имеш. Булыр ул ҡыйғыларҙан, булмаҫ, тимәгеҙ!

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## БАЛАНҒА ҠУШ БАЛЫҢДЫ

**Ауырып, хәл бөтөп йөрөгәндә:** балан һутына бөтнөк төнәтмәһе ҡушып эсһәң, күҙ асылып китә. Бының өсөн 300 грамм баланды һыуҙа сайҡатып алғас, ярты стакан шәкәр ҡушып, 10 сәғәткә һалҡынса урынға ҡуйығыҙ. Ошо ваҡыт эсендә һарҡҡан һутты һығып алып, бер ҡалаҡ бал менән болғатып, графинға һалғас, бөтнөк төнәтмәһе ҡушырға кәрәк. Бөтнөк төнәтмәһе түбәндәгесә әҙерләнә: 2 ҡалаҡ киптерелгән бөтнөк үләненә ҡайнар һыу өҫтәп 15 минут тотҡас, һөҙөп алырға.

**Тамаҡ ауыртһа:** ике ҡалаҡ балан һутына бер ҡалаҡ лимон һуты менән бал, бер нисә тамсы һарымһаҡ һуты ҡушып, тамаҡты сайҡатырға.

**Йыйырсыҡтарҙы бөтөрәм, тиһәгеҙ:** балан һутын бәләкәй генә киҫәктәр итеп туңдырырға. Көн һайын берәүһе менән биткә массаж эшләргә. 10 көндән һуң бит ағарып, төрлө таптарҙан таҙарып, йыйырсыҡтар тигеҙләнеп ҡала.

**Шулай уҡ битлек эшләһәң дә бит тиреһе таҙарып, ағарып китә:** баланды иҙеп, бер балғалаҡ бал ҡушып болғатҡас, биткә һылап, 30 минут торорға ла йыуып төшөрөргә.

**Һалҡын тейһә, йүткергәндә:** йыуан ғына алоэ япрағын йыуып, һутын 1 балғалаҡ самаһы һығып алырға. Уға 1 балғалаҡ бал, аҡ май ҡушып, төнгөлөккә эсеп ятырға.

Шулай уҡ 1 балғалаҡ алоэ һутына 1 балғалаҡ бал ҡушып, 1 стакан йылы һыуға һалғас, бер нисә тамсы лимон һуты тамыҙып, төнгөлөккә эсеп ятырға була. 10 көн дауам итергә.

Һалҡын тейгәндән һуң йүтәл үтмәй икән, 1 ҡалаҡ һуған һутына 3 ҡалаҡ кишер һуты, 1 балғалаҡ бал, балғалаҡ осонда аҡ май ҡушып, көнөнә өс тапҡыр эсергә.

2 ҡалаҡ киптерелгән гөлйемеш емештәрен ваҡлап 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп, ярты сәғәт торорға ла һөҙөп, стакандың өстән бер өлөшөн көнөнә өс тапҡыр эсергә. Был төнәтмә организмды нығыта, витаминға байыта. Ошо уҡ төнәтмәне йылы көйөнсә ашар алдынан 15 минут алда эсһәң, үт ҡыуыла.

**Алһыу ҒӘЗИЗОВА.**

✓ *Бер туғандарығыҙҙы хөрмәтләгеҙ. Улар менән әҙәпле булығыҙ. Сөнки ата-әсәгеҙҙән һуң иң яҡын кешеләрегеҙ бер туғандарығыҙҙыр.*






## ҠЫҘ БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ата-әсә

● Хөрмәтле ҡыҙҙар! Атағыҙҙы хөрмәт итегеҙ. Алдында һәм артында уның өйрәткәндәрен ризалыҡ менән тулыһынса ҡабул итегеҙ. Ата-әсәгеҙҙе ихлас һөйөгөҙ, васыяттарын үтәгеҙ, теләктәренә ҡаршы килмәгеҙ, ҡаты күңелле булмағыҙ. Уларҙы хәсрәтләндермәгеҙ. Бар тырышлығығыҙ менән уларҙы ризаландырығыҙ. Ата-әсәһенә итәғәтле һәм белемле ҡыҙҙарҙың ғәҙәттәре көндән-көн гүзәлләнер. Дуҫиштәре араһында исемдәре хөрмәт менән телгә алыныр. Әммә ата-әсәләрен хөрмәт итмәгән, уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмаған ҡыҙҙар мөхәббәтһеҙ була, ата-әсәләре лә уларҙы һөймәй, сит кешеләр күҙендә насар күренәләр. Донъяла матур йәшәй алмайҙар.

● Атағыҙ алдында ултырғанда әҙәпле булығыҙ, күп көлмәгеҙ, кейемегеҙ менән уйнамағыҙ, уның тауышынан юғары тауыш менән һөйләмәгеҙ.

● Атағыҙҙан башҡа кешенән, яҡын кешегеҙ булһа ла, һис бер нәмә һорамағыҙ. Сөнки тура килгән һәр кешенән нәмә һорау ҡыҙҙарҙың күңелдәренең боҙолоуына сәбәп була. Атағыҙҙан, сит кешеләр юҡ ваҡытта ғына, әҙәпле генә һорағыҙ һәм бирмәһә, ҡабатламағыҙ.

● Атағыҙ юғалһа йәки вафат булһа, уның урынында ҡалған туғандарығыҙҙы уның кеүек ҡабул итегеҙ.

● Аҡса йәки башҡа ҡиммәтле әйберҙәрегеҙҙе атағыҙ һаҡларға бирегеҙ. Әсәгеҙ рөхсәтенән башҡа ашамлыҡ һәм эсемлектәргә ҡул һуҙмағыҙ. Көсөгөҙ етһә, йорт һәм өй эштәрендә әсәгеҙгә ярҙамсы булығыҙ. Уның эргәһендә йөрөгөҙ. Өй эштәрен башҡарырға өйрәнегеҙ. Тик тормағыҙ. Сәбәпһеҙ ятмағыҙ, өҫ-башығыҙҙы бысраҡ йөрөтмәгеҙ.

### Туғандар

● Бер туғандарығыҙҙы хөрмәтләгеҙ. Улар менән әҙәпле булығыҙ. Сөнки ата-әсәгеҙҙән һуң иң яҡын кешеләрегеҙ бер туғандарығыҙҙыр.

● Үҙегеҙҙән оло булған туғандарығыҙҙы ата-әсәгеҙ кеүек иҫәпләгеҙ.Уларға тауыш күтәрмәгеҙ. Улар менән низағлашмағыҙ. Уларҙың һүҙҙәренә ҡаршы сыҡмағыҙ. Уларҙы һөйөгөҙ.

● Кесе туғандарығыҙға шәфҡәтле булығыҙ, рәнйетмәгеҙ. Уларҙың ҡулдарында булған әйберҙәрҙе ҡыҫҡыртып алмағыҙ. Сөнки был уларҙың күңел бойоғоуына һәм ата-әсәгеҙҙең асыуланыуына сәбәп, ҡыҙҙарҙың әҙәпһеҙ булыуына ишара була.

● Ҡулығыҙҙа булған әйбер менән туғандарығыҙҙы ҡыҙыҡтырып ҡаратып ҡуймағыҙ, уларға ла өләш сығарығыҙ. Һәр ваҡыт уларға шәфҡәтле булығыҙ.

● Туғандарығыҙҙың әҙәпһеҙ эштәрен күрһәгеҙ, йомшаҡ ҡына итеп: "Былай эшләмә, оят була!" - тип хәтеренә төшөрөгөҙ. Дөрөҫ юлды күрһәтегеҙ.

● Туғандарығыҙҙы ата-әсәгеҙгә яманлап һөйләмәгеҙ. Телегеҙҙе кеше яманлауға ғәҙәтләндермәгеҙ.

### Ҡарындаштар

● Ата-әсәгеҙ, бер туғандар, уларҙың балаларын, башҡа ҡарындаштарығыҙҙы хөрмәт итегеҙ. Уларҙы яҡын күрегеҙ. Ғәйептәрен һөйләмәгеҙ. Уларҙың хөрмәтле кешеләр булыуын һис онотмағыҙ.

● Ата-әсәгеҙ рөхсәт иткән ваҡытта барып күрегеҙ. Ауырыһалар, хәлдәрен һорарға барығыҙ, ситтә булғандарын да белешеп тороғоҙ. Уларҙың шатлыҡтарына шатланығыҙ, ҡайғыларын уртаҡлашығыҙ. Уларҙың эштәрен эшләшегеҙ.

● Ҡарындаштарҙың ололарын атағыҙҙы хөрмәт иткән кеүек шәфҡәт итегеҙ.

**(Дауамы бар).**

*БУЛМАҪ, ТИМӘ!*

# НУХТЫҢ КӘМӘҺЕ ҠАЙҘА - АРАРАТТАМЫ, ТОРАТАУҘАМЫ, ӘЛЛӘ?..

## йәки Илле йыл элек төшөрөлгән бер фотоһүрәт эҙҙәренән

**Нух тураһындағы риүәйәтте, моғайын, ишеткәнегеҙ барҙыр. Иҫегеҙгә төшөрәйем, булмаһа. Бер мәл Алла кешеләрҙән ваз кисә. Үҙҙәрен үтә боҙоҡ тота башлай шул улар. Аллабыҙ оҙаҡ уйлап тормай - кешелекте генә түгел, ғөмүмән, донъялағы бар тереклекте юҡ итергә була. Ни эшләргә? Атом бомбаһы әлегә уйлап сығарылмаған. Башҡа төрлө ҡорал да юҡ Алла ҡулында. Хәйер, барыһы ла Уның ҡөҙрәтендә бит. Ул Үҙе әүәләгән Ерҙе. Һәм Үҙе хайуандар менән тултырған. Үҙе үк Әҙәмгә һәм Һауаға йән өргән. Үҙе үк уларҙың йәнен тартып алыу мөмкинлегенә эйә. Ниндәй юл менән теләй, шундайҙы һайлай. Теләһә утта яндыра. Теләһә... Иң анһаты - һыуға батырыу. Балыҡтар һәм диңгеҙ-океандарҙа йәшәгән башҡа төрлө хайуандарҙы (киттар, дельфиндар һәм башҡалар) иҫәпкә алып тормайбыҙ. Улар, күрәһең, гонаһһыҙ йән эйәләре булғандыр инде. Уларҙы юҡ итер өсөн Ер шарын һыуһыҙ ҡалдырырға кәрәк бит. Ярар. Быныһы һүҙ араһында ғына.**

### Әкиәт тимә, туған...

Ә Нухты нишләп йәлләгән һуң Алла, тигән уй килгәне юҡмы башығыҙға? Нух - саф күңелле изге кеше булған бит. Башҡалар кеүек боҙоҡлоҡ ҡылмаған. Бер һүҙ менән әйткәндә, Бәйғәмбәр. Алла уны үҙ янына саҡырып алғанмы, былай ғына күктән ҡысҡырып әйткәнме, әллә башҡа берәй юл менән уға үҙенең уйҙарын еткергәнме - бөгөн билдәһеҙ. Әммә ҙур итеп көймәк төҙөргә бойороҡ биргәне аңлашыла. Нух ауыр хәлдә ҡала. Ул тәүҙә башҡаларҙы, боҙоҡ кешеләрҙе был хаҡта иҫкәртеп ҡарай. Ул һеҙгә күктән ямғыр ебәрер, тип ҡурҡытып маташа. Файҙаһыҙ. Тегелар быны өндәүҙәрен ҡолаҡтарына ла элмәй. Бынан тыш, Алла Нухҡа хайуан-маҙарҙың, ҡош-ҡорттоң һәр бер төрөнән берәр парҙы йыйып, көймәккә тултырырға ҡуша. Туфан һыуы тартылғандан һуң Ерҙәге тереклек ҡабаттан үрсеп таралып китһен өсөн инде.

Әкиәт бит был, тиерһегеҙ. Әкиәт буш урында тыумай ҙа баһа. Бөгөн Ерҙә йәшәгән һәр бер боронғо халыҡта Туфан һыуы тураһында берәй риүәйәт бар. "Боронғо халыҡ" тип айырым баҫым яһауым аңлашылалыр. Ындай риүәйәт башҡорттарҙа ла бар. "Урал-батыр" тип атала ул.

Хәтерләйһегеҙме?

Борон-борон борондан,
Кеше-маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
(Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән),
Дүрт яғын диңгеҙ урatҡан
Булған, ти, бер урын.

Дүрт яғынан һыу булыуы ул урындың бейектә урынлашыуын аңлата түгелме? Күтәренке урын, йәғни тау башы була бит был.

Һәм, артабан:

Был ҡарт менән был ҡарсыҡ
Ҡайҙан бында килеүен,
Ата-әсә, ер-һыуы
Ҡайҙа тороп ҡалыуын
Үҙҙәре лә онотҡан, ти.
Икәүҙән-икәү шул ерҙә
Башлап ғүмер иткән, ти.

Был юлдар инде туранан-тура Туфан ҡалҡҡандан һуң тере ҡалғандар хаҡында һөйләй. Һыу уларҙың кәмәһен ҡайҙа алып килеп ҡалдырғанын, ҡайһы тау башына килтереп терәгәнен үҙҙәре лә белмәй.

Ысынлап та, Туфан һыуы тартылғас, Нух кәмәһен ҡайҙа килтереп терәй икән? Арарат тауына, тиелә боронғо сығанаҡтарҙа. Аныҡлап әйткәндә, Тәүратта. Нухтың, уның көүшәгенең ҡиәттә генә түгел, ә ысынбарлыҡта булғанына ышанғандар бөгөн уны ысынлап та Кавказда, Арарат тауында эҙләй. Әммә бер нәмә лә таба алмай. Эйе, Нух һәм уның кәмәһе ысынлап та булған, тигән фекергә килһәң, унан бит ниҙер булһа ла ҡалырға тейеш. Туфан һыуына тиклем нисәмә миллион йыл элек йәшәгән динозаврҙарҙың һөйәктәре (һәм хатта йомортҡалары!) һаман табылып тора. Ә Нухтың кәмәһе - юҡ. Ғәжәпме? Ғәжәп!

Бер ҙә ғәжәп түгел, тиерһегеҙ. Ул бит ағастан эшләнгән булған. Ә ағас серей. Уны ямғыр еүешләй. Ҡояш киптерә. Әсе елдәр ашай. Ағасты төрлө бөжәктәр, ҡорттар йыра. Ахыры сиктә, ул таралып, тарҡалып юҡҡа сыға. Эйе. Әммә уның бер әтнәкәһе бар. Билдәле бер шарттарҙа, мәҫәлән, һауа ҡоро булһа, ағас бик оҙаҡ, бер нисә тиҫтә мең йыл һаҡланырға мөмкин. Һис юғында, уның ниндәй ҙә булһа эҙҙәре ҡалырға тейеш бит. Йылъяҙмасы Иосиф Флавий Әрмәнстандағы Арарат тауында Нухтың карабынын бер өлөшөн һаман да күреп була, тип яҙып сыға. Билдәле сәйәхәтсе Марко Поло ла үҙенең китабында "Әрмәнстандың иң юғары нөктәһе булған Арарат тауында мәңгелек ҡар менән ҡапланған Нух көүшәге ята. Тик унда берәү ҙә менә алмай", тип билдәләп үтә.

Асылда иһә, әрмән халҡының үҙенсәлекле символы булған Арарат тауы менән Тәүратта әйтеп үтелгән Арарат тауҙары араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ. Әрмәндәр үҙ телдәрендә Араратты Масис (йәғни, бөйөк, иң бейек тау) тип атай. Ә, мәҫәлән, башҡорттоң тәйәге булған Урал тауҙары бөтә телдәрҙә лә бер үк төрлө яңғырай. Урыҫтарҙың Уралды Таш билбау тип атауы бары тик был халыҡтың образлы фекер йөрөтөргә әүәҫ булыуы хаҡында ғына һөйләй кеүек.

Билдәле булыуынса, Тәүрат айырым бер китап булараҡ, төрлө ваҡытта төрлө кешеләр тарафынан яҙылған айырым-айырым әҫәрҙәрҙән беҙҙең эраға тиклем VII-VI быуаттарҙа төҙөлгән. Тәүратҡа тиклем үк бөтә Ерҙе баҫып алған Туфан һыуы тураһындағы мифтар Месопотамияла киң таралған булған. Улар иһә үҙ сиратында был легендаы шумерҙарҙан үҙләштергән. Был һеҙгә бер нәмә хаҡында ла һөйләмәйме? Билдәле ғалим Салауат Ғәлләмов башҡорт һәм шумер мифологияһының уртаҡлығын төрлө яҡлап иҫбатлай ҙа баһа. Туфан һыуы тураһындағы риүәйәт шумерҙарҙан башҡорттарға килгәнме? Әллә - киреһенсәме? Ә, бәлки, "Урал-батыр" эпосының беҙгә билдәле түгел йәки меңәрләгән йылдар арауығында сәсәндән сәсәнгә күскәндә юғалтылған, онотолған өлөштәре лә булғандыр? Һәм тап улар Туфан һыуы тураһындағы боронғо башҡорт эпосын тәшкил иткәндер? Кем белә...

Хәйер, һүҙем Туфан һыуынан һуң ҡайҙалыр килеп терәлгән Нух кәмәһе хаҡында ине бит әле.

Уйлап ҡараһаң, Ер шарында Нухтың кәмәһе килеп терәлерлек бейек урындар аҙ түгел. Һәр бер тау башына көүшәк килеп ултырыуы ихтимал. Мәҫәлән, Һималай тауҙарына. Йә булмаһа, Альп үрҙәренә, Карпат һырттарына. Европала ундай үрҙәр аҙмы ни? Ә нишләп Урал тауҙары түгел һуң? Тәүратта телгә алынған Арарат тауҙарының икенсе бер атамаһы Урарат йәки Урарту бит. Уралдың Урартуға, артабан Урараткә һәм Араратҡа әүерелеүе мөмкинме? Һис шикһеҙ.

### Серле фотоһүрәт эҙҙәренән

Донъяның шул тиклем ҡыҙыҡ һәм үҙенсәлекле ҡоролғанына мин көн һайын, юҡ, сәғәт һайын инанам. Кешелек быуаттар буйына эҙләгән артефакт тыныс ҡына Кавказдан һәм Арарат тауынан Месопотамиянан һәм Шумерҙан

✓ *Ер биләмәләрен ҡулдарына еңел төшөрөү ниәте менән был ҡомһоҙ йыртҡыстар: "Ерҙе үҙ теләктәре менән һатмаған урындарҙа уны ҡаҙна юҡ хаҡҡа ғына тартып аласаҡ", - тип, ялған хәбәр тараталар.*

меңәрләгән саҡырым алыҫлығында урынлашҡан Урал тауҙары башында ята. Тик был турала берәү ҙә белмәй һәм хатта уйлап та бирмәй.

Йөҙәрләгән фараз бер фотоһүрәт ярҙамында юҡҡа сығарыла ла ҡуйыла.

Хәйер, бөтәһен дә баштан. Ирәндек тауы беҙҙең ауылыбыҙҙан алыҫ түгел, күгәреп кенә күренеп тора. Миңә бәләкәй сағымда уҡ был тауҙар ниндәйҙер сер йәшергән төҫлө тойола торғайны. Ҙурайғасыраҡ Ирәндектән бейегерәк, мөһабәтерәк, ҙурыраҡ тауҙар барлығын белдем. Уларҙың баштарында мәңгелек боҙ. Уларға альпинистар үрмәләй. Ҡайҙалыр ошо тауҙарҙың береһендә "Тау барыҫы" Владимир Башкиров ятып ҡалған. Әммә Ирәндек тауҙары барыбер үҙҙәренең серлелеген юғалтманы. Ҡуйынында күп һанлы шишмәләрҙе һәм күлдәрҙе, тарлауыҡтарҙы ғына түгел, ә ниндәйҙер олораҡ, мәңгелек серҙе йәшереп ятҡан һымаҡ булды.

Яңы быуаттың тәүге йылында йылы йәй көндәренең береһендә мин ошо фотоһүрәткә тап булдым. Осраҡлы рәүештә тип әйтеп булмай. Яҡын ғына бер танышымдың атаһы (күптән мәрхүм инде) оҙаҡ йылдар буйына фотография менән шөғөлләнде. Вафат булғас, ауыл китапханаһын тулыландырырлыҡ китаптар, магнитофон яҙмалары, ифрат күп фотоһүрәттәр һәм рулон-рулон фотопленкалар ҡалды. Танышым китаптарҙы үҙ йортона күсереп ҡуйған, ә магнитофон яҙмаларын һәм фотоматериалдарҙы ҡатырға ҡумтаға тултырып, йорт соланына ултыртҡан. Йәнәһе, кемгә кәрәк улар? Ысынлап та, заманалар үҙгәрҙе бит. Хәҙер фотоһүрәттәр туранан-тура компьютер мониторына сығарыла. Танышымда ҡунаҡта булғанда бер көн әлеге лә баяғы ҡумтаны сығарып алып ҡарарға тотондом. Фотоһүрәттәр иҫ киткес сифатлы эшләнгән. Профессионал ҡулы һиҙелеп тора. Башлыса ауылыбыҙҙың кешеләре һүрәтләнгән. Мәжлес ваҡытында, тәбиғәт ҡосағында. Йорт алдына йыйылып төшкән ғаилә портреттары бихисап. Тағы ла ниндәйҙер тауҙар, урмандағы ағастар, үләндәр. Фотоһүрәттәрҙе байҡап сыҡҡас, пленкаларға тотондом. Уларҙың һәр береһе ҡара цилиндр ҡапҡа бөхтәләп төрөп һалынған. Ҡаптың тышына йәбештерелгән ҡағыҙға ҡара менән нисәнсе йылда, айҙа һәм көндә ҡайһы төбәктә төшөрөлгәне ҡыҫҡаса ғына яҙылған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ваҡыт үтеү менән ҡағыҙ һарғайған. Ә танышымдың солан түбәһе тишек булып сыҡҡан. Һәм яҙғы ямғырҙар ҡатырға ҡумта эсенә төшөп, ярайһы уҡ көслө зыян килтергән. Фотопленкалар һалынған ҡаптарға йәбештерелгән яҙыуҙар урыны менән бөтөнләй юйылған. Ә ҡайһы бер урындарҙа иһә танымаҫлыҡ хәлгә ингән.

Ҡаптарҙы осраҡлы рәүештә генә алам. Асам. Пленканы күҙ йүгертеп кенә ҡарап сығам. Йәштәргә аңлатып үтергә кәрәктер. Элек аҡ-ҡара фото ғына булды. Ә пленкала иһә төҫтәр урыны менән алмашына торғайны. Йәғни, ҡара нәмәләр аҡ булып күренә, ә аҡһыл төҫтәгеләр иһә ҡарая. Теләһәң, кадрға нимә эләккәнен айырып була. Иғтибар менән ҡараһаң, әлбиттә. Тиҫтәләгән пленканы ҡарап сыҡҡанмындыр. Кешеләр, мәжлестәр, тәбиғәт, ниндәйҙер сабыйҙы ир кеше ҡулына күтәргән, бәләкәс кенә малай телен сығарып, ир менән ҡатын араһында ултыра. Ялҡып киттем. Был мәғәнәһеҙ эште ташларға кәрәк инде, тип уйлана башланым. Тик бер башлағас, тамамларға кәрәк, тигән фекер генә мине пленкаларҙы ҡарауҙы дауам итергә этәрҙе. Бер пленка тулыһынса тиерлек тауҙарҙа төшөрөлгән кадрҙарҙан тора ине. Ниндәйҙер һырттар, тау-таш араһында үҫкән тәбәнәк кенә ҡарағайҙар, кәкеребөкөрө ҡайындар... Пленка тамамланды, тигәндә генә ҡапыл ғына күҙемә тауҙарға хас булмаған бер күренеш салынып ҡалды. Аңламаным. Ҡабаттан ентекләберәк ҡараным. Һуңғы кадрҙа тау һыртында... карапмы, берәй ҙур кәмәме? Ултырған урынымдан тороп киттем, хатта. Ысынлап та таумы был? Әллә диңгеҙ ярымы? Юҡ, тау һырты. Яҡында ғына ылыҫлы ағастың ботағы күренә. Ҡая ташты мүк ҡаплаған. Алыҫтараҡ иһә... эйе, елкәнле карап. Кәмә тип әйтерлек түгел. Ҙур. Фотопленканың ҡабын ҡарарға тип ынтылдым. Ҡасан һам ҡайҙа төшөрөлгән икән, йәнәһе. Тик... Барыһы ла бушҡа ғына. Аяуһыҙ ваҡыт пластмасса ҡапҡа йәбештерелгән ҡағыҙҙы һарғайтҡан. Ә ямғыр тамсылары ҡараны йыуып танымаҫлыҡ иткән. "Ир..." һәм "196. ... .айы" тигән һүҙҙәрҙе генә айырып була ине.

Танышымды саҡырып алып, пленканы күрһәттем, туйғансы әрләнем. Шунан "Атайың ҡайҙалыр ситкә, алыҫҡа йөрөнөмө икән?" - тип һорай ҡуйҙым. Ул яурындарын ғына һелкте. Йәнәһе, ҡайҙа ғына барһын инде ярлы уҡытыусы 60-сы йылдарҙа?

"Ир..." тигәне Ирәмәлме, әллә Ирәндекме икән? Башҡа ундай тау атамалары юҡ һымаҡ. Моғайын, Иран йәки Ираҡ түгелдер, тип башҡа пленкаларҙы ентекләп ҡарап сыҡтым. Юҡ. Сит илдәргә сығып йөрөмәгән һымаҡ күренә. Тимәк, йә Ирәндек һырттарында, йә Ирәмәлдең кеше аяғы баҫмаған ерендә ошо карап һөлдәһе һаман булһа ла ятырға тейеш. Меңәр йылдар буйына уға бер нәмә лә тиерлек булмағанда, һуңғы 50 йыл эсендә ни булһын инде? Берәй иҫерек турист араҡынан алйып, ут төртөп яндырып китмәһә инде.

Шул арала танышым да атаһы һөйләгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө. Ҙурайып, егет ҡорона ингәс, мин һиңә оло бер сер асырмын, тип башлай ҙа, көн һайын тиерлек, Туфан һыуы ҡалҡҡанда, тип башланған әкиәт һөйләй торғайны, тик мин бер ваҡытта ла ул әкиәтте аҙағынаса тыңлап бөтмәй, йоҡлап китә инем шул, тип ауыр көрһөндө ул.

Бәлки, был карапты танышымдың атаһынан башҡа ла күреүселәр булғандыр? Бәлки, тағы ла кемдеңдер хәтер һандығында ошо кәмә хаҡында иҫтәлектәр һаҡланалыр, йәки соланында фотоһүрәттәр тултырылған ҡатырға ҡумта ултыралыр? Ҡарағыҙсы әле, йәмәғәт.

**Заһир ШОҢҠАРОВ.**



АТА-БАБА АҠЫЛЫ

**Мөхәмәтсәлим ӨМӨТБАЕВ**



# ЙӘМҒИӘТ ТӘРТИПТӘРЕ

● Өс сәсеүле система аҙ ерле дачаларҙа ҡулланыла ла инде. Был система ҡомһоҙ йыртҡыстар өсөн файҙалы булмаһа ла, ерҙе ашлау, эшкәртеү өсөн бик кәрәк. Күп ерле дачаларҙа ла шул уҡ система йәшәп килә. Әммә, етерлек оҫталыҡ һәм һөнәр булмағанлыҡтан, уларҙағы ярлы крәҫтиәндәр ҙә аҙ ерле башҡорттарҙан яҡшыраҡ йәшәмәйҙәр. Улар үҙҙәренең килемен бары һөрөнтө ерҙәре һәм болондары етерлек булыуы һәм ер арендалаусыларҙан алынған средстволар арҡаһында ғына һаҡлап киләләр.

● Вотчинниктарҙың ярлыланыуының һәм бөлөүенең иң төп сәбәбе булып шул тора: ... күп урында ерҙе әле булһа X ревизия буйынса биләйҙәр, ә ул ревизия буйынса иҫәпләп йөрөтөлгән кешеләрҙең өстән бер өлөшө хәҙер донъяла юҡ. Шул уҡ ваҡытта 1859 йылғы X ревизиянан һуң тыуған 38 мең кеше ерһеҙ ҡала бирә. Шул тәртип арҡаһында бер үк волостағы бер ауыл икенсеһенә ҡарағанда әллә ни саҡлы ер биләмәләрен артыҡ тота. Ҡыҫҡаһы, ауыл менән ауыл, кеше менән кеше араһы - ер менән күк араһы.

● Тағы ла бер ғәҙелһеҙлек шунан ғибарәт: закон буйынса башҡорттоң үҙ ерен бер йылдан оҙаҡҡа һатырға хоҡуғы юҡ. Ләкин быны ситләтеп үтәләр. Һәр бер ярлы, староста шаһитлығында, расписка менән үҙ ерен әллә нисә йылға бирә. Тик, законда ҡушылғанса эшләнә тип күрһәтер өсөн, йыл һайын расписканы яңырта баралар. Шул рәүешле, ер кәм тигәндә биш йыллыҡ һәм унан да артығыраҡ срок менән һатыла. Ә кәрәк булып-нитеп китһә, ярлы үҙ ерен аҙаҡ кулактан өсләтә артыҡ түләп алырға мәжбүр була. Әгәр түләргә ҡулынан килмәй икән, кисектереп тороу юҡ, ерендән тағы ла бер нисә йылға хушлаш... Шулай итеп, ер киләһе быуатта ла кулак ҡулында буласаҡ.

● Ер менән алыш-биреш итеү шул уҡ ҡомһоҙ йыртҡыстарға файҙа килтерә. Приговорҙа күрһәтелмәгән аҡсаның ҡалғаны уларҙың кеҫәһенә кереп тора. Приговорҙа күрһәтелгән сумма иһә ярлыларға ағымдағы йылдың төрлө һалымдарын ҡапларға ла етмәй. Ер биләмәләрен ҡулдарына еңел төшөрөү ниәте менән был ҡомһоҙ йыртҡыстар: "Ерҙе үҙ теләктәре менән һатмаған урындарҙа уны ҡаҙна юҡ хаҡҡа ғына тартып аласаҡ", - тип, ялған хәбәр тараталар. Былдай талау, алдашыуҙарға тик ерҙе дөйөм файҙаланыу тәртибен индергәндә генә сик ҡуйып булыр. Ерҙе община менән файҙаланыу хатта бик файҙалы буласаҡ, сөнки ул ваҡытта ер йән хисабына бүленәсәк.

● Аҙ ерле дачаларҙа йән башына тейешле 15-әр дисәтинәнән, өс сәсеүле системаға ярашлы рәүештә, өсөнсө баҫыу һәм көтөүлек өсөн бүлгәндән һуң, ни бары 5-6-шар дисәтинәле генә ер бүлемдәре тороп ҡала. Ҡайһы берҙә уларҙың да бер өлөшө байҙар тырышлығы менән бер нисә йылға арендаға бирелә. Әммә уларҙың ҡылған был эштәре хаҡында ниндәй ҙә булһа шикәйәт ҡағыҙы төҙөү староста ҡатнашлығынан тыш бөтөнләй мөмкин түгел. Ә староста һәр саҡ ауыл хәлләренән торған партия ҡулы аҫтында.

**(Дауамы. Башы 13-сө һанда).**

*✓ Ә юморҙы аңламаған кешене йәлләйем. Юморҙы ҡалып менән йәшәгәндәр аңлай һәм ҡабул итә алмайҙыр, тип уйлайым. Юмор тойғоһо булған кеше - бик бай кеше һәм һәр кем был тойғоға эйә түгел.*

# ХАЛЫҠ ҮҘ-ҮҘЕНӘН

## тимәк, ул халыҡтың

**Беҙ урыҫ телендә үҙенсәлекле акцент менән бәйән ителгән Кавказ халыҡтары юморы менән яҡшы танышбыҙ. Шулай уҡ мөхәббәт мәсьәләләрендә бик нескә французлдарҙың да юморы таныш беҙгә. Чукчаларҙың бер ҡатлылығынан көләбеҙ, урыҫтар күберәген ҡыҙ-ҡатын булып кейенеп, ғәриплектән көлә. Татарҙар яртылаш урыҫса һүҙҙәр ҡулланып һөйләшкән сауҙагәрҙән йә иҫеректән көлә... Ҡыҫҡаһы, һәр бер халыҡтың үҙенә генә хас юморы бар һәм ул юмор ул халыҡтың менталитетына, холоҡ-фиғеленә туранан-тура бәйле. Ә бына ошоларҙан айырмалы рәүештә, башҡорт юморының үҙенсәлеге нимәгә ҡайтып ҡала? Башҡорт юморының йөҙө ниндәй? Ни өсөн беҙ күп осраҡта үҙ юморыбыҙҙы күрһәтеү, сәхнәләштереү урынына, башҡаларҙың юморын өҫтөн күрәбеҙ? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында Башҡортостандың халыҡ артисы, Башҡортостан Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Әхтәм АБУШАХМАНОВ менән шағир, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, "Аманат" журналының яуаплы сәркәтибе Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ әңгәмәләшә.**

▸ **Һеҙ юморҙың халыҡ, милләт менталитетына бәйле булған асылын нисегерәк итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Халыҡ бер төрлө, уның юморы икенсе төрлө булыуы мөмкинме?**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Башҡорт юморының иң ҙур өлөшө әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт кимәленә күтәрелеп етмәйенсә, ауыҙ-тел ижады рәүешендә күберәген ауылдарҙа, халыҡ телендә, ҡылығында йәшәй. Башҡорт юморының формалары, жанрҙары төрлө-төрлө. Мәҫәлән, таҡмаҡтар, лаҡаптар, көләмәстәр. Халыҡ көнкүрешендәге юморҙың әҙәби-мәҙәни кимәлгә күтәрелгәндәре лә бар. Улары - кәмиттәр, әкиәттәр, шаян йырҙар, юморескалар, сатирик хикәйәләр, повестар, романдар. Шулай ҙа беҙ үҙебеҙҙең юморҙы үҫтереү урынына күберәк башҡаларға эйәрәбеҙ, башҡалар һымаҡ ҡыланабыҙ. Мәҫәлән, гәзит-журналдарҙа урыҫ телендәге анекдоттарҙы башҡортсаға тәржемә итеп баҫтыра башланылар. Уларҙы урыҫ телендә уҡығанда - көлгө, башҡортса уҡыһаң, илағы килә. Дөрөҫөрәге, ундағы фажиғәле хәлдән түгел, юморҙың юҡлығынан илағы килә. Задорнов Рәсәй тормошон Америкалағы менән сағыштырып, үҙебеҙҙең ысынбарлыҡтан көлә, төптән уйлап ҡараһаң, уның юморынан да ултырып иларлыҡ.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Әҙәбиәт, сәнғәттең ролен мин халыҡты тәрбиәләүҙә күрәм. Уларҙағы тәрбиәнең иң көслө ҡоралы булып сатира һәм юмор һанала. Нисек тәрбиәләй һуң? Халыҡты ахмаҡлыҡтан, наҙанлыҡтан арындырып, таҙартып. Кеше үҙ-үҙенән көлә алһа, ул батыр кеше. Ә инде халыҡ үҙ-үҙенән көлә алһа, ул халыҡтың киләсәге бар. Сөнки халыҡ ошоноң менән таҙарына, кире һыҙаттарынан, комплекстарынан арына һәм киләсәге өсөн күркәм холоҡ-фиғел барлыҡҡа килтерә. Һәр бер халыҡтың үҙ юморы бар. Ул иң тәүҙә борон-борондан килгән алама ғәҙәттәрҙән көлөү. Мәҫәлән, татар халҡының юморы ни өсөн баҙарға яҡын, сөнки улар борон-борондан сауҙагәрлек менән шөғөлләнгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡыҙ-ҡатын булып кеше көлдөрөргә тырышҡан урыҫ юморын мин юмор тип тә, сатира тип тә ҡабул итә алмайым. Былар тамам ялҡытты. Ә башҡорт юморына килгәндә, беҙҙең юмор ултыраҡлы, кинәйәле һәм тәрән фәлсәфәле булған. Халыҡ бер төрлө, уның юморы икенсе төрлө булыуы мөмкин түгел, сөнки ситтән, икенсе милләттән алынған ҡиммәттәр менән йәшәгән халыҡ үҙ асылын юғалта.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы осорҙа беҙ маҡтанып ыраҡ йәшәй башланыҡ та, шул арҡала юмор һәм сатира онотола. Элек мин театрға эшкә килгәндә оло быуын артистары сәхнә артында айырым көлкө "кисәһе" ойоштора ине. Улар бер-берененән бик әсе итеп көлә беләләр ине. Бөгөн был юҡҡа сыҡты һәм шуға бәйле театрҙың да фантазияһы һайығайҙы. Мин үҙем дә кешегә төрттөрөргә яратам һәм миңә лә төрттөрөп әйткәндәрен ҡабул итәм, ә юморҙы аңламаған кешене йәлләйем. Юморҙы ҡалып менән йәшәгәндәр аңлай һәм ҡабул итә алмайҙыр, тип уйлайым. Юмор тойғоһо булған кеше - бик бай кеше һәм һәр кем был тойғоға эйә түгел. Филармония сәхнәһендәге юмористарҙың ҡайһы берҙәренең сығыштарына ҡарап әсенеп тә ҡуям. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең юморҙар кендектән түбәнге мәсьәләләргә ҡоролоп китте.



*Әҙәбиәт, сәнғәттең ролен мин халыҡты тәрбиәләүҙә күрәм. Уларҙағы тәрбиәнең иң көслө ҡоралы булып сатира һәм юмор һанала. Нисек тәрбиәләй һуң? Халыҡты ахмаҡлыҡтан, наҙанлыҡтан арындырып, таҙартып. Кеше үҙ-үҙенән көлә алһа, ул батыр кеше. Ә инде халыҡ үҙ-үҙенән көлә алһа, ул халыҡтың киләсәге бар. Сөнки халыҡ ошоноң менән таҙарына, кире һыҙаттарынан, комплекстарынан арына һәм киләсәге өсөн күркәм холоҡ-фиғел барлыҡҡа килтерә. Һәр бер халыҡтың үҙ юморы бар. Ул иң тәүҙә борон-борондан килгән алама ғәҙәттәрҙән көлөү.*

▸ **Был хәлгә шулайыраҡ тип тә баһа бирергә булалыр: юморист ни тиклем таланттһыҙ булған һайын, ул шул тиклем кендектән аҫҡараҡ төшә бара...**

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Эйе, сөнки халҡының фиғелен тәрән тойған һәм аңлап эш иткән кеше генә ысын юмор оҫтаһы була ала. Һуңғы ваҡытта беҙҙә юмор аҡһап китте. Башҡорт халҡының ниндәй генә сәнғәт өлкәһен алып ҡарама, уларҙа фәлсәфә сағыла. Мәҡәл-әйтемдәрҙе генә алып ҡарайыҡ. Бер генә әйтемгә таянып пьеса йә роман яҙып була. Мәҫәлән, "Алтын ҡалаҡ тәмләндермәй тәмһеҙ ашты, хужа булыу йәмләндермәй ахмаҡ башты", тигән әйтем бар. Бер уйлаһаң, был һүҙҙәрҙең аҫтында юмор, көлкө генә ятҡан кеүек, ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң... Башҡорт юморының характерын мин ошо миҫал менән генә аңлатып бирер инем. Беҙҙең юмор көнитмешебеҙгә лә, тәбиғәткә мөнәсәбәтебеҙгә лә бәйле. Башҡорттоң тәбиғәт ни бирһә, шуға риза булып йәшәй белеүе башҡалар тарафынан ялҡаулыҡ тип тә ҡабул ителгән. Әйтәйек, "Бер аяғын күтәрһә, икенсеһен эт ашай", тигән мәҡәл дә халыҡтың ошондай байманлыҡ хәләтенә бәйле. Беҙҙең йолаларыбыҙҙағы ҡыҙыҡлы күренештәр ҙә юморға әүерелеп китә. Әйтәйек, яңы төшкән килендең ҡайныһы менән һөйләшергә хоҡуғы булмаған, йәғни ҡайныһына "күренес" бүләк бирмәйенсә тороп, уға "Һаумы, ҡайным!" тип өндәшә алмаған. Килен менән ҡайны араһындағы ошондай мәжбүри өнһөҙлөккә бәйле күпме көлкөлө лаҡаптар бар. Беҙгә халҡыбыҙ көнкүрешендә йәшәгән юморҙы әҙәбиәт, сәнғәт кимәленә күтәреп үҫтерергә, башҡаларға күрһәтергә кәрәк. Шулай итһәк кенә беҙҙең киләсәгебеҙ бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, матбуғат баҫмалары баш мөхәррирҙәре, дөрөҫ аңламауҙары бар, тип, нишләптер, юморҙан ҡурҡа төшә.

Башҡорт дәүләт академия драма театры артистарының береһенә лә исемдәре менән өндәшмәйҙәр ине, уларҙың һәр ҡайһыһының ҡушаматы булды. Улар шул тиклем оҫта ҡушыла, эйәһенән айырып булырлыҡ түгел, хатта исемдәренә ҡарағанда ла дөрөҫөрәк. Мәҫәлән, Сыртланов фамилиялы ике артистың береһен "Большевик Сыртлан", икенсеһен "Дворян Сыртлан" тип йөрөттөләр. Кемделер "Ҡуян", кемделер "Дөйә" тип, мине "Абушахман" тип кенә атанылар. Арыҫлан Мөбәрәков - "Мөбәрәк", Шамил Рәхмәтуллин "Шаҡай" булып йөрөнө. Ҡушамат тағыуға Ғәлимйән ағай Ҡарамышев бик оҫта була торғайны.

Беҙҙең ауылда иһә ҡушаматтары менән ғорурланған кешеләр булды. Минең бер иптәште "Кофейник" тип йөрөттөләр, икенсе берәүҙең ҡушаматы "Ҡомған". Шунан бер мәлде ситтән бер егет беҙҙең ауылға эшкә килгән дә, уны тракторға запчасть артынан "Кофейник"ҡа ебәргәндәр: "Бар, ана, Ҡомған ағайынан һора",- тигәндәр. Егет: "Ҡомған ағай, миңә шул-шул нәмә кәрәк, һиндә юҡмы?" - тигәс, был: "Һин, ҡустым, нишләп минең исемде боҙаһың, мин бит "Кофейник", - тип, ғорур рәүештә яуап ҡайтарған. Ул бер ҙә янып, йәмшәйеп бөткән ҡомған булғыһы килмәгән, европаса яңғыраған кофейникты яҡыныраҡ күргән.

Тимәк, юмор, сатира беҙҙең халыҡта шул тиклем көслө, бай, ә инде әҙәбиәт, сәнғәт тирәһенә яҡынлаһаң, ул шыйыға башлай. Был хәл беҙҙең халыҡтан айырылыуыбыҙ тураһында һөйләй. Ғөмүмән, үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, әҙәбиәт тә, сәнғәт тә халыҡтан шул тиклем алыҫлашты, йәмәғәт. Беҙҙең хатта юғары уҡыу йорттарыбыҙ халыҡтың көнкүрешен, тормош асылын аңламайынса, үҙ эше менән генә булып ята. Уларҙың әҙерләгән кадрҙары был халыҡҡа, был тормошҡа кәрәкме-юҡмы, был хаҡта уйлаусы ла юҡ.

▸ **Һеҙ һөйләгән хәлдәр юморҙың аръяғындағы парадокстарҙыр. Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә халыҡ театрға йөрөмәй, уҡыусы китап уҡымай икән, ошо уҡ хәл сәнғәттең һәм әҙәбиәттең халыҡтан айырылғанын күрһәтеп тора бит...**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Тағы бер парадокс: гәзит-журналдар көләмәстәр һәм лаҡаптар, радио һәм телевидение эфиры арзан зауыҡлы юмор һәм сатира менән тулғанда, "Һәнәк" журналы бөтөнләй үҙенең төҫөн юғалтты. Тиражы ла көлкө кимәленә тиклем төштө. Уның яңы баш мөхәррире Салауат Әбүзәргә беҙ күмәкләп ярҙам итергә тейеш. Был журналды мин уҡырға теләһәм дә, уҡый алмайым, сөнки ундағы юмор халыҡтыҡы түгел. Журналда сатираның һәм юморҙың тейешле кимәлдә булмауының бер сәбәбе яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың эсенә "Цензура" ғәли йәнәптәренең ныҡлап ултырыуына ла бәйле. Ә бит хатта совет осоронда ла журналдың популяр саҡтары булды. Хәҙер юмор һәм сатира яҙыусы әҫәрен яҙыр алдынан ҡырҡ төрлө уйлай, икеләнә, шул икеләнеүҙәре аша яҙа. Артабан яҙма мөхәррир ҡулына барып эләгә һәм баяғынан да күберәк һәм көслөрәк икеләнеүҙәр башлана. Гәзит-журналдарҙа пародия юҡҡа сыҡты. Миңә заказ да биреүселәр булды, әммә күбеһен кире ҡаҡтылар, сөнки тәнҡитләргә табу һалынған яҙыусының әҫәренә пародия яҙғанмын икән.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Беҙҙә юмор менән сатираны ҡабул итеү мәҙәниәте лә бик түбән. Мәҫәлән, Мәскәүҙәге эстрада артистары президенттан башлап, кемдәрҙе генә ҡыҙған табаға баҫтырмайҙар, беҙҙә иһә был мөмкин түгел.

▸ **Әхтәм ағай, һеҙ: "Беҙ маҡтанып ыраҡ йәшәй башланыҡ, сатира һәм юмор онотола башланы", - тиһегеҙ. Ә бит ошо күренешкә ситтән ҡараһаң, көлкөнөң дә көлкөһө. Шулай түгелме?**

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Үҙенә етди булып тойолған хәл-күренешкә ситтән ҡараусылар көлөп ҡарай икән, был - парадокс. Бынан тыш, трагикомедия тигән төшөнсә лә бар. Комедия жанры ла бар. Беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, артистар тамашасыны сәхнәлә барған ваҡиғалар шауҡымында түгел, адекват булмаған хәрәкәт яһап, әйтәйек, башын йә артын тырнап көлдөрә. Был юмор түгел.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Мин көлөүҙе оҫта итеп алдауға ла тиңләр инем. Элек 1 апрелде Алдау көнө тип аңлап, ул көндө кемделер алдарға тырыша инек. Хәҙер ул көндө Көлкө көнөнә әүерелдерҙеләр. Һин кемделер юҡ-бар һөйләп, уның ысынлығына инандыра алһаң, был, ысынлап та, көлкө.

▸ **Тимәк, көлкөнө һәм юморҙы беҙ алдау йә алданыу тип тә атай алабыҙ була түгелме?**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Түгел. Мәҫәлән, комедиялағы герой өсөн ундағы ваҡиға, киссреш ысын, көлкө булмаһа ла,

***✓ Улар менән бергә эшләгәндән һуң үҙемдең дә алдаҡсы икәнемде асыҡланым. Сөнки улар бала кеүек һәм уларҙа алдау тойғоһо бөтөнләй юҡ. "Алдыҡ беҙҙә закон тарафынан тыйылған", - тип яуап бирҙеләр.***

был тамашасы өсөн көлкө. Телевизорҙан барған "Үҙ-үҙенә режиссер" тапшырыуындағы сюжетта кемдер атлап барған еренән боҙло һыуға "шап" итеп барып төшә. Ул кешегә бит бер ҙә көлкө түгел.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Алданған йә ауыр хәлгә ҡалған кешегә бер ваҡытта ла көлкө түгел. Ошо хәлгә ҡалдырған кеше унан көлә. Бары тик алданған йә ауыр хәлгә ҡалған кеше күпмелер ваҡыт үткәс кенә үҙенең был хәленән көлөп ебәреүе мөмкин.

**▸ Алдау кеше күңеленең ыңғай сифатымы?**

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Минә өс американлы менән "Иисус" тигән фильмдың башҡортса дубляжын яһарға тура килде. Быға тиклем мин үҙемде алдаҡсы кешемен тип уйламай инем.

тең һәр төрлө тармағына тиклем таралған.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Беҙҙең алдау баҙарҙағы сауҙәгәр алдауынан ныҡ айырыла, ул күберәген кешенең күңелен ҡыйыуҙан ҡурҡыуҙан тыуғандыр, тип тә уйланыла. Хужа Насретдин дә башҡаларҙы алдауҙан үҙенә файҙа көтмәй, киреһенсә, алдау юлы менән ул ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы көрәшә, иҙеүселәрҙе фашлай бит.

**▸ Юморҙың халыҡ күңелендә баҫырылып йәшәүенең бер сәбәбе тарихыбыҙға ла бәйлелер, тип уйланыла. Сөнки унда үҙ еребеҙҙе һаҡлап, ихтилалдарға күтәрелеүҙәр, яу сабыуҙар күп ҡан ҡойоуға, ҡорбандар биреүгә килтергән. Оҙон көйҙәребеҙҙәге сөңгөл һағыш та халыҡтың фажиғәһенә бәйле. Әлбиттә, бындай**

ятып мәрәкә күрһәтеүҙәргә тиклем барып еткән. Еңеүселәргә баһаны ауыл халҡы биргән. Еңелгән урам халҡы өйҙәренә ҡайтып, тыныс йоҡлай алмаған, сираттағы "спектаклдәргә" сюжеттар, этлектәр уйлап, беҙҙеңсә әйткәндә, әҙерҙәнеп, үҙҙәренән көлөүселәрҙең ауыҙын япҡан. Бындай ярыштар беҙ бала саҡта бара ине әле. Аулаҡ өйҙәрҙә, "Наза" уйындарында ҡыҙҙар менән егеттәр таҡмаҡ әйтеп ярыша торғайны. Башҡорт театры 1919 йылда ғына барлыҡҡа килгән, тигән фекер төптө дөрөҫ түгел. Был йылда быға саса халыҡ араһында мәңге йәшәгән театр дәүләттекенә әүерелгән генә.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Беҙҙең ауылда клуб һәм мәктәп булмағас, ауылыбыҙ сәсәндәренең "сәхнәһе" бүрәнә өҫтө һәм табын түре була торғайны. Бүрәнә

да телмәр тота икән: "Бына мине, һеҙҙе ашатмай, тип әрләйҙәр. Ниңә, мин һеҙҙең ауыҙығыҙҙы ҡаплап ҡуйғанмы? Һеҙҙең өсөн мине ауыл халҡының дөйөм йыйылышында бештеләр..." Ә кәзә-һарыҡтар һаҡалдарын һелкә-һелкә, барыһы ла быға ҡарап торалар икән. Был хәлде күргән хужалар ни уйлағандыр, ул яғы беҙгә ҡараңғы. Бер мәл ул ағайҙың: "Сталин, маһ-маһ!" - тип этен саҡырғанына шаһит булдым. Нишләп этен шулай атағанын һорағайным: "Барыһы ла Сталинды онотоп бөттө, исмаһам, исеме этемдә булһа ла ҡалһын", - ти.

**▸ Тормоштағы диуаналарға ҡарашығыҙ нисек? "Үҙ диуанаһын ҡарай алмаған ауылға бәлә килер", тигән аңлау ҙа бар.**

**▸ Әлеге тормошобоҙ хаҡында, тарихҡа ҡағылмайынса ғына, трагикомедия яҙып буламы? Ул әҫәр нимә тураһында булыуы ихтимал?**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Хәҙерге тормошобоҙҙоң ниндәй генә өлкәһен алма, һәр урында ла трагикомедия бар. Әгәр ҙә беҙ шул күренештәргә күҙ йәше аша көлөп ҡарамаһаҡ, беҙ уларҙы трагедия тип тә атай алыр инек. Әммә күңелебеҙҙең киңлеге быларҙы трагикомедия тип нарыҡлай. Әгәр ҙә беҙ уларҙы трагедия тип ҡабул итһәк, бөгөндән ятып үлергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, хәҙер бына урамға сыҡ та, автобусҡа ултыр. Бөтә урында ла нефткә хаҡ төшөп ята, ә беҙҙә автобустарға хаҡ 50 процентҡа арта, бына - трагикомедия.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Флорид Бүләковтың барлыҡ сәхнә әҫәрҙәре лә трагикомедия жанрында. Мәҫәлән, уның "Әбейҙәргә ни етмәй?" әҫәренең төп идеяһы шулай: "Кеше күңелен аңламайынса яҡшылыҡ эшләү ҙә трагикомедия". Эйе, хатта яҡшылыҡ та кешеләргә трагедия килтереүе мөмкин. Әгәр ҙә һин халҡыңдың уйын, күңелен аңламайынса уға яҡшылыҡ эшләһәң, был халҡыңа трагедия булып әйләнеүе мөмкин. Ҡыҙыҡ фәлсәфә. Автор халҡыбыҙ психологияһының сөңгөлөнә ҡарап ижад итә.

**▸ Трагедияның комедияға әйләнеү механизмы кеше психологияһына һалынған тип тә иҫәпләргә була бит был осраҡта...**

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Шулай. Әйтәйек, һин аэропортта ҡайҙалыр осоп китергә йөрөйһөң. Радио аша самолеттың осоу ваҡытының бер сәғәткә кисектерелеүе хаҡында хәбәр итәләр. Быны һин трагедия итеп ҡабул итәһең, тағы ла бер сәғәткә кисектерәләр, хәҙер инде пассажирҙар түҙемлеген юя. Шунан өсөнсө тапҡыр кисектереү хаҡында хәбәр иткәстәре, әҙерәк көлөп ҡуяһың, дүртенсегә кисектерелгәс, шарҡылдап көлә башлайһың. Тормошта шулай, бер үк нәмә төрлөсә ҡабул ителә.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Имтиханды күҙ алдына килтерегеҙ. Һынау бирергә инергә торған студент өсөн имтихан - трагедия, биреп сыҡҡаны өсөн - комедия. Тимәк, ситтән ҡарағанда, имтихан - үҙе трагикомедия.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ менталитетын сағылдырған башҡорт юморы бай, кинәйәгә һәм ишараға ҡоролған һәм ул сәнғәт һәм әҙәбиәт кимәленә күтәрелмәйенсә, асылда, халҡыбыҙ күңелендә йәшәй, тигән фекергә килде әңгәмәлә ҡатнашыусылар. Беҙ бөгөн бер үк ваҡытта башҡорт әҙәбиәтендә, сәнғәтендә һәм мәҙәниәтендә башҡорт характеры, башҡорт менталитеты хаҡында һүҙ алып барабыҙ икән, бында башҡорт юморы хаҡындағы фекергә лә урын булырға тейеш.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

# КӨЛӘ АЛА ИКӘН...

## киләсәге бар

Ә бына улар менән бергә эшләгәндән һуң үҙемдең дә алдаҡсы икәнемде асыҡланым. Сөнки улар бала кеүек һәм уларҙа алдау тойғоһо бөтөнләй юҡ. Һорашҡайным: "Алдыҡ беҙҙә закон тарафынан тыйылған", - тип яуап бирҙеләр. Мәҫәлән, һин машинаңды һатырға булдың да, кем менәндер хаҡын килешкәс, ул аҡса алырға ҡайтып китте, ти. Шул ваҡыт эсендә икенсе берәү килеп, һиңә ҡиммәтерәк хаҡ тәҡдим итте икән, ти. Әммә һин хатта ҡиммәтерәк хаҡҡа булһа ла уға машинаңды һата алмайһың. Әгәр ҙә һатһаң, алдан килешкән кеше һинең машинаңды тартып ала һәм суд аша мораль зыян хаҡын түләтә. Был осраҡта мин икеләтә отолам. Мин американдарҙан: "Бер нисек тә иҫбатлап булмай торған алдау ҙа була. Ундай алдауҙар ҙа юҡмы ни һеҙҙә?" - тип тә һораным. Улар миңә: "Бик һирәк кенә булһа ла осрай беҙҙә ундай алдаҡсылар. Әммә ундайҙарҙы беҙ иҡтисади яҡтан үлтерәбеҙ, бойкот иғлан итәбеҙ үҙенә. Беҙҙең система шундай итеп ҡоролған: алдаҡсы кеше хаҡындағы мәғлүмәт тиҙ арала бөтә илгә таралып өлгөрә һәм уның менән эш итеүҙән барыһы ла баш тарта", - тип аңлаттылар. Ә беҙ иһә башҡа кешене генә түгел, үҙ-үҙебеҙҙе лә алдайбыҙ ҡайсаҡ. Үҙ-үҙебеҙҙе алдайбыҙ һәм шуға үҙебеҙ үк ышанабыҙ ҙа, үҙебеҙҙе аҡлап ҡуябыҙ. Американлыларҙың был халәте миңә бала-сағалыҡ, көлкө булып күренде.

Алдауҙың беҙҙең халыҡта бик күркәм өлгөләре бар. Алдар исеме лә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Ололар һөйләүе буйынса, беҙҙең төбәк халҡы ҡаҙаҡтар менән аралашып йәшәгән һәм төрлөсә бер-береһен алдарға, һемәйтергә тырышҡан. Бындай дәғүәселек сәсәндәр әйтешенән башлап, көнитмеш-

**осраҡта халыҡ күңеле бер нисек тә юмор, көлкө менән бәйле була алмай. Ошо инерция һаман да һаҡланмаймы икән, тигән уй ҙа бар күңелдә.**

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Бындай уй минең дә күңелемдә йөрөй. Башҡорт халҡы меңәр йылдар буйына Уралына табынып, уның өсөн йәнен фиҙа ҡылып йәшәгән. Юҡҡа ғына "Урал батыр" эпосын халҡыбыҙҙың Ҡөрьәненә тиңләмәйҙәр. Ошо ергә тоғролоғо арҡаһында халҡыбыҙ бик ауыр фажиғәләр кисергән. Һөҙөмтәлә меңәр йылдар буйына һуҙылған фажиғәләр ауыр кисерештәр тыуҙырған. Шул һағыш бигерәк тә оҙон көйҙәребеҙҙә сағыла.

Бәлки, шуға күрәлер ҙә беҙҙең юмор күберәген кинәйәгә, ишараға күскәндер. Ә инде кинәйә һәм ишара менталитет юғарылығынан килә. Беҙҙең ауылда өс урамдың халыҡ телендәге исемдәре бар: "Таҙҙар", "Татарҙар" һәм "Айыуҙар" урамдары. Өс урамдың да әсе телле вәкилдәре бар ине. Өс урам сәсәндәре билдәләнгән бер ваҡытта клуб алдында йә башҡа урында йыйылған да, үҙ-ара мәрәкә, һүҙ ярышы башлар булған. Сәсәндәр араһына берҙән-бер маҡсат ҡуйылған: кем-кемдән нисек көлә ала? Уларҙың әйтешенә ошо урамдар вәкилдәре, барлыҡ ауыл халҡы тамаша ҡылған. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, ундағы ярыштар спектакль ҡуйыуҙарға, һүҙ менән аңлатып булмаған саҡта ергә, бысраҡҡа

өҫтө менән өҫтәл арты шуныһы менән айырыла: бүрәнә өҫтөндә бер яҡлы, өҫтәл артында ике яҡлы кешеләр - хужалар һәм ҡунаҡтар йыйыла һәм улар араһында үҙенән-үҙе тоҡанған әйтеш, һүҙ көрәше була. Шунда уҡ таҡмаҡ әйтешеү ҙә, бейешеп ярышыу ҙа тоҡанып китә. Бер мәл беҙгә Әбйәлил районынан ҡунаҡтар килде һәм беҙҙекеләр улар менән таҡмаҡ әйтеп ярышты. Урындағылар һәр ваҡыт үҙҙәрен һәйбәт итеп күрһәтеү маҡсатында ситтән килгәндәрҙе кәмләргә, үҙҙәре уларҙан өҫтөн булырға тырышҡан. Ошо рәүешле ике арала дәғүәләшеү, һүҙ көрәше үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә һәм таҡмаҡтарҙың төп йөкмәткеһе лә ике яҡтың бер-береһен тәнҡитләүенә ҡорола. Былар барыһы ла минең бала саҡ хәтирәләремә уйылып ҡалған.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Һәр бер ауылдың үҙенең клоуны ла була. Әйткәндәй, "клоун" һүҙе "ҡыланыу"ҙан алынманымы икән? Беҙҙең ауылда шундай бер ваҡ мал көтөүсеһе бар ине. Уны, малдарҙы насар көтәһең, тип әрләйҙәр икән. Ул ағас япраҡтарын ҡырҡып, кәзә-һарыҡтарға ашатыр булған. Бер ваҡыт ул малдарҙың хужалары килеүен күреп ҡала ла, йүгереп барып ҡайын башына менеп китә. Барлыҡ кәзә-һарыҡтар ҡайын янына эркелешеп, баштарын күтәреп, бының япраҡ һындырып төшөреүен көтәләр икән. Ә көтөүсе тегеләр алдын-

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** Аҡыллы кеше генә башын иҫәргә һала ала. Ә беҙҙең тормоштағы ахмаҡ кешеләр аҡыллы булып күренергә тырышып йөрөй. Аҡыллы кешегә ниңә аҡыллы булып ҡыланырға, ул, киреһенсә, башын иҫәргә һалып, үҙен һаҡлап ҡалырға тырыша.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Башыңды иҫәргә һалһаң, йәшәүе лә еңел һәм һиңә теймәйҙәр ҙә.

**Ә. АБУШАХМАНОВ:** "Һиңә рәхәт, һин - дурак", тигән һүҙбәйләнеш тә юҡҡа тыумағандыр инде. 1937 йылда күп кенә яҙыусыларҙы, артистарҙы ҡулға алып атҡандар. Ғиниәт Ушанов золом машинаһынан имен ҡотолған. Милләт өсөн янған, профессиональ башҡорт театрын, милли сәнғәтте үҫтереүгә бөтә көсөн һалған кеше бит инде ул. Баҡтиһәң, уның бер класс та белеме булмаған икән. Әгәр ҙә уның 7 класс белеме булһа, мотлаҡ рәүештә ҡулға алырҙар ине. Уның ошолайтып йөрөүе наҙанлығынан килә, тип уйланылар микән? Ни тиһәң дә, наҙан кеше "халыҡ дошманы" була алмай бит. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ғиниәт Ушанов халҡыбыҙ өсөн уҡығандарҙан да күберәк эшләгән. Донъяла ошондай ҙа парадокстар бар.



***Хәҙерге тормошобоҙҙоң ниндәй генә өлкәһен алма, һәр урында ла трагикомедия бар. Әгәр ҙә беҙ шул күренештәргә күҙ йәше аша көлөп ҡарамаһаҡ, беҙ уларҙы трагедия тип тә атай алыр инек. Әммә күңелебеҙҙең киңлеге быларҙы трагикомедия тип нарыҡлай. Әгәр ҙә беҙ уларҙы трагедия тип ҡабул итһәк, бөгөндән ятып үлергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, хәҙер бына урамға сыҡ та, автобусҡа ултыр. Бөтә урында ла нефткә хаҡ төшөп ята, ә беҙҙә автобустарға хаҡ 50 процентҡа арта, бына - трагикомедия.***

✓ Пенсияға сыҡмаҫ элек спецпродуктҡа көнөң ҡалмаһын. Ҡабып ҡына ҡараным, әп-әсе, ауыҙға алғыһыҙ нәмә икән. Ике-өс бөртөгөн ҡабырға була, артығы күңелде болғата башлай... Быныһын Кирәй әйтте.






Ишғәли йәшәгән ауылда ҡош-ҡорт тотмаған бер йорт та юҡ. Өс-дүрт тауыҡ булһа ла яҙ, йәй айҙарында һәр урамда ем сүпләп йөрөйҙәр. Әтәстәре, ҡупырайып, улар араһында урала. Әммә Ишғәли менән йәмәғәте Хәсбиҙең тауыҡтарының иҫәбе-һанына сығырлыҡ түгел, үҙҙәре әйткәнсә, йөҙ илленән аша, буғай. Моғайын, фәстерәләрҙ-ер, шулай ҙа барыбер йөҙҙән кәм түгел. Ә бына шул тиклем тауыҡтар араһында, ышанаһығыҙмы-юҡмы, ғәрәп иле солтаны һымаҡ ҡыҙыл тажлы башын текә сөйөп, күкрәк кереп, бары бер генә әтәс йөрөп ята. Ғорурлығына иҫең китер! Әсе тауышы биш әтәстекенә торорлоҡ! Ишетмәй, уянмай ҡалмаһындар типме, бөтә ауылға таралған хәтәр һөрәнде тәүләп ул һала. Унан инде бөтә ҡураларҙа әтәсләнеү башлана.

Тәүҙәрәк бына-бына пенсия йәшенә етәсәк Ишғәли менән Хәсбигә ауылдаштары, бигерәк тә йәштәш күршеләре Зиаф менән Кирәй, уларҙың ҡатындары: "Шул бушбоғаҙ әтәсеңдән ҡасан ҡотҡараһың, бөтә ауылды йоҡлатмай!" - кеүек тәнҡит һүҙҙәре әйтеп ҡараны, әммә хужалар әтәскә һүҙ тейҙ-ертмәне. Тора-бара күрше тирә-яҡтар ҙа был хәлгә ризалашты, ахырыһы. Ә инде ике яҡ күршеләре хатта һөйләр һүҙҙәрен шул "Горластай"ҙан (әтәсте шулай исемләнеләр) башлап ебәрер булдылар.

- Ҡарәле, - тине бер көндө Ишғәлиҙең уң яҡтағы күршеһе Зиаф, - шуны уйлап яттым әле. Күҙ алдыңа килтер: бер үҙеңә күпме ҡатын! Башҡа берәй ир-ат күптән хәлһеҙләнеп ауыр ине. Ә һинең Горластайға хоть бы што! Өҫтәүенә, яҡтырыр-яҡтырмаҫтан нисегерәк һөрән һала бит. Карауатыңдан осоп төшәрһең!

- Ысын ир-егет шулай булырға тейеш! - тип башын һелкеп, йылмайып ҡуйҙы Ишғәли гадугына (өс тиңдәш бер-береһен шулай атай) төрттөргәндәй. - Гаремы ла, сурты ла кәрәкмәй... Көнләш, гадук, көнләш!

- Кемгә көнләшергә кәрәктер, униһын ҡатының менән Хоҙай ғына белә инде. Ярай, сәмәй менән һыйлап, телеңде "сылт" иттереп астырғас, үҙең һөйләп бирерһең әле.

- Бар, алып кил, ҡарарбыҙ.

- Был юлы һинең сират...

Ошо һөйләшеүҙән һуң да көндәр-төндәр йылдам аға торҙо. Әтәс хаҡында ла һүҙ-хәбәрҙәр күбәйә барҙы. Хәҙер инде гадуктар Горластайҙың тәүге һөрәненән һуң уяналар ҙа урамға сығалар. Төнә бер көндө лә шулай булды. Тау һөҙәгенән һоро эшләпәле Зиафтың ҙур башы Кирәйҙең күҙенә салынғайны, ул, уң ҡулын һауала болғай-болғай, үҙенә саҡыра башланы. Кисә нығ ҡына төшөрөүҙән башы сатнап, ауыҙы кибеп уянған Зиаф, гадугының шешә төбөндә буласаҡ "шайтан һыуы"на өмөтләнеп, йүгерә-атлай килеп тә етте. Рәхмәт яуғыры, ысынлап та, уның ярты стакандан ашыурак бер ни тиклем әҙәм итерлек "төндә тыуған" нәмәһе булып сыҡты. Зиаф шешә боғаҙынан сәмәйҙе бер тынала ғолҡолдатып йотор-йотмаҫтан, Кирәй яңы хәбәрен һалдырҙы.

- Беләһеңме, - тине ул, үҙ йортонан тағы ла бер нисә аҙым алыҫлашып, - Ишғәли гадук теге Горластайына ҡалалағы спецмагазиндан спецпродукт алып ҡайтып ашата икән дә.

- Юҡтыр, - тине Зиаф, ирендәрен һөрткөләп.

- Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Әллә нисә пачка алған. Башҡаларға күрһәтмәйҙәр икән, һөйләнеп йөрөмә, көлөрҙәр, ти.

- Шул тиклем тауыҡҡа ул хәтле көс-кәрҙе ҡайҙан ала икән был Горлас тип уйлай торғайным да. Бына ҡайҙа икән хикмәт!

Ҡара әле, - тине Зиаф, гадугының еңенән тартып, - үҙең дә тәмләп ҡараманыңмы ул аҙыҡты?

- Ниңә ҡарамаҫҡа, ҡараным, - тине Кирәй, иҫе китмәгән төҫ менән. - Беҙ ҙә бит әле әтәс нәҫеленән.

- Әллә ҡатыныңды, Горластай кеүек шәбәйеп китеп, төн буйы шатландырҙыңмы? - Зиаф үҙ һорауынан үҙе кеткелдәп көлөп ҡуйҙы.

- Пенсияға сыҡмаҫ элек спецпродуктҡа көнөң ҡалмаһын. Ҡабып ҡына ҡараным, әп-әсе, ауыҙға алғыһыҙ нәмә икән. Ике-өс бөртөгөн ҡабырға була, артығы күңелде болғата башлай... Быныһын Кирәй әйтте.

- Кешегә япһарма, бисәне һөйөндөрөргә уйлап, үҙем көйшәнем, тиең.

- Бар, шәп булғас, үҙең тәмлә, бәлки, Горластайҙы ла уҙҙырырһың...

Ике күршенең был һөйләшеүенән һуң, бер таңда теге әтәстең тауышы ишетелмәне лә ҡуйҙы. Быға нығ аптыраған гадуктар Ишғәлиҙең үҙенән һорарға булдылар.

- Башҡаса Горластайҙың тауышын ишетмәйәсәкһегеҙ, ҡотолдоғоҙ, - тине Ишғәли, көрһөнөп.

- Нисек ишетмәйбеҙ? Әллә һуйҙыңмы? - тине Зиаф менән Кирәй бер тауыштан тиерлек.

- Төнөн үлеп ятҡан... - Ишғәлиҙең тауышы ҡалтыранып ҡуйҙы.

- Һәр нәмәнең сиге бар шул, көс төшкән инде, - тине Кирәй, әңгәмәгә йомғаҡ яһағандай.

Тиҙҙән Ишғәлиҙәр тиҫтәнән ашыу йәш әтәс һатып алды. Күршеләре, ауыл халҡы хупламаһа ла, әрләшмәнеләр, ауыр һүҙ әйтмәнеләр. Аңлайҙар бит: әтәсһеҙ, ирһеҙ донъя бармай. Тем более, хәҙер горластайҙар заманы.

## Өс ҡатлы өй, завод

1914 йылғы граждандар һуғышында ҡатнашып, Юлдыбай әсирлеккә төшә, аҙаҡтан Белоруссияла бер байҙа ат ҡараусы булып эшләй. Байҙың Маруся исемле ҡыҙы була. Юлдыбай Марусяға ғашиҡ була, уға Уралдың матурлығын, урмандарын яратып һөйләй, йырлап та ебәрә икән. "Өс ҡатлы йортом, заводым бар", - тип шыттырып та ебәрә, ти. Ҡыҙҙы шулай ҡыҙыҡтырып, ауылына алып ҡайтып китә. Килеп төшәләр, ауыл бәләкәй генә, тирә-яғы ҡара урман. Ҡыҙ ерһенмәй, илай, алдап алып ҡайттың, тип егетте әрләй. Юлдыбай аптырап ҡалмай, өйҙөң баҙы - беренсе, йәшәгән өлөшө - икенсе, ҡыйығы өсөнсө ҡат, тип күрһәтә. Дегет ҡайнатҡан соҡорҙо "завод" тип атай. Хәҙерге Йәҙгәр тигән утарҙа күп мал аҫрап, йәшелсә сәсеп, яҡшы ғүмер иттеләр.

## Әсәһе инеме ни?

Бер ауылда Вәли күршеһе Ғәлиҙең кәзәһен һуйған. Кәзәнең өс көнлөк бәрәсе ҡалған. Бер көн быныҡ бер туҡтауһыҙ баҡырыуына асыуы килеп, Вәли күршеһенән: "Ниңә ошо бәрәс баҡыра ла баҡыра ул?" - тип һораған. Ғәли аптырамаған: "Әсәһен һин һуйҙың бит", - тигән. Вәли: "Ә, ошо ҡороғорҙоң әсәһе инеме ни ул", - тип үҙен "тотторған".

## Туғанына китеп баралыр

Өләсәй урындыҡта йөн иләп ултырған. Ширлектән йүгереп тараҡан китеп бара икән. Ейәне быны күреп ҡалған да: "Өләсәй, тараҡан китеп бара, үлтерәйемме?" - тип һораған. "Юҡ, балам, үлтермә. Бик ҡабалан китеп бара, берәй туғанының хәлен белергә ашығалыр", - тип, тараҡанды үлемдән ҡотҡарған.

## "Поллитр много будет"

Элек 8-10 өйгә бер һөт айырткыс була торғайны. Униһы ла боҙолоп ҡуйғас, Хөбьямал инәй һөт айырткысты ауылдың тимерсеһе Ташилкин фамилиялы урыҫҡа йүнәтергә бирә. Тимерсе йүнәтә лә: "Хупьямалка, за ремонт сепаратор дай поллитр", - тигән. Инәй: "Ташилкин, поллитр много будет, я тебе литр отдам", - тигән. Тимерсе литрҙы алып, ҡыуана-ҡыуана сығып һыҙған.

## "Бергә булған кистәре"

Әбйәлил районы Мәйгәште ауылы урман эсендә генә. Эргәлә генә ҡарағайлыҡ, ҡайынлыҡ, урам уртаһынан йылға аға. Ошо матур тәбиғәтле ауылда Һәйет ағай менән Шәмсинур еңгәй һигеҙ балаға ата-әсә булып донъя көтә.

Хрущев заманы, кәзәгә яу асҡан мәл. Ағай 70 төрлө һөнәр оҫтаһы, егәрле хужабикә лә ҡалышмай: йөн иләй, ойоҡ, бейәләй бәйләй, шәл, балаҫ һуға, кейеҙ баҫа. Күңел асырға ла өлгөрәләр, ҡунаҡ саҡыралар. Ҡунаҡтарҙы сәй менән һыйлау мәле етә, сәйгә һөт юҡ, һыйыр быҙауламаған, еленләп тора. Ағай аптырап тормай, сығып, кәзәләрен ҡайтырға саҡырған:

Ҡайт, кәзә, ҡайт кәзә,
Ҡунаҡтарға һөт кәрәк.
Бынау хәтле ҡунаҡтарҙы,
Нисек һыйламаҡ кәрәк.

Урмандан кәзәләр ҡайта, ҡунаҡтар сәй эсеп хәл алғас, ағай таҡмаҡ әйтә:

Атыма ла, кәзәмә лә,
Сельхоз налог һалынған.
Ҡәһәр һуҡҡыр һуҡыр кәзә,
Үҙе барып яҙылған.
Атың һат, һыйырың һат,
Алып ебәр кәзәкәй.
Һауһаң - һөтө, һатһаң - ите,
Налогы ла бәләкәй.

Ҡунаҡтар рәхәтләнеп иҙәндә лә, оҙон урындыҡта ла бейей. Ағай таҡмаҡлай:

Тып-тып ямғыр төшә,
Синдектәге бойҙайға.
Аллаға шөкөр, Хоҙайға,
Эштәр китте уңайға.

Ҡунаҡтарҙы ағай шулай тип оҙата:

Мейестәре, мейестәре,
Мейестең кирбестәре.
Иҫегеҙгә төшөр әле,
Бергә булған кистәре.

## Күлдәге урҙала ҡалған

Элек кейем булмаған саҡта кешеләрҙең берәр генә күлдәктәре булған. Ҡунаҡҡа китер булһалар, тиҙ генә йыуып киптереп алғандар, йә булмаһа, күршеһенең кейемен һорап торғандар. "Күрше ебәрһә, барырмын", тигән һүҙ шул саҡтан ҡалғандыр әле.

Ғәффә инәй менән Яҡуп бабай ҡыҙҙарына ҡунаҡҡа китергә булған. Инәй бабайының күлдәген йыуып элә, тегеһе кәзекейен кейеп тора. Бик ашыҡҡандармы икән, ҡунаҡҡа барып инеп, кәзекейҙе сисәйем, тиһә, күлдәге юҡ. Инәй: "Күлдәген йыуып элгәйнем, урҙала тороп ҡалған", - тигән була ти.

## Яусы

Ҡыпсаҡтың бер егете кәләш эҙләй икән. Ауылдан Тамъяндан килен булып төшкән бер инәй үҙенә серҙәш, ауыл яғынан хәлдәр белешеп, аралашып йөрөрбөҙ, тип, теге егетте кәләшле итеү ниәтенән ат егеп тыуған ауылына килеп төшә. Ағай-эне кәңәшкә йыйылған, яусы инәйҙән егеттең ниндәйерәк кеше булыуын һорайҙар, ти. "Бына, күрәһегеҙме, ике аяғы бар. Аяҡтарына салбар, итек кейгән. Ат егә белә, ҡулдарына бейәләй кейгән. Атты ҡыуып килә, ат юртып бара, тәгәрмәстәр тәгәрәп килә, мин арбала ултырып киләм. Улым парлы булһын, тип теләп киләм", - тип яуап бирә. Яусыбыҙ мөхәббәтен таба алмай йөрөгәндәрҙе ҡауыштырып, теләктәренә ирешеп ҡайтып киткән.

**Бәширә УСМАНОВА.**

## Аттың боҙҙа ятып ял иткәне

Күрше ауылда кейәүҙә торған ҡыҙы ғаиләһе менән әсәһенең хәлен белешергә килә. Бер аҙ һөйләшеп, сәй эсеп, күңелдәре булғас, кисләтеп кенә 3-4 йәшлек ике улын ултыртып, ҡайтып та китәләр. Йылғаны аша сыҡҡанда аттары уңайһыҙ баҫып, боҙҙа тайып ҡолай. Аптырап ҡалған ике бәләкәскә "Ат ял итә", тип аңлата атаәсәһе. Ни өсөн тиһәң, өйҙәге ҡарт ҡайны балаларҙы һөйләндереп, былар менән булған бар хәлде белеп кенә тора икән, ә аттың ҡолап ятҡанын белһә, ул, һис шикһеҙ, быларға асыуланасаҡ. Шулай бер аҙ аҙапланып, атты торғоҙоп, ҡайтып етәләр былар. Балалар олатай-өләсәйҙәре янына инеп китә. Ул-был эште бөтөрөп, балаларҙы алырға ингән киленгә ҡайны мут йылмайып: "Ҡоҙағыйҙарға сәй эсергә барғанһығыҙ икән, ат боҙҙа ятып ял итеп алған икән", - ти. Балалар бар ерҙә сер тормай шул.

## Һүҙен тапҡан

Балалар менән аралашырға ятраҡан, йор һүҙле, кеше менән тиҙ уртаҡ тел таба белеүсе шуҡ бабай була торғайны ауылда. Бер көн ҡоҙаса тейеш ҡатын был бабайға 3 йәшлек бәләкәй ҡыҙын уның ейәндәре менән уйнарға ҡалдырып китә. Балаларға һорау биреп һөйләндерергә яратҡан ҡарт ҡыҙыҡайҙан: "Ҡоҙаса, һеҙҙең баҙ аҫтында араҡы бармы?" - тип һорай икән.

**✓ Ағайым инде лә ҡустыма: "Йә, шул ҡыҙҙарың туямы, юҡмы?" тип һорап ҡуйҙы. Уны-быны аңламаған ике иптәшем ҡып-ҡыҙыл булып, өҫтәл артынан тора башланы.**



## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

"Бар", - ти ҡыҙыҡай. "Күпме?" "Күп, эй уларҙың ҡағыҙын сыҫҡан ашап бөткән ул". "Ҡоҙаса, шулай ҙа минә берәүһен генә эсергә бирмәҫһеңме?" - тип төпсөнөүен белә ҡарт. "Уны әсәйем менән Разифа инәйем эсеп бөттө ул", - ти ҡыҙыҡай, нисек тә булһа бабайға эсергә бирмәү юлын табып.

### Һыҙайыҡмы?

Мәктәпкә яңы ғына эшкә килгән уҡытыусы ағайға коллегаһы ауырып китеү сәбәпле, ике класта бергә дәрес алып барырға тура килә. Алмашлап ике класҡа ла инеп, черчение дәресен уҡыта. Бер класында малайҙар: "Һыҙайыҡмы, ағай?" - тип һорай. Уҡыусыларының ихласлығына ҡыуанып, уҡытыусы: "Һыҙығыҙ", - тип, күрше кла-

тип ҡысҡырып, егеттәрҙе вагон эсенә индерҙе".

Хәбәренең аҙағында Әхиәр олатай: "Мин урыҫ телен яҡшы белмәгәс ни..." - тип өҫтәп ҡуйған була торғайны. Әллә торғаны менән бер көлкө, шуҡлыҡ оҫтаһы булған ҡарт шул рәүешле йәш һалдаттарҙың ниндәй алмаш булыуын һынағанмы икән?

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

### "Вәт, тощой..."

Колхоздарҙың гөрләп торған сағы. Бер-береһенә йөрешәләр, ярышалар, эштәрен тикшерәләр, КВН-дар үткәрәләр. "Заря" менән "Нур" күрше колхоздар. Бер-береһенә вәкилдәр ебәреп, мал ҡышлатыу, яҙғы сәсеүгә әҙерлек, техниканың торошон барлайҙар. Бер




ска сығып китә. Яңынан был класҡа әйләнеп килеүенә уҡыусылар юҡ, барыһы ла ҡасып ҡайтып киткән. Икенсе көнөнә класс йыйылышы үткәреп, уҡыусылары менән аңлашырға була. Әммә уҡыусылар юғалып ҡалмай: "Үҙегеҙ һыҙырға ҡуштығыҙ бит, ағай", - тип яуаплай бер тауыштан. Туған башҡорт телебеҙҙең ни тиклем бай мәғәнәле һүҙҙәре бар, тигән фекер менән килешмәйенсә булдыра алмай уҡытыусы.

### "На вагонам!"

Байым ауылында Әхиәр исемле шуҡ, йор һүҙле олатай була торғайны. Шаянлығы арҡаһында уның исеме менән бәйле күп ҡыҙыҡлы хәлдәр бөгөн булһа ла ауылдаштары хәтерендә йәшәп килә.

Баҫҡан ерендә оҫҡон сәсрәтеп торған Әхиәр олатай 50-се йылдар башында Ҡытай халыҡ республикаһында әрме хеҙмәтен үтәй. Әхиәр олатай инде "бабай" булып, хеҙмәтен тултырып ҡайтыр алдынан командирҙары һәм бер нисә иптәше менән яңы килгән һалдаттарҙы үҙҙәренә алмашҡа алырға тип, СССР сигенә сыға. Армия сафына яңы ингән йәштәрҙе Ҡытайға бара торған поезд вагондары алдына теҙеп ҡуйғас, командир ҡыҫҡа ғына телмәр тота һәм үҙ эштәрен тулыһынса теүәлләр өсөн егеттәрҙе "бабайҙар" ҡарамағына ҡалдырып китә. Әхиәр олатай бик яңғырауыҡлы, көслө һәм матур тауышлы ине. Иптәштәре: "Әйҙә, һин ҡыҫҡыр, ныҒыраҡ ишетерҙәр, вагондарға инеп ултырырға әмер бир", - тиҙәр. Әхиәр олатай, үҙе һөйләүе буйынса, тамағын ҡырып ебәреп, аруҡ көслө генә тауыш менән: "На вагонам!" - тип фарман бирмәһенме. "Минең ҡысҡырыуым булды, теҙелешеп торған егеттәр вагон баштарына үрмәләй ҙә башланы, - ти бабай. - Командирыбыҙ хәлде аңламай, йүгереп килеп етте. "Ниндәй әмер бирҙегеҙ?" - ти был. Был ваҡытта инде етеҙерәк егеттәр вагон өҫтөндә ултыра, кемдәрелер яңы үрмәләй генә. Командир "отставить" командаһын яңғыратып, һалдаттарҙы кире ергә төшөрҙө һәм: "По вагонам!" -

саҡ "Нур" вәкилдәре "Заря"лағы етешһеҙлектәрҙе бик аныҡ һәм ҡаты итеп әйтеп ҡайтып китәләр. "Заря"ның үҙе оҙон, үҙе ябыҡ рәйесе Мөхәмәтйән тегеләрҙе әрләй икән: "Вәт, тощой, тәнҡитләп маташа, мине әрләгәнсе, һимереп ал, тощойҙың тощойы бит", тип һөйләнә. Инеп-сығып йөрөүселәр Мөхәмәтйәндең "тощой" һүҙен ишетәләр ҙә, тышҡа сығып көләләр, йәнәһе, үҙенең тощойлығын белмәй! Һүҙ ауылға тарала. Мөхәмәтйәнгә был һүҙ гүмерлеккә йәбешә. Тишек йыртыҡтан көлә, тигәндәре ошолор инде.

### Елле салыу һөйәге

Мөхәмәт ағай гүмер буйы кешегә мал һуйышты. Бер көндө Исмәғилгә һыйыр һуйышырға ярҙамлаша. Сәй эсәләр, ағай ҡайтырға йыйына. Элек ни, салыу һөйәген һуйыусыға биреп ҡайтара торғайнылар. Исмәғил дә ҙур ғына тоҡҡа салыу һөйәген һала, ағай күрмәгәндә бер кирбес тә тыға. Мөхәмәт ағай моксайҙы алып ҡайта һәм әбейенә: "Бик ауыр, Исмәғил салыу һөйәген елле биргән ахыры", -тип ҡыуана. Асҡалар, тоҡта ҙур кирбес тә ята. Ағай бик гәрләнә, был ҡылыҡ уның сәменә тейә. Моҡсайҙы кире алып бара ла, солан тәҙрәһенә бәрә. Исмәғил йүгереп сыға, Мөхәмәт ағайҙы күреп ҡалғас, эште аңлап ҡалып, йылп итеп өйөнә инеп китә. Шунан аҙаҡ уға мал салышырға Мөхәмәт ағай килмәй башлай. Күрәһең, Исмәғил, тәләкә тәртә һындыра, өйҙә лә яндыра, тигән һүҙҙәрҙе белмәгәндер.

### Боже, все рибаки шоли?

Был хәл бынан байтаҡ йылдар элек булды. Салауат ҡалаһының комбинат эшселәре тәжрибә уртаҡлашыу өсөн Италияға бара. Ул мәлдә балон плащтар модаға сығып киткәйне. 25 эшсе шул плащты кейеп, Италияға барып төшә. Тәүге көн урынлашыу мәшәҡәте менән булалар, ҡалаға сыҡмайҙар. Икенсе көнөнә осрашыуға барырға кәрәк, быларҙы оҙатып йөрөүсе итальян килеп етә. Быларҙы күрә лә, күҙҙәре

шарҙай була бының. Бер аҙ торғас ҡына: "Боже, все рибаки шо ли?" тип һорай. Баҡтиһәң, Италияла бындай плащтарҙы балыҡсылар ғына кейә икән. Беҙҙекеләр бик ояла, ҡайтып һөйләйҙәр. Әле лә шундай плащ кейгәндә күрһәләр, "Боже, рибак шо-ли?" тип көләләр. Һәр ялтыраған алтын булмағандай, һәр кейем дә мода булмай шул - оятҡа ла ҡалаһың.

### Ҡыҙҙарың туямы шул?

Әсәйем дә, өләсәйем дә быҙауҙары орғасы булһа, "Ҡыҙым, ҡыҙыҡай" тип атай ине. Шулай бер ҡышҡы каникулда ике иптәш ҡыҙымды ҡунаҡҡа алып ҡайттым. Һөйләшеп сәй эсәбеҙ, өй йылы. Ағайым менән ҡустым мал тәрбиәләй, төнгөләккә бикләргә йыйына. Әлеге "Ҡыҙым" менән "Ҡыҙыҡай"ға ярма биргәндәр ҙә, улары һаман ялап бөтмәгән. Ағайым инде лә ҡустыма: "Йә, шул ҡыҙҙарың туямы, юҡмы?" тип һорап ҡуйҙы. Уны-быны аңламаған ике иптәшем ҡып-ҡыҙыл булып, өҫтәл артынан тора башланы. Эште һиҙеп, беҙ көлә башланыҡ, ҡыҙҙарға ла аңлаттыҡ. Һүҙҙең үҙенә тәгәйен ҡулланылышын боҙоу күп буталсыҡ, шаушыу сығарыуын онотorға ярамай бит ул.

### Деньга есть, девка есть

Хәсникамал инәй оло улы менән йәшәй. Ейәне Ғәйнулла егет булды, кәләш әйттерергә ниәтләнделәр. Туғандарының кәңәше менән күрше ауылдағы Миңниса тигән ҡыҙға баш ҡоҙа ебәрҙеләр. Баш ҡоҙа бер балағын сығарып, кейенеп-яһанып ҡына китә. Уның ҡапҡанан ингәнен күреп, ҡыҙ өй ишегенә арты менән тора. Был инде риза түгеллекте белдерә. Шулай баш ҡоҙаның юлы уңмай, "бәргеләнеп" ҡайта. Хәсникамал инәй эште аңлағас, ярһып китә: "Ҡайҙырмағыҙ, деньга есток девка есть, ҡурсаҡ кеүеген алырбыҙ, ысбадьбаһын да уйнарбыҙ, әсе балын как ысмитан тәпкүт тә итербеҙ". Уның һүҙҙәренән һуң ҡыҙ ҡайғыһы китә, барыһы ла көлә башлай. Көләп бөткәс, уның был һүҙҙәрҙе ҡайҙан белеүен һорайҙар. "Урыҫтар шулай һөйләй ҙә баһа. Мин уларҙан кәммени?" - тип кенә ебәрә. Ошо хәлдән һуң ауылда егет өйләнергә булһа, йә берәй эште хәл итергә кәрәкһә, деньга есток девка есть, тип һөйләшеү ҡалды. Ә инәй ейәненә икенсе ауылдан кәләш әйттерҙе.

Тормош шулай ҡоролған: ғүмер үтә, кеше үлә, ә эшләгән эше, ҡылығы, әйткән һүҙҙәре ҡала һәм быуындан-быуынға күсә.

### Минең атайым өлкән

Биби апай шаян кеше, күршеһенең 3 йәшлек малайы Ғәлимде гел шаярта икән. Бер көндө: "Әйҙә, атайың менән минең бабайҙы алыштырайыҡ", - ти малайға. Малайҙарҙың өйө бәләкәй генә, ә Бибиҙәрҙеке өҫ бүлмәле икән. Ғәлим оҙаҡ өндәшмәй торғас: "Атайҙы алыштырмайым, һинең бабайың бәләкәй генә, минең атай өлкән. Әйҙә, өйҙәрҙе алыштырайыҡ", - тигән. Үҙе йоҙроҡтай булһа ла, малайҙың аҡылы оло: ҙур өй алырға теләгән. Ҡарама буйға, ҡара аҡылға, тигәне дөрөҫ икән.

### Ҡурҡаҡтың мажаралары

Шул уҡ Бибиҙең 4 улы бар, әсәләренә оҡшап, үҙҙәре бик шаян. Бер бесәй балаһын бәләкәй саҡта шар шартлатып ҡурҡыта былар, меҫкенең хатта ҡолап китә. Шунан алып һәр шартлаған тауыштан ҡурҡҡанға "Ҡурҡаҡ" тигән атама тағалар. Бесәй яңы сыҡҡан себештәрҙе ялап-ялап ҡараша, яратмаған кешеһе килһә, әллә ниндәй тауыштар сығарып, "ирешә".

Малайҙар был саҡта янында ҡотортоп тора. Ҡайҙандыр отоп, "Аҡ түтәй" тип тә өндәшәләр бесәйгә, уныһы был һүҙҙе ишетеү менән һуғыша башлай икән. Бибиҙең валерианын табып ялай, йәшен булһа, шкаф эсенә ҡаса ине. Тағы әллә ниндәй һөнәрҙәре булды, циркың ары торһон. Йәне теләгән йылан ите ашаған, тигәндәй, малайҙар бесәйгә һөнәр ҙә бирҙеләр, кешеләргә мәҙәк тә күрһәттеләр.

### Серәкәйҙәр беҙ һорай

Йәй еттеме, бала-сағаға быҙау көтөргә ҡушыла. Азат менән Ғәли ҙә һаҙ буйында көтәләр, серәкәй ыҙалата. Ғәли ағаһынан: "Ағай, нинә серәкәйҙәр гел беҙ һорай ул, әллә баймаларын төпләйҙәрме икән?" - тип һорай. Эй, бала, һәр тере йән быйма кейә тиҙер инде.

### Бахыр балыҡтар

Йәй буйы ҡатын-ҡыҙ йылғала кер йыуа. Бер көндө Сәлим әсәһенә эйәреп, йылғаға килә. Бер аҙҙан: "Бахыр балыҡтарҙы кем шулай батырып бөткән икән, ҡолаҡтарына һыу инһә, һаңғырауланалар бит", - тип илай икән. Әсәһе, төрлөсә аңлатып, саҡ тыя малайҙы. Ҡолаҡҡа һыу инеү бәләһен апайҙарынан ишеткән икән.

### Дүрт күҙ

Ғәлимә инәй ғүмер буйы тегенде. Хәҙер күҙлек менән дә насар күрә, энәне өйҙәгеләрҙән һаплата. 4 йәшлек Зилә өләсәһенә: "Был күҙлегең бәләкәсәйгән бит, сынаяҡ аҫты ҙурлығын алдыр", - тип кәңәш бирә. Хикмәт күҙлектә түгеллеген аңламай шул.

### Һаранды һемәйтеүсе

Мәрғиә инәйҙе һаран, һыҡмыр ҙа тиҙәр. Күрше-күләнгә лә йомош бирә һалмай, бала-сағa ла бигүк инмәй үҙенә. Шулай ҙа күрше 5 йәшлек Фуат инештерә. Бер көн инәй унан: "Икмәкте иҡе ҡулына тоторлоҡ итеп телеп бирәйемме?" - тип һорай, был бик йоҡа тигәнде аңлата. Малай ҙа хәйләкәр икән: "Ике бармаҡ менән тоторлоҡ итеп тел, инәй", - тимәһенме. Ни эшләһен, инәй ҡалын итеп икмәк телеп бирә. Һаранды ла һемәйтеүсе үҫеп килә.

### Һары аҡса

Гөлсәсәккә әсәһе матур итеп күлдәк тегеп кейҙерҙе. Ҡыҙ шатлана, осона, күрше-тирәгә ҡотлатырға йүгерә. Ингән бер өйҙә: "Һары аҡса кәрәкмәй, аҡ йәки ҡыштырлап торғанын, кәнфитте бер ус бирегеҙ", - тип тәтелдәй. Ни хәл итмәк кәрәк, табып бирәләр, ҡотлайҙар. Киләсәктә юҡты ла таптырып алыусы кеше үҫә, тик үтә "суҡып" ебәреп кенә ҡуймаһын. Аҡса бәйәһен дә ныҡ аңламаҡсы үҙе.

### Ҡусты эҙләйем

Күрше Сәғиҙәнең өсөнсөгә улы тыуа. Бала-саға мәж килеп, шул бәпесте күрергә инә, бер ыңғайы кәнфитлә лә булып сығалар. Кендек әбейе тегеләргә, бәпәйҙе йылғаның тәрән еренән алдым, тип мәрәкәләй. Шуны ишеткәс, Заһит тигән малай ағаһының ҙур пинжәген, итеген кейеп, йылға буйына китә. "Нинә улай кейенеп алдың?" тиһәләр, ул: "Тәрән ерҙән ҡусты эҙләйем", - тип яуаплай. Заһит йылғаның тәрән еренә барып та төшә, ағып та китә, ярай әле ҙурыраҡ бер малай күреп ҡалып, ҡотҡарырға өлгөрә. Шаярһаң да белеп шаяр, шаҡай сығырлыҡ булмаһын, тигәнде кендек инәйе онотҡандыр шул.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



## БЕСӘЙЕҢ БУЛҺА...
### табип та кәрәкмәй

■ Бер кемгә лә сер түгел: йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып, дауалау һәләтенә эйә.

■ Йәшел сәй радиациянан һаҡлай, тигән фекергә килгән Ҡытай ғалимдары. Улар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ике сынаяҡ йәшел сәй эсеү, 1 әфлисун ашау компьютер экрандарынан таралған зарарлы нурҙарҙан һаҡлай. Йәшел сәйҙең япраҡтарында башҡа файҙалы элементтар менән бер рәттән, радиация тәьҫиренә ҡаршы торған матдәләр бар. Ә әфлисун яман шеште булдырмай, иммунитетты ла күтәрә.

■ Дөрөҫ туҡланмау сәбәпле, күп кеше эсәк ауырыуҙары менән яфалана. Канада табиптары асыҡлауынса, был проблемаларҙы хәл итеү өсөн бөтнөк (мята) нигеҙендә яһалған дарыуҙар химик юл менән яһалғандарынан һис ҡалышмай. Етмәһә, бөтнөк организмға зыян килтермәй. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар белдереүенсә, ябай бөтнөк майы химик дарыуға ҡарағанда яйыраҡ тәьҫир итһә лә, унан файҙа ла күберәк, осһоҙораҡ та.

■ Ғалимдар һәр магазинда ла һатып алып була торған йәшлек эликсирын асыҡлаған. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай. Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Быңдай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуы процесын аҡрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион эсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа кәметә.

■ Борсаҡтың организмға яҡшы тәьҫир итеүен беләбеҙ. Немец тикшеренеүселәре белдереүенсә, консервланған йәки киптерелгән борсаҡтың файҙаһы ҙур түгел. Ҡуҙаҡлыларҙа булған үҫемлек аҡһымы, В төркөмө витаминдары термик эшкәртеүҙән һуң юғала, был осраҡта борсаҡтың тәме лә үҙгәрә. Файҙалы борсаҡ ашарға теләүселәр яңы ғына өҙөлгән борсаҡты йыуып, ҡайнар һыуҙа бешекләп, һыуытҡыстың тундырыу камераһына һалып ҡуя ала.

■ Немец ғалимдары фекеренсә, йәшелсә һәм емеш-еләк ашаусыларҙың йөҙөндә һырҙар күпкә һуңыраҡ барлыҡҡа килә. Ғалимдар әйтеүенсә, һәр төрлө йәшелсә һәм емеш-еләк кешенең сәләмәтлеген нығыта, шулай ҙа ҡыҙғылт һары һәм ҡыҙыл төҫтәгеләренең тәьҫир итеү көсө юғарыраҡ була. Ҡауын, абрикос, манго антиоксидант урынына ҡулланыла ала. Билдәле булыуынса, антиоксиданттар күҙәнәктәрҙе таркалыуҙан һаҡлай. Шуға ла бындай төҫтәге емеш, йәшелсә яратыусыларҙың йөҙөндә һырҙар бөтөнләй тиерлек булмай. Сейә, мүк еләге, грейпфрут, ҡыҙыл алмалар, гранат ялҡынһыныу процесын туҡтата. Тик бының өсөн уларҙы даими ҡулланырға кәрәк.

СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# ҮҘЕБЕҘ ҮК АҒЫУЛАНАБЫҘ...
## үҙебеҙ үк дауа эҙләп ҡаңғырабыҙ




**Яныбыҙҙа тәмәке тартҡан кешеләрҙең күплегенә, уларҙың үҙен генә түгел, беҙҙе лә ағыулауына күнеккәнбеҙ инде. Был алама ғәҙәттең һаулыҡты ни тиклем ҡаҡшатыуын аңлап та, унан нисек ҡотолорға белмәгәндәр ҙә бихисап. Шулай ҙа көнкүреш наркотигына әүерелгән сирҙе еңгәндәр ҙә бар. Әйҙәгеҙ, шул кешеләрҙең береһенә һүҙ бирәйек.**

- Мин тәмәкене егерме биш йылдан ашыу тартам. Барыһы ла уйын кеүек башланғайны. Әрмегә барғас, башҡа һалдаттар иңғайына шаярғылап тарта башланым. Әлбиттә, унан алда ла тәмләп ҡарағаным бар ине. Тик ул күңелһеҙ хәтирәләр... Өлкән синыф уҡыусылары беҙҙе, кесерәктәрҙе, мәктәп бәҙрәфендә көсләп тәмәке тарттыралар ҙа, шарҡылдап көләләр. Шул саҡта ҡоҫоп, үлә яҙып ауырығанымды хәтерләйем. Әммә әрмелә барыһы ла яңынан башланды. Тәүҙә шаярғылап тарттым, унан беҙҙе, бер төркөм һалдаттарҙы, крәҫтиәндәргә уңыш йыйышырға ебәрҙеләр. Бында һәр һалдатҡа бер литрҙан ашыу шарап эсә торғанлыҡ. Урындағы халыҡ виноград үҫтергәс, был эсемлек йылға урынына аға ине. Ошо шарапҡа иҫереп, тәмәке тартырға күнектем дә киттем. Әрменән ныҡлап тартырға өйрәнеп ҡайттым, - тип хәтерләй илленән уҙған кеше. Ул шулай оҙайлы йылдар тартыуына ҡарамаҫтан, хәҙерге ваҡытта үҙендә тәмәкене ташларға көс тапҡан. Уның һөйләгәндәрен дауам итәйек:

- Етте, бөттө, шул ниндәйҙер ағыуҙы ташлай алмай ыҙаласы әле! Етмәһә, терапевт йөрәккә зарланыуымды тыңлағандан һуң, баш сайҡап: "Һеҙгә мотлаҡ тәмәке тартыуҙы ташларға кәрәк", - тине. Уны үҙем дә аңлайым да ул, килеп сыҡмай. Анализдарҙың насар, ЭКГ күрһәткестәренең дә ҡот осмалы булыуын күреп, ниәтләнем. Беренсе көн иҫ киткес оҙаҡ, күңелһеҙ булып тойолдо. Ярай әле, йорттағы бар тәмәкеләрҙе алдан ташлап бөтөргәйнем, юғиһә, түҙә алмаҫ инем...

Икенсе көн иртә менән дарыуханаға юлландым. Тәмәкеһеҙ түҙеү өсөн ни эшләргә икәнлеген һораным. Минә халыҡ телендә "никотинка" тип йөрөтөлгән һағыҙ тәҡдим иттеләр. Уның составында бер нисә процент никотин бар икән. Шуның менән мин дә үҙемде алдаштырырға тырыштым. Дәүләт тә ҡыҙыҡ та инде: тәүҙә төрлө-төрлө сигареттар менән кешеләрҙе ағыулай, унан уға ҡаршы дарыу сығарып, тағы аҡса эшләй. Мин дә шулай көнөнә унлап һағыҙ сәйнәй башланым.

Бөгөн тартмағаныма бер аҙна булды, тип... шуны билдәләргә булдым. Бер шешә һәйбәт кенә шарап һатып алдым. Ике фужер эскәндән һуң, үлтереп тартҡы килә башланы. Түҙеп тә булмай бит! Машинамды нисек ҡабыҙып, нисек тәмәке һатып алырға барғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Бер-бер артлы ике тәмәке көйрәтеп алдым. Баш әйләнеп, рәхәт булып китте. "Ярай, түҙгән йөрәк түҙә инде, ташлай алмам",-тигән һығымтаға килдем.

Ике аҙна үткәс, тағы йөрәк тотто. Был юлы ла тәмәкене ташланым һәм ни бары ике аҙна түҙә алдым. Унан тағы ла йышыраҡ тарта башланым. Бер төн йөрәк сәнсеп, оҙаҡ уйланып яттым. Балаларымдың киләсәген ҡуҙалларға тырыштым. Тик шул саҡта "Ә йөрәгемә инфаркт булып, ҡапыл үлһәм, кем уларҙы кейәүгә бирер, өйләндерер? Аталы балалар араһында кәм-хур булып йөрөрҙәр",-тигән уй башыма килеп, бик ныҡ ҡайғырҙым. Ауыр уйҙар йоҡо бирмәне, әммә таңға ҡарай әүен баҙарына киткәнмен.

Икенсе көндө күңелемдә бик ауыр тойғолар менән килеп уяндым. Оҙаҡ ҡына кисә нимә булғанлығын, ни өсөн кәйефем юҡлығын иҫемә төшөрҙөм. Барыһын да хәтерләгәс, ғәҙәттә, уяныу менән тәмәкегә тартылған ҡулым туҡтап ҡалды. Бер ниндәй һағышыҙ, тәмәке тартмайынса, көнөм үтеп китте. Минең хәлемдә тик "стажлы" тәмәкесе генә аңлай алыр. Шулай ыҙалай-ыҙалай, бер, ике, өс аҙна үтте. Йыш ҡына төшөмдә тәмәке тартам икән дә, шул ағыуҙы эҙләп, магазиндан-магазинға сабам икән, тип күрәм.Быңдай төштәр күрһәм, иртәнсәк мотлаҡ йә йөрәгем, йә үпкәм сәнсеп уянам. Минең был алама ғәҙәтемде ташларыма ышанмаған ҡатыным, оҙаҡ тартмағас, тәүҙә аптыраны, унан әллә ниндәй үлән сәйҙәре эсерә башланы. Кемдеңдер иренә нәҡ ошо үлән ярҙам иткән, йәнәһе. Унан эшкәртөлгән тоҙ "ходка" китте. Бар ашты шуны ҡушып бешерә. Белмәйем, нимә ярҙам иткәндер, ташланым тәмәкене. Әммә мине алда тағы ла ҡатыраҡ һынау көтә ине.

Тәмәкене ташланым инде тип йөрөгәндә, ҡунаҡҡа саҡырҙылар. Бик матур туй юбилейы ине ул. Әлбиттә, бер нисә рюмка тоторға тура килде. Бынан һуң эсемдәге шайтаным тәмәке таптыра башланы. Етмәһә, ир-егеттәр араһында тартмаған бер кеше юҡ. Улар менән баҫҡысҡа сығып торам. Тегеләрҙең ҡомһоҙланып тәмәке һурыуын күреп, йәнем көйә. Тамам түҙә алмай башлағас, берәүҙең тотоп торған тәмәкеһен һорап алдым. Уның янғанын ҡарап-ҡарап торҙом да, кире бирҙем. Ир-егеттәр: "Ярай, бер-икене һур инде, нимә этләнәһең?"- ти башланы. "Кәрәкмәй, тәмәкене тартырға теләк бармы икән, тип һынап ҡына ҡарағайным, юҡ икән", - тип инеп киттем. Минең өсөн борсолоп ултырған ҡатыным ҡыуанып китте. Шунан һуң, ысынлап та, тәмәке менән мәңгегә хушлашҡанымды аңланым...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәмәке - көнкүреш наркотигы, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ә бит ҡайһы бер халыҡтың сәләмәтлеген ысынлап та яҡшыртыу өсөн тырышҡан илдәрҙә алама ғәҙәттәренән арынған кешеләргә аҡсалата дәртләндереү ҡаралған. Ә беҙҙә эсмәгән, тартмаған кешегә ауырыуға ҡараған кеүек ҡарайҙар, уны "боҙорға" тырышалар. Аңламаҫлыҡ хәл был. Шулай ҙа һәр кем ғүмер тик бер тапҡыр бүләк ителеүен аңлап...**

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

БАҠСА

# МӘШӘҠӘТТӘРҘЕҢ...
## күңеллеһе башлана

**Апрель айында һауа торошо үҙгәреүсән була. Ай баштарында ҡар ирей башлай, ә апрель тамамланыуға ер сағыу йәшкелт төҫкә инә. Был айҙа иң мөһим баҡса эштәре - ерҙе әҙерләү һәм ҡайһы бер культураларҙы сәсеү. Әммә яҙ һуңыраҡ килгән йылда был эштәрҙе 10-15 көнгә һуңыраҡ башлаһаң да ярай.**

Апрель парник һәм теплицаларға үҫемлектәр сәсеү өсөн ҡулайлы мәл. Әгәр ҙә көҙҙән быяла теплицаны дезинфекциялап өлгөрмәһәгеҙ, уны тыштан һәм эстән яҡшылап йыуырға кәрәк. Ә полиэтилен теплицаға яңы япма япҡандан һуң ер йылынһын өсөн ике аҙна бер нәмә лә сәсмәй тороғоҙ. Теплица эсендәге ер кипкәс, тупраҡты баҡыр купоросы (10 литр ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ купорос), ә теплицаның ағас каркасын каустик соданың 10 процентлы иҙелмәһе менән эшкәртереү уңышты яҡшырта. Үҫемлектәрҙе теплицаға күсереп ултыртыуҙан алда тупраҡҡа янған тиҙәк (1 м2 ергә 0,6 биҙрә тиҙәк), 1-әр биҙрә торф һәм ағас көлө ҡатыштырырға кәрәк. Янған тиҙәк урынына 2-шәр ҡалаҡ "Кемира-универсал" ашлама комплексы йәки растворин, йәиһә 1-әр ҡалаҡ суперфосфат, калий сульфаты ҡулланырға ла ярай. Ел булмаған асыҡ урында парник эшләп ҡуя алаһығыҙ, тик был урынға ҡояш нурҙары төшөп торорға тейеш. Парникта йәшелсә асыҡ һауала үҫкәненә ҡарағанда, 15-20 көнгә алдараҡ өлгөрә. Апрель аҙағында ҡыяр өсөн түтәлдәр әҙерләгеҙ. Түтәлгә ҡайнар баҡыр купоросы (1 биҙрә һыуға 1 ҡалаҡ купорос) һипкәндән һуң, 15 см ҡалынлығында янған тиҙәк, торф, ағас юныҡсыһы, көл һибеп сығығыҙ.

Апрелдә баҡсалағы тупраҡ ни тиклем дымға туйынып ҡала, шул тиклем яҡшыраҡ була. Ер кибеү менән ҡуҙалаҡ, йыуа, эстрагон сәсергә мөмкин.

Күп йыллыҡ йәшелсә культураларын күсереп ултыртыу, һуған, һарымһаҡ сәсеү өсөн дә иң ҡулай ваҡыт. Кишер, петрушка, пастернак орлоҡтары ла һыуыҡҡа бирешмәй, улар хатта 3-4 градус йылылыҡта ла шытып сығырға һәләтле. Әгәр ҙә юл ситтәрендә үгәй инә үләне сәскә ата башлаһа, тупраҡтың температураһы 5 градусҡа еткән, тигән һүҙ. Был ваҡытҡа кишер, петрушканы ҡурҡмайынса сәсергә була.

Апрелдә теплицаға салат, кресс-салат, пекин кәбеҫтәһе үҫентеләре ултыртырға онотмағыҙ. Ай аҙағында теплицала йәки өйҙә базилик, майоран, иссоп, тимьян һәм башҡа тәмләткестәр сәсергә була.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

## Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

* * *

Һуңынан Иблис кешенең насар сифаттары тураһында һөйләне һәм уларҙы нисек ҡулланыуы тураһында аңлатты.

Алдашыу:

- О, Мөхәммәт, алдашыу минән икәнде белмәйһеңме ни? Һәр ялған һөйләүсе - минең әшнәм.

Алдап вәғәҙәләр биргән һәр кемде мин шул тиклем яратам.

Мин нисек Аллаһ исеме менән ант итә-итә Әҙәм менән Һауаны алданым, иҫләмәйһеңме ни?

"Һәм уларға: "Мин һеҙгә яҡшы нәсихәт биреүселер", - тип ант итте" ("Әл- Әғрәф", 7/21).

Ялған вәғәҙәләр - минең күңел байрамы.

Ғәйбәт һәм фетнә:

- Ә кешенең үҙе булмағанда уның тураһында насар һөйләүгә (ғәйбәт) һәм улар араһында ыҙғыш һәм талаш таратыуға (фетнә) килгәндә, былар - минең эшемдән емештәре. Уларҙың был гонаһҡа төшкән ваҡыты - минең өсөн оло байрам.

"Айырылышам" тип ант итеү:

- Шаяртып булһа ла "айырылышам" тип әйткән һәр кем гонаһҡа төшә. Хатта бер генә тапҡыр, хатта рөхсәт ителгән эш өсөн әйтһә лә.

"Талаҡ" һүҙе менән айырылышыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан һәр кемгә, дөрөҫлөк иҫбат ителмәйенсә тороп, ҡатынына барыу рөхсәт ителмәй. Әгәр ҙә шундай мөнәсәбәттәрҙә уларҙың балалары тыуһа, улар зинанан тыуған, тип иҫәпләнә. Шундай эштәрҙе эшләгән кешеләр тамуҡҡа эләгә.

Намаҙ:

- О, Мөхәммәт! Намаҙ уҡыусыларға нимә эшләүем хаҡында һөйләргә ваҡыт етте.

Әгәр ҙә кемдер намаҙ уҡырға йыйынһа, мин уны тоткарлайым. Уға вәсвәсә бирәм. Уға: "Ваҡыт әле бар. Өҫтәүенә, һинең эшең күп. Әлегә эшеңде бөтөрә тор. Намаҙҙы һуңынан да уҡып өлгөрәрһең", - тип әйтәм.

Шулай итеп, ул намаҙҙы һуңлатып уҡый. Шул сәбәпле уға намаҙы кире ҡайтарыла.

Әгәр ҙә ул мине еңеп сыҡһа... Мин уға кешеләр араһынан шайтан ебәрәм. Һәм ул намаҙ ваҡытын үткәреп ебәргәнсе уның иғтибарын икенсе яҡҡа йүнәлтеп, намаҙын онотторасаҡ.

Әгәр ҙә ул был осраҡта ла мине еңһә... Мин уны намаҙ ваҡытында бүлдерергә тырыша башлайым. Уға: "Уңға ҡара, һулға ҡара", - тип әйтәм. Һәм ул тирә-яғына ҡарана башлаясаҡ. Шул ваҡыт мин уның маңлайынан үбәм дә әйтәм: "Бына һин кәрәкмәгән нәмәне эшләнең дә инде".

Шулай итеп уның кәйефен боҙам.

Һин бит беләһең, о, Мөхәммәт, Аллаһы Тәғәлә тирә-яғына ҡаранып торған кешенең намаҙын ҡабул итмәй.

Әгәр ҙә был осраҡта ла ул минән өҫтөн сыҡһа, мин уға намаҙын янғыҙ ҡылған ваҡытта киләм һәм: "Намаҙыңды тиҙерәк ҡыл", - тип әйтәм. Һәм ул намаҙын ҡабаланып уҡый башлай. Хас та ем сүпләгән әтәс кеүек...

Әгәр ҙә был осраҡта ла уны еңә алмаһам, уға ул намаҙын йәмәғәт менән уҡыған саҡта киләсәкмен. Уның башын ауыҙлыҡтар менән сырмайым... Уны рукуғтан һәм сәждәнән һуң имамдан алда баш күтәрергә мәжбүр итәм...

Ошо ҡылығы өсөн Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәлә уның башын ишәктекенә әйләндерәсәк.

Ләкин был осраҡта ла ул миңә эйәрмәһә, мин уға бармаҡтарың менән уйна, тип вәсвәсә бирәм. Намаҙ ваҡытында ул быны эшләй башлаһа, мин маҡталған эш эшләнем булыр.

Әгәр ҙә уға көсөм етмәһә, янынан барам да уның танау тишегенә өрәм. Минең һулышымдан ул иҫнәй башлай.

Ул ауыҙын ҡулы менән ҡапламайынса иҫнәй башлаһа, уның эсенә ерҙәге ләззәттәргә, байлыҡтарға ынтылышын арттырған бәләкәй шайтан инеп китер.

Шул ваҡытта был кеше беҙгә генә буйһонасаҡ. Беҙҙең бойороҡтарҙы тыңлаясаҡ. Беҙ ниндәй әмер бирәбеҙ, шуны ғына үтәй башлаясаҡ.

* * *

Шайтан һөйләүен дауам итте:

- Һин нисек өммәтең именлектә буласаҡ, тип өмөт итә алаһың? Эх, мин уларға ниндәй генә тоҙаҡтар әҙерләмәнем... Шундай ҡапҡандар...

Ярлыларға, йәберһетелгәндәргә, өмөтһөҙлөккә төшкәндәргә киләм дә: "Намаҙ һеҙҙең кеүектәргә мотлаҡ түгел, Аллаһ уны кем һау һәм бай - шуларға тәғәйенләгән" , - тим.

Шунан ауырыу янына киләм һәм уға ла шыбырлайым: "Намаҙ һиңә мотлаҡ түгел. Һауыҡҡас, намаҙ ҡылыуыңды дауам итерһең... Аллаһы Тәғәлә бит шулай бойорған:

"Һуҡыр, аҡһаҡ, ауырыу кешеләргә лә, үҙегеҙгә лә үҙ өйөгөҙҙә, атайығыҙҙың, әсәйегеҙҙең, ағайэнегеҙҙең, апай-һеңлегеҙҙең, атайығыҙ һәм әсәйегеҙ яғынан туған тейеш кешеләрҙең йәки ҡулығыҙҙа асҡысы булған кешенең, дуҫығыҙҙың өйөндә бергә йәки айырым ултырып ашауҙан гонаһ юҡ" (Ән-Нур, 24/61).

Шулай итеп, улар намаҙ ҡылыуҙан туҡтайҙар, ә ҡайны береүҙәре имандан бөтөнләй ситләшә.

Ә ауырыу килеш кеше намаҙ уҡыуҙан туҡтаһа һәм үлеп ҡалһа... Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына барып баҫҡанда ул үҙендә Уның асыуын тойор.

Артабан шайтан:

- О, Мөхәммәт! Әгәр мин үҙемдең һөйләгәндәремдә саҡ ҡына булһа ла ялған өҫтәһәм, мине саян саҡһын. Эйе, әгәр мин алдаһам, Аллаһтан мине көлгә әйләндереүен һора, - тип ант итте.

О, Мөхәммәт! Нисек инде һин үҙеңдең өммәтең өсөн тыныс була алаһың? Мин бит һинең өммәтеңдәге һәр алтынсы кешене диндән тайпылырға мәжбүр иттем!

**(Дауамы бар).**

БЫЛ - ГОНАҺ!



## БӘЙҒӘМБӘР ИСЕМЕНӘ ЯЛҒАН ҺҮҘҘӘР ТАҒЫУ

Ҡайһы бер Ислам ғалимдары Бәйғәмбәр исеменән ялған һөйләүҙе көфөрлөк һәм Исламдан сығыу тип һанай. Ысынында, күрәләтә Аллаһҡа һәм Бәйғәмбәргә ялған һүҙҙәр таҡҡан, хәләлде - харам, харамды - хәләл тиеүсе кешеләр динһеҙ була. Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Мосолманға алдашыуҙан һәм хыянатсы булыуҙан башҡа һәр төрлө характер үҙенсәлектәре хас", - тигән. Был хәҙистәр, хәҙис уйлап сығарыу асыҡтан-асыҡ рөхсәт ителмәгән эш икәнлеген раҫлай.

## ҺУҒЫШ ЯЛАНЫНАН ҠАСЫУ

Ҡөрьәндең "Әнфәл" сүрәһенең 16-сы аятында: "Янынан һуғышыр өсөн сигенеү, үҙегеҙҙекеләр менән ҡушылыу йәки уңайлы урын алыу өсөн ваҡытлыса һуғыш яланынан китеү ярай, әммә башҡа шарттарҙа сигенеү - Аллаһтың язаһына дусар булыу, тигән һүҙ. Уларҙың урыны - йәһәннәмдер. Ул бик тә хәтәр яза урыны", - тип әйтелә. Аллаһ илсеһе (салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ете һәләкәтле гонаһты һанаған ваҡытта һуғыш яланынан ҡасыуҙы ла әйтеп үткән.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уйың ниндәй, үҙең дә шундай

Үҙенең рухи вәғәзендә Ғайса бәйғәмбәр: "Емештәре буйынса уларҙы белерһегеҙ", - тигән һәм былай тип дауам иткән: "Күгән ҡыуағынан виноград йәки дегәнәклектән инжир йыялармы?" Шулай һәр яҡшы ағас яҡшы емеш, ә алама ағас алама емеш бирер". Ул кешеләрҙе бер нәмә һөйләп, икенсеһен эшләгән ялған бәйғәмбәрҙәр тураһында шулай ҡарата киҫәткән. Ул бындайҙарҙы һарыҡ тиреһе бөркәнгән бүреләр тип атаған. Бынан тыш, ул беҙгә тормошта уңыш ҡаҙаныр яҙам итерҙәй бик мөһим ҡанун тураһында әйтеп биргән.

Үҙендең тормошонда уникаль шарттар табыу Ғайса бәйғәмбәр әйткән емеш булып тора ла инде. Сәләмәтлегеңдән, аҡса мәсьәләһенән, кешеләр мөнәсәбәтәнең, йәшәү сараларының торошо - былар барыһы ла билдәле менталь позиция емештәре. Әгәр һиңә йыйған емештәрең оҡшамай икән, йәғни һәр ваҡыт ауырыйһың, матди яҡтан ауырлыҡ кисерәһең, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡора алмайһың, эшең оҡшамай икән - былар барыһы ла һинең бүтән ағас емеше булыуың тураһында һөйләй.

Риүәйәттәр авторы "Кешенең уйы ниндәй, үҙе лә шундай", тигән. Ул беҙ ни уйлаһаҡ, шул һис шикһеҙ тормошта ашасағын аңлаған. Һинең үҙеңә һәм тормошҡа ышаныcың һин башҡарған бөтә нәмәлә лә сағыла. Уңышлы кешенең тормошо уның уңышҡа лайыҡлы булыуына инаныуынан килә. Марианна үҙен барыһынан да насырараҡ, тип иҫәпләгән һәм уның тормошо ошоға ярашлы емеш биргән. Уға күпте көтөргә ярамай, сөнки тормош бик ауыр һәм ғәҙелһеҙ, тип әйтә килгәндәр. Шуға ла күп йылдар буйы уның тормошо ошо ҡарашына ярашлы емеш килтергән. Ул фәхишә һәм наркоман булып киткән, даими рәүештә төрмәгә эләккән. Бер ваҡыт ҙур магазин бүйлап йөрөгәндә Марианна эргәһенән үтеп барған ҡатындың сумкаһынан янсығын урлаған. Унда бер нисә доллар аҡса, кредит карточкаһы һәм ваҡ-төйәк әйберҙәр араһында бәләкәй генә китапсыҡ ятҡан. Ул ҡиммәтле әйберҙәрҙе генә алып, ҡалғандарын ташларға иткән, әммә уның иғтибарын китапсыҡ тышындағы: "Аллаһ ҡоло булараҡ, һин әле алып барған тормошоңа ҡарағанда яҡшыраҡына лайыҡлыһың", тигән яҙыу йәлеп итә. Ошонан һуң Марианнала сәйер үҙгәрештәр күҙәтелә башлай. Уның тормошҡа һәм кешеләргә ҡарата һалҡын, ҡаты мөнәсәбәте йомшара бара. Китапсыҡтағы һүҙҙәр уның күңелендәге таныш, бығаса файҙаланылмай онотолоп ятҡан, әммә ахырынаса иҫтән сыҡмаған тойғоно уятҡан. Ул үҙе лә аңламаҫтан, урлаған янсығын хужаһына тизерәк алып барып биреү теләге менән янған. Янсыҡ эсендә ятҡан чектан телефон номерын табып, Марианна шул уҡ көндә теге ҡатынға шылтыратҡан. Ул үҙенең насар эшләүен һәм тиҙ арала янсыҡты ҡайтарырға теләүен белдергән. Ҡатын уға бер ниндәй ҙә насар һүҙҙәр әйтмәй, киреһенсә, уны аңлап, ихлас күңелдән тыңлай һәм үҙенең мағазиндарының береһендә эшләргә тәҡдим итә. Шулай итеп, ул Марианнаға үткән тормошондағы әсе тәжрибә йөгөнән ҡотолоп, үҙенә ҡарата ышаныс яуларға ярҙам итә. Ваҡыт үтеү менән йәш ҡатындың тормошо башҡа төрлә емештәр килтерә, ул уларҙа тик яҡшыны ғына күрә белергә өйрәнә.

Йөрәгең ни әйтһә, шуға ҡолаҡ һалғанда һәр ваҡыт уңыш килә. Әгәр һин тормошта яҡтылыҡҡа һәм гармонияға ынтылаһың икән, быға әйә булырға лайыҡлы икәнлегеңә тулыһынса ышан. Эске инанысың уға ярашлы аҙымдарың менән берлектә көтөп алған емештәр килтерер.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 5 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 95-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 Время
21.30 "Цыганки", 9-я серия. Сериал
22.30 "Великая война. Битва за Москву". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.40, 03.05 "Сорок оттенков грусти"
03.00 Новости
03.50 "Ребенок любой ценой"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Гибель "Воздушного Титаника". Стратонавты"
10.00 "Срочно в номер"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер". Сериал
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 34-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 25-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Путейцы-2", 7-я и 8-я серии. Сериал
22.50 "Дежурный по стране"
23.50 "Вести+"
00.10 "Как найти идеал". Лирическая комедия
01.45 "Шизо"
04.00 "Гибель "Воздушного Титаника"

### НТВ

06.10 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00, 23.15 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.30 "Час Волкова". "Тонкая дипломатия". Сериал
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Футбольная ночь"
01.50 "Вор есть вор"
04.15 "Гнев"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Ватан. События недели"**
**10.00 "Погода"**
**10.05 "Полезные новости"**
**10.10 "Виктория". Сериал**
**11.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Земля: мощь планеты"**
**16.15 Гала-концерт победителей зонального конкурса исполнителей башкирской песни на приз им. З. Махмутова**
**17.20 "Виктория"**
**18.10 "Замандаш". С. Каримов**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Магариф"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Деловой форум"**
**20.55 Чемпионат КХЛ. 1/2 финала. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань)**
**23.30 Новости (на русск.яз.)**
**24.00 "Легенды спорта"**
**00.30 Новости (на башк. яз.)**
**01.05 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 6 АПРЕЛЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 96-я серия. Мелодраматический сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Цыганки", 10-я серия. Сериал
22.30 "Век воли не видать". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
02.40, 03.05 "В лучах славы"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Ефросинья", 35-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 26-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Путейцы-2", 9-я и 10-я серии
22.50 "Влад Галкин. Трудно быть героем..." Док. фильм
23.50 "Вести+"
00.10 "Инди". Мелодрама
02.00 "Горячая десятка"
03.10 "Откройте, милиция!"

### НТВ

06.00 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
21.25 "Мафия бессмертна". Боевик
22.15 Футбол. Лига Чемпионов. ЦСКА (Россия) - "Интер" (Италия). Прямая трансляция
01.00 "Лига чемпионов УЕФА. Обзор"
01.15 "Сегодня"
01.35 "Главный герой представляет"
02.25 "Главная дорога"
03.50 "Особо опасен!"
04.25 "Проклятие Эль Чарро". Фильм ужасов

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.25 "Хазина"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**12.45 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.30 "Антракт". Д. Амангильдина**
**17.15 "Виктория"**
**18.05 "Призвание - учитель". Послесловие к X Съезду учителей РБ**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.25 "Формула успеха"**
**20.55 Чемпионат КХЛ. 1/2 финала. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань)**
**23.30 Новости (на русск.яз.)**
**24.00 "Уфимское "Времечко"**
**00.30 Новости (на башк. яз.)**
**01.05 "Криминальный спектр"**
**01.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 7 АПРЕЛЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 97-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Цыганки", 11-я серия
22.30 "Среда обитания. "Левый" автосервис". Док. фильм
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "На ночь глядя"
01.00 "Конец романа". Мелодрама
03.00 Новости
03.05 "Маленькая деталь под названием убийство". Комедия

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "ВЧК против патриарха Тихона"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Ефросинья", 36-я серия
18.30 "Дворик", 27-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Путейцы-2", 11-я и 12-я серии
22.50 "Исторические хроники" с Николаем Сванидзе"
23.50 "Вести+"
00.10 "Смерть в кино". Детектив
01.40 "Честный детектив"
02.15 "Откройте, милиция!"

### НТВ

06.10 "Таксистка"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести-3". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Проклятые". Фильм ужасов
02.15 "Клинок ведьм"
04.05 "Особо опасен!"
04.45 "Тарзан и рабыня"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Виктория"**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык". Республиканский конкурс любителей башкирского танца**
**16.05 "Тивлет". Программа на чув. яз.**
**16.30 "Миякинская радуга"**
**17.00 "Солдаты Победы"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Учим башкирский язык"**
**18.20 "Герои ринга"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Курултай"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**23.45 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 8 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.20 "Спальный район", 98-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Цыганки", 12-я серия. Сериал
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Школа"
00.00 Ночные новости
00.20 "Судите сами"
01.10, 03.05 "88 минут". Триллер
03.00 Новости
03.20 "Мачты сбываются"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Ефросинья", 37-я серия. Сериал
18.30 "Дворик", 28-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Путейцы-2", 13-я и 14-я серии
22.50 "Освободители". Док. фильм
23.50 "Вести+"
00.10 "Предсказание". Драма
02.35 "Откройте, милиция!"

### НТВ

06.10 "Таксистка". Сериал
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Погибшие за веру"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30, 18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести-3". Сериал
19.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
22.20 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Марсельский контракт". Боевик
01.30 Футбол. Лига Европы. "Ливерпуль" (Англия) - "Бенфика" (Португалия)
03.35 "Лига Европы УЕФА. Обзор"
03.50 "Особо опасен!"
04.25 "Осиное гнездо"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Млечный путь". Р. Шайхутдинов**
**16.15 Мультфильм**
**16.30 "Суровая проза жизни"**
**17.10 "Виктория"**
**17.55 "Сэнгелдэк"**
**18.10 Новости (на башк. яз.)**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**18.55 Чемпионат КХЛ. 1/2 финала. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 9 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Обручальное кольцо", 208-я серия
16.20 "Спальный район", 99-я серия
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Манежное лошадиное чтение". Док. фильм
00.40 "Смокинг". Боевик
02.40 "Король бильярда"
05.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.00 "Срочно в номер"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Срочно в номер"
12.45 "Гражданин начальник"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия"
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Ефросинья", 38-я серия
18.30 "Дворик", 29-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Путейцы-2", 15-я и 16-я, закл. серии
22.50 "Дорога, ведущая к счастью". Мелодрама
00.45 "Тайна Чингис Хана". Приключения
03.30 "Наблюдающий незнакомец". Триллер

### НТВ

06.00 "Таксистка"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Сыщики". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Кодекс чести-3". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие"
20.55 "Гитлер. Враг № 1"
22.45 "Женский взгляд"
23.35 "Смертельная гонка". Боевик
01.40 "Гром в штанах"
03.20 "Букмекерская лихорадка"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Артылыш"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.55 Мультфильм**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Йома"**
**18.20 "Народные мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Доброе сердце"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 10 АПРЕЛЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Укрощение огня"
06.00 Новости
06.10 "Испытание верности"
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб: "Чип и Дейл спешат на помощь", "Черный плащ"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Смак"
11.10 "Моя родословная"
12.10 "Если можешь, прости"
13.00 "Турецкий Гамбит"
16.50 "Живой мир. "Жизнь". Док. фильм
17.50 "Кто хочет стать миллионером?"
19.00 "Предлагаемые обстоятельства". Детективный сериал
21.00 "Время"
21.15 "Жестокие игры"
22.50 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.30 "Вспомни, что будет"
01.30 "Остаться в живых". Сериал
02.20 "Братство камня". Триллер
04.10 "Последняя фантазия"

### РОССИЯ 1

05.55 "Пропавшие среди живых". Детектив
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00, 11.00 "Вести"
08.10, 11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Дон Кихот в волшебной стране". Полнометражный мультфильм
10.35 "Россия против Гитлера. Непокоренный рубеж"
11.20 "Качество жизни"
11.35 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Освободители". "Воздушный десант"
15.25 "Подари себе жизнь"
15.55 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
16.55 "Ты и я"
17.50 "Субботний вечер"
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Путь к себе". Мелодрама
00.35 "Вторжение". Триллер
02.35 "День животных". Фильм ужасов
04.35 "Комната смеха"

### НТВ

05.05 "Легион супергероев"
06.15 "Теория большого взрыва". Сериал
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "В поисках Франции"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Суд присяжных: главное дело"
17.50 "Очная ставка"
18.35 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50" Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео". "Идеальный шторм". Драма
01.10 "Мальчишник". Комедия
03.05 "Бремя страстей человеческих". Экранизация романа Сомерсета Моэма

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.00 "Советы садоводам"**
**10.20 "Волшебный курай"**
**10.55 "Хрустальный соловей"**
**11.40 Н. Наджми. "Друг гармонист". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**13.35 "На своей земле"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40, 19.20 "Дарю песню"**
**15.45 "Черный плащ". Мультсериал**
**16.10 "Букет моей жизни". М. Гиляжев**
**17.10 "Дуслык моно-2010". Гала-концерт**
**18.40 "Вестник "Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**20.10 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Родные напевы"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Судьбы радужные нити"**
**22.35 "На сон грядущий"**
**23.20 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 11 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Укрощение огня"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 Дисней-клуб: "Кряк-бригада", "Клуб Микки Мауса"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.00 Новости
12.10 "Фазенда"
12.50 "Севастопольские рассказы. "С нами Бог и сам Нахимов!"
13.40 "Лия Ахеджакова. Маленькая женщина в большом кино"
14.30 "Фото моей девушки". Комедия
16.00 "Белые росы". Лирическая комедия
17.40 "ДОстояние РЕспублики"
21.00 Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Южное Бутово". Юмористическое шоу
00.00 Футбол. Чемпионат России. V тур. "Зенит" - "Локомотив"
02.00 "Улыбка Моны Лизы". Мелодрама
04.10 "Теория невероятности"

РОССИЯ 1

05.35 "Женатый холостяк". Комедия
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Мальчик с пальчик"
09.30 "Огонь, вода и... медные трубы". Сказка
11.00, 14.00 "Вести"
11.10, 14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан. События недели"
11.50 "Городок"
12.20 "Черчилль"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.40 "Измайловский парк"
17.40 "Танцы со звездами". Сезон-2010"
20.00 "Вести недели"
21.05 "Сильная слабая женщина". Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "Перелом". Криминальная драма
02.20 "Сэнт Анж". Мистический триллер

### НТВ

05.05 "Легион супергероев"
06.15 "Теория большого взрыва"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 QUATTRORUOTE
10.50 "Спасатели"
11.25 "Первая кровь"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Алтарь победы"
15.05 "Своя игра"
16.20 "Королев. Обратный отсчет"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.25 "Грязная работа". Сериал
00.00 "Авиаторы"
00.35 "Футбольная ночь"
01.05 "Молодые и опасные-2". Боевик
03.05 "Истории юга"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Для вас, ветераны!"**
**08.40 Погода**
**08.45 Мультфильм**
**10.00 "Прогулки под водой". Док. фильм**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Телекомпас"**
**13.00 "Байык". Республиканский конкурс любителей башкирского танца**
**13.50 "Книжный дом"**
**14.50 "Дарю песню"**
**15.20 "Салям". Воскресный выпуск**
**15.40 "Черный плащ". Мультсериал**
**16.05 "Автограф". Т. Гарипова**
**16.50 Зональный конкурс исполнителей башкирской песни на приз им. З. Махмутова**
**17.35 "Мир глазами звезд"**
**18.10 "Пером и оружием"**
**18.35 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"**
**19.10 "Дарю песню!"**
**20.10 "Уральский самородок"**
**20.45 "В центре внимания"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.40 Погода**
**22.45 "Вечер.сом"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**


*ИҒЛАН*

**Хөрмәтле етәкселәр, эшҡыуарҙар һәм граждандар!**

Баш ҡалабыҙҙың Сосновская 1/1 урамындағы мәҙрәсәлә урынлашҡан "Нәсихәт - Беренсе Ислам реабилитация үҙәге" эскелек һәм наркоманияға һабышҡандарҙы ҡотҡарыу юлында эш алып бара. Әлеге көндә был ойошма ҙур матди ауырлыҡтар кисерә. Беҙҙең үҙәккә яҡшы шарттар тыуҙырыу өсөн мәрхәмәтлек ярҙамы һорайбыҙ.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт Нуриев, "Нәсихәт" төбәк йәмғиәт ойошмаһы рәйесе.**

✓ *Егеттәргә күберәк эшләргә, репертуарҙы байытыу һәм төрләндереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Рухлы, халыҡ йырҙары күберәк булырға тейеш - был төркөмдөң төү маҡсаты.*



ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ҠУСТЫЛАРЫ ЛА ШӘП,

## ағаларына лайыҡлылар



**20 мартта Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында башҡорт эстрадаһының легендар "Каруанһарай" төркөмө өр-яңы составта тәүге ҙур концерт программаһы менән сығыш яһаны. Бынан ике тиҫтә йыл элек рухлы, патриотик йырҙары менән халыҡты уяулыҡҡа саҡырып, дәртләндереп, ихлас күңелдән янып ижад иткән "Каруанһарай" төркөмөнә нигеҙ һалыусы артистар, хәҙер инде уның ветерандары, был юлы тәүге тапҡыр тамашасы ролендә үҙ концерттарын залдан ултырып баһалай алды. Уларҙың концерттан алынған тәьҫораттары, төркөмдөң йәш быуыны хаҡындағы фекерҙәре менән уртаҡлаштыҡ:**

**Әмир ТОЙҒОНОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:** Йәш каруанһарайҙарҙың профессионализмы юғары кимәлдә булыуын тәү сиратта уҡ әйтеп үтәм. Репертуарҙары яңырған - быныһы ла маҡтауға лайыҡ. "Каруанһарай"ҙың төп маҡсатынан тайпылмайынса, концерттың тәүге бүлегендә тере тауышҡа сығыш яһанылар. Халыҡсанлыҡ, фольклор стиле дауам итә. Концерттың икенсе бүлегендә йырҙарҙы фонограммаға йырлауҙары күңелгә ятманы. Халыҡ үлемһеҙ моңдо тере тауышҡа тыңларға, тип килә икән, уларҙың күңел талабын ҡәнәғәтләндерергә кәрәк. Йәш составтың үҙ йөҙө барлыҡҡа килгән, шулай ҙа ижади яҡтан ныҡ ҡына эшләргә кәрәк әле.

Тағы ла шул: тәүге бүлек театрлаштырылған тамашаға ҡоролоуы менән отошло булды. Бында Салауат ағай Низаметдиновтың тырышлығы һиҙелә. Егеттәрҙең тауышы көслө, сәхнәнән хор бик матур күренә, артабан да эште ошо йүнәлештә дауам итергә кәрәк.

**Рәсүл ҠАРАБУЛАТОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:** Ниндәйҙер йырҙы тәүге тапҡыр, йә үҙенсәлекле итеп халыҡҡа сығара икән - ул йырсы йырға нигеҙ һалыусы, уға ғүмер биреүсе булып тора. Шул уҡ йырҙы икенсе бер йырсы тота килеп башҡарһа, халыҡта инде сағыштырыу барлыҡҡа килә. Беҙҙең төркөм менән дә шул уҡ хәл. Халыҡ тәүге "Каруанһарай"ҙарҙы яратып өлгөрҙө һәм әле лә ярата. Ә йәштәргә, ғәҙәттәгесә, шик һәм һаҡ менән ҡарай - был тәбиғи. Егеттәргә күберәк эшләргә, репертуарҙы байытыу һәм төрләндереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Рухлы, халыҡ йырҙары күберәк булырға тейеш - был төркөмдөң төү маҡсаты. Йәштәргә сәхнәлә динамика етешмәй. Тамашасы алдында күңеләнде тулыһынса асып һалып, үҙеңде аямай, рух сәсрәтеп сығыш яһағанда ғына тулы уңышҡа өлгәшеп була. "Каруанһарай" кимәлен лайыҡлы дауам итерҙәренә егеттәрҙә өмөт бар.

**Мәхмүт НӘҘЕРШИН, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:** Мин йәш егеттәрҙе туплаған саҡта тәүге составҡа оҡшатып, төркөмдөң талаптарына тура килтереп һайлап алдым. "Тәүге ҡоймаҡ төйөрлө була", - ти халыҡ. Һүҙ юҡ, бәлки, концертта ҡытыршылыҡтар ҙа булғандыр. Киләсәктә һирәк яңғыраған халыҡ моңдарын, рухлы йырҙарҙы репертуарға туплау тураһында хәстәрлек күрергә кәрәк. Тамашасыларға вокал сығыш оҡшаны. Ыҫпай кейенеп, ғорур баҫып, төрлө юҫыҡта дәртле, моңло итеп йырлау - төркөмдөң йөҙө. Киләсәктә йәштәр йышыраҡ сығыш яһап, шымарып, тәүге составтан бер ере менән дә ҡалышмаҫ, тамашасы өмөтөн аҡлар, тигән ышаныстамын.

**Салауат НИЗАМЕТДИНОВ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре:** Элеккеһе лә, яңы состав та - икеһе лә талантлы. Тәүге "Каруанһарай"ҙа Рәсүл Ҡарабулатов, Артур Туҡтағолов һәм башҡа егеттәрҙең ижады оҡшаһа, йәштәрҙән Рөстәм Шаһыбаловтың музыкаль яҡтан юғары тауышлы, Заһир Иҫәнсуринды йомшаҡ, моңло тауышлы булыуын айырым билдәләп үтер инем. Төркөмдөң бренды бар, әммә ике быуында ла бер үк етешһеҙлек күҙәтелә: улар үҙ өҫтөндә аҙ эшләй. Йәштәргә үҙҙәренә талапсан булырға, репертуар яңыртырға, үҙгәрештәр индерергә, ижади эҙләнергә кәрәк.

**Әлфиә АХМАЕВА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

**Һәләтле, шаян, дәртле, һәр ваҡыт ижади эҙләнеүҙәр юлында булған Сәғиҙулла Байегет йыл һайын өр-яңы проекттары менән йыр-моң һөйөүселәрҙе ҡыуандырып тора. Былтыр "Йәштәр ҡалаһы" тип аталған концертына ситтән ҡунаҡтар саҡырып, зал тулы тамашасы йыйып, ҙур уңышҡа өлгәшкәйне. Сәнғәт әһелдәре фекеренсә, ул бик юғары кимәлдә үтте. Быйыл да Сәғиҙулла үҙенең һәм яратҡан кәләшенең тыуған көнөнә таманлап, "Яҙ, мөхәббәт..." тигән яңы музыкаль проект тәҡдим итә. Ул 9 апрелдә Конгресс-холда үтәсәк. Һүҙҙе Сәғиҙулланың үҙенә бирәйек:**



# СӘҒИҘУЛЛА БАЙЕГЕТ САҠЫРА

- Зөһрә Бураҡаева "Яҙ, мөхәббәт...", йәки "Ираттар өсөн психологик ярҙам күрһәтеү үҙәге" тип аталған сценарий яҙҙы. Был музыкаль проектыбыҙҙа психолог ролен башҡарыусы Хәким Мортазин һәм уның ярҙамсылары "Беҙгә барыбер" командаһы егеттәре ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән пациенттарға диагноз ҡуйып, кәңәштәр бирә. Ә пациенттар - йырсылар, тик әлегә уларҙың исемдәрен әйтмәйбеҙ, сюрприз булһын, әйҙә. Концерттың икенсе өлөшөндә ретро йырҙар, хиттар, сит телдәрҙә йырҙар башҡарасаҡмын. Һуңғы йылдарҙа халыҡ йырҙарына яҡыная башланым. Бигерәк тә "Илсе Ғайса", "Ҡысҡырмасы, кәкүк", "Сибай", "Ҡара Сурай", "Юлғотло", "Таштүрә" кеүек йырҙарҙы үҙ итәм. Шуларҙың бер нисәүһен концертымда ла йырлап ишеттермәксемен. Оркестр оҙатыуында ла сығыш яһарға уйлайым. Минең төрөк, шәреҡ мотивтарында йырҙар башҡарырға яратҡанды тамашасы белә. Улар ҡыҙҙарҙың ялҡынлы бейеүҙәре менән оҙатылып барасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Минең ижадыма битараф булмағандарҙы, йыр-моң һөйөүселәрҙе, дәртле тамашасыларҙы концертыма саҡырам, ә инде йырҙарым кемдәрҙең күңеленә хуш килмәй, килмәһәгеҙ ҙә була.**

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА яҙып алды.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 апрелдә** Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Эльвира Юнысованың **"Ҡабынғанда йөрәк усаҡтары..."** исемле юбилей кисәһе.

**4 апрелдә** Т.Дәүләтбирҙинаның **"Минең ғаиләм"** мелодрамаһы.

**6 апрелдә** Н.Ғәйетбаевтың **"Аты барҙың - дәрте бар"** комедияһы.

**8 апрелдә "Йәштәр модаһы форумы - 2010".**

**9 апрелдә "Әй эттәгенәһе, ирем ҡайтты!"** комедияһы.

**10 апрелдә** М.Бурانғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы.

**КЕМ АЛЫҠ?**

**Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе ике кеше театр тамашаларына саҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәгеҙ, кем алыҡ? 1.** Эльвира Юнысова күренекле актриса ғына түгел, тағын..? **2.** Эльвира Юнысованың быйылғы йылда башҡарған яңы роле?

**Яуаптар 8-937-3419192 телефон һандары буйынса шаршамбы көндө ҡабул ителә.**

### Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6-7 апрелдә** 19.00 сәғәттә У.Шекспирҙың **"Ромео һәм Джульетта"** трагедияһы.

**8 апрелдә** 15.00 сәғәттә М.Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса **"Донъяның ярҙары икәү"** спектакле.

**9 апрелдә** 11.00 сәғәттә С.Суринаның **"Алтын балта"** әкиәте.

### Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 апрелдә** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, ҡурайсы **Рушан Биктимеров** һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты, популяр йырсы **Венера Рәхмәтуллина** "ҠураЙыр" исемле шоу-концертына саҡыра. Йыр-моң кисәһендә Рөстәм Ҡудашев, Хәлит, Илшат, Айнур Фәтиховтар, Радик Вәлмөхәмәтов, "Түңгәүер" бейеү ансамбле һәм башҡалар ҡатнаша.

### "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайы

**"Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәниәт үҙәге Яҙыусылар союзы** менән берлектә 5 апрелдә 19.00 сәғәттә Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың "Хазина" поэмаһы буйынса театрлаштырылған кисә үткәрә. Инеү ирекле.

## *ҠОТЛАЙБЫҘ!*



Ҡурған өлкәһе Сафаҡүл районының Оло Солтан ауылында тыуып үҫеп, хәҙерге көндә Салауат ҡалаһында йәшәүсе ҡыҙым **Эльза Ғарифйән ҡыҙы ФӘТКУЛЛИНА**ны 30 йәше менән ҡотлайбыҙ.

Ҡыҙым кейәүем Йәмил менән күркәм донъя ҡороп, бер ҡыҙ һәм бер ул үҫтерә. Икеһе лә эшкә уңған, тырыштар. Кейәүем үҙ эшен асып ебәрһә, ҡыҙым 15-се мәктәптә рус балаларына башҡорт теле серҙәрен өйрәтә. Өйҙә ул уңған хужабикә, һөйөклө ҡатын, хәстәрлекле әсәй. Аш-һыуға, ҡул эшенә оҫта.

Һөйөклө ҡыҙым! Ғүмер миҙгеленең яңы йәшелеккә тулышҡан мәле. Уның һәр көнө, һәр сәғәте бәхеттә, шатлыҡ-ҡыуаныста үтһен. Кейәү менән бер-берегеҙҙең ҡәҙерен белеп, һөйөп-һөйөшөп йәшәргә, балаларығыҙҙы тәүфиҡлы итеп үҫтерергә яҙһын. Һиңә оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ, ғаилә бәхете теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән инәйең, ҡустың Радик, килененң Диана һәм Ҡурған өлкәһенән Фәхәрғәлиевтар.**

* * *

Учалы районы Ташҡыя ауылында йәшәүсе әзәйебеҙ **Хәснә БАПАНИНА**ны тыуған көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Һөйөклө әзәйебеҙ! Күҙҙәреңдең изге нуры, йөрәгеңдең ихласлығы, ҡулдарыңдың маһирлығы тормошобоҙға йәм өҫтәй. Киләсәктә лә балаларыңа, ейән-ейәнсәрҙәреңә терәк-таяныс булып, бергә-бергә шатлыҡта һәм ҡыуаныста оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын. Хоҙай һине һаулыҡтан, күңел тыныслығынан айырмаһын, һәр килгән көнгә, атҡан таңға ҡыуанып, йылы усағыбыҙ, һүнмәҫ ҡояшыбыҙ булып йәшә лә йәшә, әзәй!

**Иң изге теләктәр менән, ейәнсәрҙәрең Гүзәл, Лилиә, Булат, Вадим һәм Рәмис.**

АФАРИН!

# ӘСӘ ТЕЛЕНӘ ҺӨЙӨҮ...

## әкиәттән башлана




(Башы 1-се биттә).

Әкиәтселәрҙең беренсе ҡала конкурсында башҡорт телендә һөйләшә белгән балалар ҡатнашты. Конкурс өс номинация буйынса үтте: бәләкәй төркөм - мәктәпкәсә йәштәге балалар, уртансы төркөм - 1-2 класс, өлкән төркөм 3-4 класс уҡыусылары. Һәр сығыш 2-3 минутҡа һуҙылырға тейеш ине. Әкиәтселәргә әкиәттән өҙөк түгел, ә әкиәтте тулы көйө һөйләү талап итеп ҡуйылды.

Кескәй ҡатнашыусыларҙың әкиәттәрҙе башҡорт телендә бирелеп, хисләнеп, ихлас башҡарыуы һәр кемде һоҡландырҙы. Торғаны менән әртис инде үҙҙәре! Араларында матур әкиәт костюмдары кейеп, ҡурай моңо, башҡорт халыҡ йырҙары, һуҡма, дөңгөр, ҡумыҙ кеүек милли музыка ҡоралдары оҙатыуында әкиәт һөйләүселәр ҙә булды.

Толстойҙың: "Әкиәт халыҡтың беҙ бөртөкләп йыйған бөйөк рухи мәҙәниәте, һәм тап әкиәт аша беҙгә халыҡтың меңәр йыллыҡ тарихы асыла", - тигән һүҙҙәре бар. Ысынлап та, үҙебеҙҙең халҡыбыҙҙың да, башҡа халыҡтарҙың да беҙ әле белмәгән-ишетмәгән әллә күпме әкиәттәре бар икән дә баһа! Мәҫәлән, 13-сө башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбенең IV класс уҡыусыһы Гөлйөҙөм Тимербулатова һөйләгән "Ҡыҙ ебәк" әкиәтен бығa тиклем бер кемдең дә ишеткәне юҡтыр, сөнки был әкиәтте ул өләсәһенән ишеткән. "Өләсәйем әкиәттәрҙе шул тиклем күп белә, улар бер ниндәй әкиәт китаптарында ла осраған юҡ. Ул әкиәттәрҙе өйрәнеп, ҙурайғас, "Өләсәйем әкиәттәре" тигән китап яҙыр инем", - ти Гөлйөҙөм. Конкурсанттар башҡорт халыҡ әкиәттәренең китаптарҙа баҫылмағанын, донъя әкиәттәренең һирәк осраған дарын тапҡан, эҙләнгән. Улар һөйләгән әкиәттәр аша беҙ донъя халыҡтары тарихын, көнкүрешен, мәҙәниәтен күҙаллай алдыҡ, әкиәттәрҙең кешелек мәҙәниәтенең бөткөһөҙ хазинаһын тәшкил итеүен аңланыҡ. Быны ҡайһы ағы менән әһәмиәтле донъя халыҡтары әкиәттәре менән таныш булыу. Етмәһә, әкиәтте яттан сәхнәлә һөйләү балаларҙа сығыш яһауҙан ҡурҡмаҫҡа, үҙ-үҙен тота белергә, ҡыйыулыҡҡа өйрәтә.

- Теле барҙың - иле бар, тигән ата-балаларыбыҙ, - тине "Алтынай" студияһы директоры Алтынай Бурина. - Әсә телебеҙ юғалып ҡалмаһын, үҫешһен, киләсәктә йәш быуын ошо телдә аралашһын тиһәк, беҙгә бөгөнгө көндә ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Ана шундай изге маҡсаттар менән беҙ телебеҙҙе үҫтереүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә булдыҡ. Был юҫыҡта эшебеҙ уңышлы булһын өсөн әкиәттәрҙе һайланыҡ, сөнки туған телгә, әсә теленә һөйөү нәҡ ошо әкиәттәрҙән, өләсәйҙәр әкиәтенән, бишек йырынан башланалыр. Сабый өләсәһе, әсәһе һөйләгән әкиәттәр аша донъяны таный, предметтарҙы өйрәнә, әкиәт батырҙары, һылыуҙары менән бергә ҡайғыра, шатлана, үҙен шул әкиәт геройы итеп хис итә. Үкенескә күрә, баш ҡалабыҙҙағы башҡорт балаларының күбеһе урыҫса фекерләй. Әкиәтте башҡорт телендә һөйләү нәҡ башҡортса фекерләргә өйрәтә лә инде, сөнки әкиәт һөйләгән саҡта бала русса уйлағанын тәржемә итеп кенә ҡалмай, башҡортса фекерләй, уйлай. Унан, бала алдан әкиәтте сәхнәлә һөйләргә, тип ятлап әҙерләнеп килһә лә, барыбер уны яттан һөйләү менән генә хушһынмай. Уларҙың әкиәт һөйләгәндә үҙ һүҙҙәрен ҡушып ебәргәне, ҡабартыуҙары, сурытыуҙары күренеп тора. Бына шулай әкиәт һөйләү баланың фекерләү ҡеүәтен үҫтерә, телмәрен нығыта.

Әле конкурс баш ҡаланың ете районы буйынса үтте. Жюриға атаҡлы кешеләрҙе, билдәле шәхестәрҙе саҡырҙыҡ. Тәүге ҡоймағыбыҙ төйөрлө булманы, конкурс матур үтте. Быйылғы тәүге конкурста башҡортса фекерләй алмаған, насар һөйләшкән балалар артабан да ошо әкиәт конкурсында ҡатнашып китһә, бер нисә йылдан һуң уларҙың телмәрҙәрендә ныҡлы үҙгәреш булыр, тип ышанам.

Конкурстың гала-концертында әкиәткә нигеҙләнгән театрлаштырылған тамаша ҡурһәтәсәкбеҙ. Унда балалар үҙҙәре уйнаясаҡ. Конкурс килһе йылдарҙа ла үтәсәк, иншалла. Беҙ бының өсөн тырышасаҡбыҙ".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Конкурс быйыл тәүге тапҡыр ғына уҙғарылыуға ҡарамаҫтан, юғары кимәлдә үтте. Һәр йәш номинацияһы буйынса Гран-при, шулай уҡ I, II, III урындар, ә һәр номинация еңеүсеһенә конкурс лауреаты исеме бирелде. Балаларҙың барыһы ла тырышҡан, уларҙың һәр береһе еңеүсе исеменә лайыҡлы ине.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ШАПАҠ, СУТЫР, ҺАҢ,

## Шыпрахуш, луҡыш...

Мәсетле районының Яңы Мишәр (икенсе исеме Иҫәнбай) тигән бик бороңғо ауылында йәшәүселәрҙең телендәге үҙенсәлекле һүҙҙәргә иғтибар иттем һәм уларҙың бер нисәһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итмәксе булдым:

**Шапаҡ** - күп һөйләүсе кешене шулай атайҙар. Ә күп һөйләүсе ҡыҙ кешене шапаҡай тиҙәр.

**Сутыр** - тиҙ һөйләүсе кеше.

**Шыпрахуш** - бер нәмәһеҙ тороп ҡалған кешене шулай атайҙар. Әйтәйек, бер кешенең бисәһе айырылып, бөтә әйберен тейәп алып киткән дә, өй эсе буп-буш, хужаһы шыпрахуш ҡалған.

**Луҡыш** - һимеҙ, саҡ ҡыймылдап йөрөүсе йыуан кешене шулай тип атайҙар.

**Ибатәйһеҙ** - үтә шеп, үтә ҙур, килбәтһеҙ кешене шулай атайҙар.

**Һаң** - хуплауҙы аңлата. Бигерәк тә оло йәштәгеләр ҡуллана был һүҙҙе. Йәшерәктәр хәбәр һөйләһә,ололар улар әйткән һәр бер һүҙҙе дөрөҫләп, дәлилләп, раҫлап: "һаң, һаң...", - тип ултыра.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺАҠЛАРҒА КӘРӘК БУЛҒАН БӘХЕТ...

## бәхет түгел инде ул.

Хан ҡашында гәйебең булһа, ҡара ерҙән ҡайыҡ тарттыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡыл, ысынлап та, беҙҙең ҡатындар һымаҡ, уны йыш ишетәбеҙ, әммә уның мәғәнәһе тураһында һирәк уйланабыҙ.

**(Филип Честерфилд).**

Һаҡларға кәрәк булған бәхет... бәхет түгел инде ул.

**(Жильбер Сесброн).**

Дуҫтарығыҙға уларҙың етешһеҙлеге тураһында өндәшмәгеҙ - ул ғүмере буйына был етешһеҙлектәрен төҙәтеү менән буласаҡ һәм... һине күрә алмаясаҡ.

**(Логан Смит).**

Ҡатын-ҡыҙ менән идара итеүҙең ике ысулы бар, тик уларҙы... берәү ҙә белмәй.

**(Фрэнк Хаббард).**

Намыҫлы хәйерсе ҡайһы саҡ үҙенең хәйерсе икәнен онотоп та ебәреүе бар. Ә бына намыҫлы бай үҙенең бай икәнен бер ваҡытта ла онотмаҫ.

**(Гилберт Чистертон).**

Бер ваҡытта ла аҡланма. Дуҫтарыңа ул кәрәкмәй, ә дошмандарың барыбер ышанмаҫ.

**(Эльберт Хаббард).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше урманда йөрөп ятҡанда аҡһаҡ төлкөнө күреп ҡала. Уны күҙәтеп ултырып, кеше төлкөнөң ниндәй юл менән көн итеүенә шаһит була. Бына бер саҡ урман эсенән ит киҫәге һөйрәп, арыҫлан килеп сыға. Йыртҡыс итте бер генә ҡаба ла, уны төлкөгә ҡалдырып, юлын артабан дауам итә. Кешене был хәл уйландыра. Бер тәғәм ризыҡ табыу өсөн ыҙаланып, әллә күпме көс түгеп эшләгәнсе, бөлки, уға ла төлкө кеүек булырға, килер табышты көтөп ултырырғалыр? Ул шулай итә лә. Ергә ултыра ла, көтә башлай. Ваҡыт үтә, әммә кешегә берәү ҙә ризыҡ килтереп бирмәй. Ул асығып, көсһеҙләнә башлай. Урынынан да тора алмаҫ хәлгә еткәс, күктән тауыш килә:"Аҡһаҡ төлкө булма! Көслө арыҫлан бул, шул саҡта һин ас булмаҫһың, башҡаларға ла өлөш сығарырһың..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 1257